ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 июнь (һөтай) 2022
№24 (1014)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Нindәй һөнәр һайларға?**

Баш ҡатыра бөгөн ошо һорау



3,9

**Йәштәрҙе, балаларҙы...**

маҡсаттарын дөрөҫ билдәләргә өйрәтергә!



8-9

**Беҙ киләсәкте тәрбиәләйбеҙ**



11

**Тәжрибәм бар, уртаҡлашам**



12

**ТВ-программа** 14

**АРЗАНҒА ЯҘЫЛЫП ҠАЛ!**

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 6 июндән 20 июнгә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индексглы "Киске Өфө"гә 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 664 һум 66 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең быйылғы 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**Тәбиғәттең, был кеше ҡасан мине бысратыуҙан, урт һалыуҙан туҡтар, тип ҡурҡып ҡалтыранған мәле бөгөн. Ысынлап та, нисек туҡтатырға был мәхшәрҙе?**

***Сәфәрғәли ЙӘНТҮРИН, биология фәндәре докторы, профессор, РФ Юғары һөнәри белем биреүҙең маҡтаулы хеҙмәткәре:*** Бөгөн беҙ, дөрөҫөн әйткәндә, йәшәгән мөхитебеҙгә, тирә-яҡ тәбиғәтебеҙгә күп йылдар буйы битарафлыҡтың, уны һанламауҙың ҡоһорон күрәбеҙ, тип әйтергә тулы нигеҙ бар. Шулай булмаһа, һуңғы йылдарҙа айырыуса киҫкенләшеп киткән экологик көрсөк күренештәрен, бәлә-ҡазаларҙы нисек аңлатырға? Дөрөҫ, тәбиғәттең нисә йылға бер әйләнеп ҡайта торған һәм төрлө факторҙарға бәйле көрсөк циклдары була, ләкин улар барыбер илгә бөгөнгөләй күләмдә афәт килтергәне һәм кире ҡайтарғыһыҙ юғалтыуҙарға дусар иткәне юҡ ине әле. Урмандарҙы ҡырыу, аяуһыҙ ҡырҡыу һөҙөмтәһендә бик күп биләмәләр яланғасланып, бушлыҡҡа әйләнеп, тиҙ тоҡаныусан ҡый үләне баҫып алды; йылға-күлдәр ҡорой һәм ошо рәүешле экосистеманың тарҡалыу процесы башланыуына шаһитбыҙ. Һауа атмосфераһының бысраныу кимәле сиктән ашты, эсәр һыу кәмей, элек ишетеп кенә белгән океан арьяғындағы торнадо, цунами кеүек күренештәр беҙгә лә килеп етте, туҡтауһыҙ урмандар яна...

Минә йыш ҡына, королоҡ һәм эҫе көндәр элек тә ҡабатланып торҙо, ләкин ни өсөн бөгөнгө кеүек янғындар булманы, тигән һорау бирәләр. Элек бит мал күп ине, ҡыр һәм болондарҙы ҡаплап йөрөнө: колхоз-совхоз, малсылыҡ комплекстары, йәмәғәт малдары... Һәм улар ҡар яуғансы көтөүлектәрҙә йөрөп, бөтөн үләнде ашап, ерҙе тап-таҡыр итеп ҡалдырыр ине. Әле мал юҡ, бесән сабыусы ла һирәк хәҙер, шуға ла былтырғы үлән-бесән кибеп, ергә түшәлә һәм тиҙ тоҡаныусан хәүеф сығанағына әйләнә. Урманда усаҡ яғыусы вайымһыҙҙарҙың яуапһыҙлығы арҡаһында ҡыуарған үлән һәм ағастарға ут тоҡанып китеүе бар, йә булмаһа, трассанан китеп барышлай, машина тәҙрәһенән ырғытылған тәмәке төпсөгө лә янғын сәбәбе була.

Бындай хәлдәрҙе киҫәтеү өсөн экологик тәрбиәгә иғтибарҙы көсәйтергә кәрәк, айырыуса ғаиләләрҙә, сөнки бала атаәсәһе ҡыланғанды отоп алыусан. Мәктәптәрҙә экологик белем һәм тәрбиә, шул иҫәптән биология, зоология, география кеүек тәбиғәт менән бәйле фәндәрҙән белем тормошҡа бәйләп, күнекмәләр нигеҙендә бирелергә тейеш.

Әйткәндәй, биологтар күп ул беҙҙә, ә бына зоологтар әҙ. Ә бит экологик проблемалар биосфераның мөһим өлкәһе булған фауна - хайуандар донъяһына ла туранан-тура ҡағыла. Тәбиғәттә күпме йән эйәһе бар: йыртҡыс хайуанмы ул, һыу йәнлектәреме, әллә ваҡ ҡына бөжәктәр класымы - уларҙың йәшәйеше экосистеманың башҡа төрҙәрен дә йәшәтә, үҫешенә булышлыҡ итә. Үкенескә, экологик көрсөк тәбиғәттәге тереклек донъяһын да юҡҡа сығара бара. Мәҫәлән, былтыр ағастарҙы һырып алған ебәк ҡарышлауыҡтарына ағыу һиптереү арҡаһында башҡа төр йәнлектәр һәм бөжәктәр популяцияһы бик ҙур зыян күрҙе. Экологик белем һайлыҒы, зоолог-ғалимдар менән кәңәшләшеп эшләмәү һөҙөмтәһе түгелме ни былар? Тирә-яҡ мөхиттең бысраныуы, тәбиғи байлыҡтарыбыҙҙың юҡҡа сығыу сәбәптәре күп төрлө һәм уларҙың күпселеге кешелектең яуапһыҙ ҡылыҡтары, тәрбиәһеҙлегенә бәйле. Йәшәгән мөхитебеҙҙе һәм тәбиғәтте һаҡлау өсөн мәктәп уҡыусылары һәм халыҡ араһында экологик белем таратыуҙы, аңлатыу сараларын бермә-бер йәнләндерергә; дәүләт кимәлендә ҡурсаулыҡтар, милли парктар, заказниктар булдырырға; һыу ятҡылыҡтарын таҙартып торорға; тупраҡтың тарҡалыу процесын туҡтатырға; тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса халыҡ-ара килешеүҙәргә өлгәшергә кәрәк. Әлбиттә, был бурыстарҙың һәр береһе ныҡышмалылыҡ, ойошҡанлыҡ, маҡсатҡа ынтылышлыҡ һәм фиҙакәрлек кеүек сифаттар талап итә, ләкин быны фәҡәт экологтарҙың йә булмаһа, МЧС йәки янғын һағы хеҙмәткәрҙәренең генә эше тип ҡарау ҙур хата булыр, дөйөм тырышлыҡ, граждандар әүҙемлеге, дәүләт яҡлауы һәм ярҙамы менән генә ниндәйҙер маҡсаттарға өлгәшергә мөмкиндер, тип уйлайым.

## ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ!

# ҠАШҠАҘАНДА БАЙРАМ,

## барсаһы ла хайран!



**Ғаиләм менән Өфө ҡалаһының Һупайлы бистәһендәге яңы ғына төҙөлөп бөткән өйҙән бирелгән фатирыбыҙға 1994 йылда күсеп килдек. Шул саҡта ошонда йәшәгән бер кешенән: "Һупайлыла көн итеү нисегерәк?" - тип һорай ҡуйҙым. Ул, йылмая биреп, руссалап: "Здесь деревья не растут, птицы не поют", - тип яуап ҡайтарҙы. Ул ваҡыттарҙа фатир алмаштырыусы йә иһә һатып алыусылар үҙҙәренең иғландарында ошолай яҙалар ине: "Һупайлыны тәҡдим итмәҫкә!" Йылдан-йыл ҙурая барған микрорайонға ни өсөн шундай мөнәсәбәт булғанына һуңынанраҡ төшөндөм.**

(Дауамы 6-сы биттә).

12+

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# КӘРӘКЛЕ ӘЙБЕРҘӘР КҮП, тот та тәүәккәллә!



**Ауылда йәшәүселәргә үҙем аҡса эшләү өсөн ҡулланған ысулдар хаҡында һөйләп үткем килә. Ауыл егеттәре оҫта ҡуллы була, шуға күрә һәр кем уларҙы үҙҙәренә өҫтәмә килем итеп ҡуллана алыр, тип ышанам.**

Ауыл ерендә йәшәү үҙе бер оҫталыҡ талап итә. Матур итеп йәшәйем, донъяң етеш, аш-һыу мул булһын, тиһәң, башты эшләтергә, өйрәләргә-сөйрәләргә лә кәрәк. Ҡалалағы һымаҡ, таксиға сығып, өҫтәмә эшкә урынлашып булмай ауылда. Бер эш урыны тапһаң да шөкөр, тигәндәй.

Мин йәйгеһен ауыл малын көтәм, ҡышҡыһын мәктәп, ауыл советында ҡар көрәйем. Шулай уҡ ҡышын ағас эше менән булам. Мәҫәлән, ауылдаштарымдың тауыҡтарына йомортҡа һалыу өсөн уңайлы ғына оя эшләп бирәм. Улар ыҡсым һәм, иң мөһиме, иҙәне бер аҙ түбәнгә ҡаратып эшләнгәс, йомортҡа махсус бүлемгә тәгәрәп төшә. Был, үҙ сиратында, йомортҡаны башҡа ҡош-ҡорт суҡыуынан, бесәй һәм башҡа хайуандарҙан һаҡлай.

Шулай уҡ мал ташыу өсөн махсус арба эшләйем. Тәгәрмәсле, уңайлы арбаға һорау ҙур, сөнки хәҙер малды махсус урынға алып барып һуйырға кәрәк, ә беҙҙә ул алыҫ ҡына урынлашҡан. Күрше ауыл һәм райондарҙан да заказдар булып тора.

Тағы ла бер үҙенсәлекле ҡоролмам - урманға йөрөтөү өсөн эшләнгән махсус будка. Ул шулай уҡ еңел машинаға эләктереп алып китерҙәй уңайлы, еңел. Эсенә ағастан өҫтәл, эскәмйәләр һәм әйберҙәр өсөн кәштәләр беркетеп ҡуям, тәҙрә уям, ел өрөп тормаһын өсөн йылытам. Эскәмйәләрҙе киң итеп эшләгәс, урманда ҡуна ҡалғанда ятып йоҡларға ла була. Бындай мобиль будкалар урман эше менән булғандарға ҡыҙыҡлы. Шулай уҡ ҡуна ятып бесән эшләүселәр ҙә һорай.

Көйәнтә, сыбыртҡы, батман кеүек ваҡ әйберҙәр тураһында тәфсирләп яҙып тормаһам да, уларын да запас менән эшләп ҡуям. Һәр саҡ кәрәге тейеп ҡала.

Бына, егеттәр, бәлки, минең шөғөлдәрем һеҙгә лә оҡшап төшөр. Хужалыҡта кәрәк булған әйберҙәргә һәр саҡ һорау ҙур була ул, шуға һатып ебәреүе лә әллә ни ҡыйын түгел. Иң мөһиме, халыҡҡа нимә кәрәк булырын алдан һиҙемләп, нәҡ шуларҙы тәҡдим итергә кәрәк. Донъя кимәлендә билдәле эшҡыуарҙарҙың да уңышлы эшмәкәрлеге ошо хәкиҡәткә барып тоташалыр тием. Улар киң йәмәғәтселек өсөн кәрәкле әйбер тәҡдим итә, ә беҙ нәҡ үҙебеҙҙең яҡтарҙа тормош көткәндә кәрәк булған әйберҙәр һатһаҡ, юғалып ҡалмаҫбыҙ.

**Ишморат ҒӘЛИН.**
**Белорет районы.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ

# ТАРИХИ КИТАП ҺЫМАҠ...

**Яҙғы көндәрҙә мин иң тәүҙә ҡышҡы һыуыҡтарҙа үҙ төҫөн юғалта төшкән почта йәшниген рәтләп ҡуям. Кәрәк тип тапһам, буяйым, йоҙағын майлайым, эсен-тышын йыуам. "Почта йәшнигенә бер көнөндә әрәм итәһең", тип һуҡрана ҡатын, ләкин был минең оҙаҡ йылдар гәҙәткә ингән йола. Ни күңел менән гәзит-журналдарҙы иҫке һәм бысраҡ почта йәшнигенә һалдырайым инде! Бигерәк көтөп алам баҫма матбуғат килгәнен, үҙе бер күңел йыуанысы ла инде ул ҡыштырлатып гәзит уҡыуы, журнал биттәрен байҡауы.**



Гәзитебеҙ дуҫтары - Баймаҡтар.

Айырыуса шәмбе менең өсөн матур көн, сөнки нәҡ шәмбе өйөбөҙгә "Киске Өфө" гәзите килә. Күптән уҡыйым был баҫманы, редакцияның матур темалары ла бөтмәй, халыҡ өсөн ҡыҙыҡлы һәм кәрәкле баҫма әҙерләп сығаралар, тип гел маҡтайым үҙҙәрен. Ҡайһы бер мәҡәләләрҙе уҡыйым да, үҙем дә әлләниндәй ҙур материалдар яҙмаҡ булып дәртләнеп китәм. Ләкин "Дәрт бар ҙа,

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Тәбиғәттең, был кеше ҡасан мине бысратыуҙан, урт һалыуҙан туҡтар, тип ҡурҡып ҡалтыранған мәле бөгөн. Ысынлап та, нисек туҡтатырға был мәхшәрҙе?***

***Радик ГАРДАНОВ, Бөтә Рәсәй ирекмән янғын һағы йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһе рәйесе:*** Урман янғындары былай ҙа "тәрән" көрсөктә ҡалған экологияға ҙур зыян килтерә. Быйыл Рәсәйҙә йыл башынан ғына ла төрлө кимәлдәге 4 меңләп янғын теркәлде, улар бөтәһе 270 мең гектар майҙанды биләне. Былтырғы һандар, үҙегеҙгә яҡшы мәғлүм, бынан күпкә фажиғәлерәк булды: урмандар ғына түгел, тотош ауылдар, ҡала урамдары юҡҡа сыҡты, ҡорбандар бар. Күптән түгел РФ Президенты ҡатнашлығында булып үткән урман янғыны проблемалары буйынса махсус кәңәшмәлә Владимир Путин тәбиғәт янғындары өсөн яуаплылыҡты шәхсән Рәсәй төбәктәре етәкселәре иненә йөкмәтте. Тап бына улар ил ҡаҙнаһынан стихия әҙемтәләрен бөтөрөү һәм янғындарҙы иҫкәртеү саралары өсөн бүленгән миллиардтарҙың маҡсатлы тәғәйенләнешенә барып етеүен күҙәтергә, законһыҙ рәүештә урман ҡырҡыуҙарҙы бөтөрөргә, янғын һағы базаһын нығытырға, махсус техника һатып алырға, урындарҙа янғын һағы дружиналары ойоштороға тейеш, тине.

Был йәһәттән Башҡортостанда ла сисектергеһеҙ саралар күрелә. 1 майҙан республикала махсус янғын һағы режимы иғлан ителде. Янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙоусы гражданарға 4-5 мең, вазифалы кешеләргә 20-40 мең, юридик шәхестәргә 300-ҙән алып 500 меңгәсә административ штраф ҡаралған. Аҡсалата яза сараһы кемдәрҙелер аҡылға ултыртыр һәм тәбиғәт ҡанундарын һаҡларға әрҙам итер ҙә, бәлки, ләкин был сараның шул яғы бар: ул кешене закон боҙғандан һуң, ҡылынған эштәре өсөн яуапҡа тарттыра. Ә бына закон боҙоуҙарҙы нисек итеп алдан иҫкәртеү, киҫәтеү сараларын күрергә һуң? Күп тапҡырҙар билдәләнеүенсә, элек урмандарҙа янғын һағын күҙәтеп, тикшереп йөрөүсе урман хужалығы эшсәндәре бар ине, бөгөн был штат тәртибе ныҡ ҡыҫҡартылыу сәбәпле, урмандар ҡараусыһыҙ ҡалды. Ошо йәһәттән хәҙер ҡала, ҡасаба һәм ауыл кимәлендә янғын һағы дружиналары, ирекмәндәр отрядтары ойоштороу кәрәклеге килеп тыуҙы. Эйе, ирекле янғын һүндереүселәр элек тә булды, тик хәҙер улар ирекмәндәр генә түгел, ә эш урыны булған йәки йәшәгән урыны буйынса тупланыусы дружина. Хәҙер беҙгә хөкүмәт һәм муниципаль властар менән берлектә законға ярашлы ошо төр эшмәкәрлеккә дәүләт әрҙамы ойоштороу бурысын атҡарып сығырға кәрәк. Бына шул саҡта инде тәүлек әләнәһенә тирә-йүндә күҙәтеп, янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеүсе төркөм эшләйәсәк.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда уҙған тәүлектә тағы бер кеше коронавирустан вафат булған, тип хәбәр итте республиканың һаулыҡ һаҡлау министрлығы. Ошо осорҙа пандемия 5716 кешенең ғүмерен өҙҙә, уларҙың күбеһе 60 йәште уҙғайны. Ковид йоҡторғандар - 289 660 кеше, шул иҫәптән һуңғы тәүлектә 51 яңы осраҡ. Әле Башҡортостанда 2 617 619 кеше вакцинацияны тулыһынса тамамлаған, 599 мең самаһы кеше ҡабаттан прививка яһатҡан.

✓Сираттағы кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Һупайлы бистәһендәге янырытылған "Ҡашҡаҙан" паркына тиклем барған йәмәғәт транспорты һанын арттырырға тәҡдим итте һәм уны ике көндә хәл итергә ҡушты. Бынан тыш, кәңәшмәлә ҡатнашыусылар парк эргәһендәге Жуков урамындағы юл ҡатламының торошон да тикшерҙе. "Быйыл унда юл хеҙмәттәре соҡорҙарҙы ямаясаҡ, киләһе йылдан ул тулыһынса алмаштырыласаҡ", - тип белдерҙе Хөкүмәт премьер-министры Андрей Назаров.

✓Һорауға яуап биргән рәсәйҙәрҙең 80,8 проценты Владимир Путинға ышана, уның Рәсәй Президенты вазифаһындағы эшен 78,3 проценты хуплай. Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәгенең 2022 йылдың 30 майынан 5 июненә тиклем үткәргән һорау алыу йомғаҡтары шуны раҫлай. Сағыштырыу өсөн: Украинала махсус операцияның тәүге көндәрендә рәсәйҙәрҙең 73 проценты Путинға ышана ине. Шул уҡ ваҡытта Премьер-министрҙың һәм Рәсәй Хөкүмәтенең эшенә ыңғай баһа биреү кимәле һуңғы аҙнала 53,4 процент һәм 52,9 процент тәшкил иткән. "Берҙәм Рәсәй" партияһын хуплау кимәле - 41,7 процент, КПРФ - 10,4 процент, ЛДПР - 7,9 процент, "Ғәҙел Рәсәй - Патриоттар - Ғәҙеллек өсөн" - 5,7 процент, "Яңы кешеләр" - 4,7 процент.

✓Башҡортостандың Ғафури районында, Имәндәш ауылы янында, 17 һәм 18 июндә "Табын-фест" йәштәр фестивале уҙғарылды. Унда республиканың 10 районынан һәм Рәсәйҙең өс төбәгенән йәштәр делегациялары ҡатнашты. Ҡатнашыусылар өсөн ҙур таныш-белеү, күңел асыу программаһы ойошторолдо. Фестивалдә "Табын батыры" һәм "Табын һылыуҡайы" конкурстары үткәрелде, "Өлгөлө йәш ғаилә", "Өлгөлө йорт", "Күп балалы йәш ғаилә" район конкурстары еңеүселәре бүләкләнде.

дарман юҡ", тигәндәй, бер-ике юлдан артығын яҙа алмайым шул. Әлеге яҙмам үҙ ғүмеремдә тәүге тапҡыр гәзиткә ебәргән мәҡәләм. Олуғ баҫмаНың матур юбилейы алдынан үҙ фекерҙәремде еткермәйенсә булдыра алманым.

Гәзиттә милләттәштәребеҙ тураһында матур мәҡәләләр баҫыла, шуларҙы яратып уҡыйым. Булған, бар һәм буласаҡ әле башҡортомдоң арҙаҡлы ул һәм ҡыҙҙары, ниндәй генә өлкәлә эшләһәләр ҙә ҙур уңыштарға өлгәшкәндәре!

"Дауа аяҡ аҫтында", тигәндәй, төрлө үләндәр тураһындағы ҡыҫҡа ғына мәғлүмәттәр бик тә урынлы. Шулай уҡ баҡса эштәре хаҡындағы мәҡәләләрҙе яратып уҡыным әле. Ҡыҙыҡ икән, уйлап ҡараһаң, шул бер баҡса бит инде, сәс, тәрбиәлә һәм йыйып ал. Ләкин һәр кемдең үҙ алымдары, тәрбиәләү ысулдары һәм башҡа төрлө айырмалыҡтары бар икән дә баһа! Һәр кеменең кәңәше төплө һәм файҙалы баҡсасыларға.

**Гәзит үҙе бер тарихи китап һымаҡ, сөнки унда баҫылған һәр мәҡәлә Өфөбөҙ һәм тотош республикабыҙ хаҡында мәғлүмәт һаҡлай. Гәзит геройҙары булған һәр кем тураһында киләсәктә китап баҫтырып сығарыуҙары икеле, ә гәзит биттәрендә улар тураһында киләһе быуындар өсөн әллә күпме мәғлүмәт һаҡланасаҡ.**

Баш ҡала хакимиәте ултырыштарында күтәрелгән мәсьәләләрҙе бик аңлайышлы һәм оҙонға һуҙмай ғына еткерә "Киске Өфө" хеҙмәткәрҙәре. Гәзит уҡыусыларының мейеһен артыҡ мәғлүмәт менән "сүпләмәйенсә" генә, һәр кемгә ҡыҙыҡлы булғанын ғына яҙыу үҙе ҙур оҫталыҡ талап итә.

Мәҡәлә атамаларына ла туҡтап үтәйем. Улар йыйнаҡ, әммә ҡоро түгел, үҙ эсенә бөтә мәҡәлә тураһында мәғлүмәт һыйҙыра, шул уҡ ваҡытта оҙон итеп һуҙылмай. Был да минә бик оҡшай. Ғөмүмән, гәзит күңелемә бик яҡын. Тағы ла оҙаҡ йылдар беҙҙе ҡыуандырып, мәғлүмәтле һәм бай йөкмәткеле баҫма булып ҡалығыҙ.

Ҡайһы бер теләктәремде лә яҙып үтәйем әле. Хәҙер туризмға күп иғтибар бүленә, республикабыҙ тәбиғәте лә иҫ китмәле. Ошо хаҡта ниндәйҙер айырым рубрика асып булалыр, бәлки? Теләге булғандар үҙҙәре барған һәм күргән урындар тураһында яҙһа, уҡымлы мәҡәләләр сығыр ине тип уйлайым.

**Сәләх ӘХМӘҘИЕВ.**
**Әбйәлил районы**
**Асҡар ауылы.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Тәбиғәттең, был кеше ҡасан мине бысратыуҙан, урт һалыуҙан туҡтар, тип ҡурҡып ҡалтыранған мәле бөгөн. Ысынлап та, нисек туҡтатырға был мәхшәрҙе?

***Зөлфиә КАМАЛЕТДИНОВА, муниципаль хеҙмәт ветераны:*** Янғын сәбәптәре күп инде ул. Берәүҙәр уның тәбиғи сәбәптәренә баҫым яһай, йәнәһе, урмандарға ут йәшендән тоҡана, тип уйлай. Ә бит ағастарҙы элек тә рәткә йәшен ата ине, тик улар ҡара көйөп яна бирә лә һүнә, тирәяҡҡа ла таралмай ине. Былтыр, әйткәндәй, йәшенләп түгел, тамсы ямғыр яуманы. Күпме кеше ҡырҙа бесән эшләне, таған аҫып, сәй ҡайната, аш бешерә инек, ләкин берәү ҙә янғын сығарманы. Лупа эффекты тиҙәр, ә бит быяла шешә һәм уның ярсыҡтары элек тә тулып ятты - янғын сыҡмай ине. Эш ниҙә һуң улай булғас?

Минеңсә, урман янғындарының йышайыуында фәҡәт кеше ғәйепле. Минең генә фекер түгел был, әлбиттә, интернетта ла, гәзиттәрҙә лә шул хаҡта яҙалар, телевизорҙан да шул хаҡта һөйләйҙәр. Һәр хәлдә, Себерҙә һәм Алыҫ Көнсығыштағы урман янғындарын МЧС кешеләрҙең ут менән һаҡһыҙ ҡыланыуынан барлыҡҡа килә, тип раҫланы, ләкин был ил буйынса бөтөн янғындарҙың да төп сәбәбе тип уйларға нигеҙ бар. Мәҫәлән, былтырғы урман янғындары буйынса БР Урман хужалығы министрлығының йомғаҡлау материалында республиканың урман фонды биләмәләрендә теркәлгән 436 янғындың 188-е тәбиғи сәбәптәрҙән тип күрһәтелһә (быны шулай булыуына мин бик икеләнәм), 180-е кешеләрҙең ут менән һаҡһыҙлығынан тоҡанып киткән, тип әйтелә. Рәсәй Тәбиғәт ресурстары һәм экология министры Александр Козлов былтыр Көнсығыш иҡтисад форумында белдереүенсә, 2021 йылғы тәбиғи янғындарҙың өстән ике өлөшө, йәғни 67 проценты шулай уҡ кеше ғәйебе менән килеп сыҡҡан, тип раҫлана.

Ошо тәңгәлдә минең башҡа шундай уй ҙа килеп ҡуйғылай: бәлки, махсус рәүештә ут төртөп йөрөүселәр барҙыр? Кем күҙәтеп тора ундайҙарҙы? Былтыр бит шундай берәүҙе тоттолар тип шауланылар ҙа баҫылдылар. Ҡуртымсыларҙы күрә алмағандар ҙа байтаҡ: урманды аяуһыҙ ҡырҡыу оҡшамай күптәргә. Ситтән килеп урмандарыбыҙҙы һатып алған байҙарға мөнәсәбәт тә бер төрлө генә түгел. Махсус рәүештә ут төртмәгән хәлдә лә, ут менән уйһыҙ-моңһоҙ ҡыланыусы әҙәмдәр күп арабыҙҙа. Мәҫәлән, тәмәкеселәрҙе генә алайыҡ. Уларҙың көнкүреш шарттарында бик күп янғын сәбәпселәре булыуҙары етмәй, урман-ҡырҙарға ла барып тарыйҙар. Кеше факторы тигән һүҙ сыҡҡан икән, тимәк, был буштан түгел, ләкин ана шундай моңһоҙ әҙәмдәрҙең бер нисәһенен ҡулынан тотоп алып, ҡылған енәйәте өсөн асыҡ суд ойошторорға ине ул, башҡаларға һабаҡ булыр ине. Мәсьәлә һаман да шул беҙҙең халыҡта йыйнаҡлыҡ, тәрбиә, мәҙәнилек етмәүенә килеп төртөлә. Сүп-сар проблемаһын ғына алайыҡ: нисә йыл хәҙер таҙалыҡҡа өндәйбеҙ ватандаштарҙы, тик бер ҡолаҡтан инә, икенсеһенән сығып китә. Тейешһеҙ урында сүпләгән, бысраҡҡан, төпсөк ырғытып киткән кемделер тотоп алып, яҙаға тарттырғандарын күреү түгел, ишеткән дә юҡ...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# НИНДӘЙ ҺӨНӘР ҺАЙЛАРҒА?

## Баш ҡатыра бөгөн ошо һорау

**Ниһайәт, тағы бер уҡыу йылы тамамланып, йәш егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ өсөн тулҡынландырғыс көндәр килеп етте. Беренсе мәсьәлә булып дәүләт имтихандарын уңышлы тапшырыу торһа, икенсеһе - ниндәйҙер һөнәргә эйә булыу ниәте менән берәй уҡыу йортона инеү. Ҙур тормош юлына сығырға торған улдары, ҡыҙҙары менән бер рәттән, ата-әсәләр ҙә аҙ борсолмайҙыр. Күпселек хәҙер үҙ балаһының тик юғары белем алыуын теләй бит…**



Ярты быуатҡа яҡын ваҡыт үтеп киткән булыуға ҡарамаҫтан, үҙемдең мәктәпте тамамлаған мәлемде бөгөнгөләй иҫләйем. Көн шундай матур, аяҙ. Малайҙар барыһы ла аҡ күлдәктә, алъяпҡыс кейгән ҡыҙҙар сәстәрен уртаға ярып, аҡ таҫма үргән. Бөтә класс менән мәктәп урамында теҙелешеп баҫып йырлаған йырыбыҙ әле булһа ҡолағымда сыңлап торғандай: "Ояһынан осҡан бөркөттәр беҙ, ҡанатыбыҙ нығый һауала. Беҙ осабыҙ сикһеҙ киңлектәргә, уҡытыусым тәүге юл һала..." Был йырҙың һүҙҙәре, көйө лә берҙәй һағышлы. Әле генә танау аҫтына мыйыҡ төртөп сығып килгән егеттәрҙең, сәскәләй һылыу ҡыҙҙарыбыҙҙың барыһының да шат йөҙө күҙ алдымда. Ҡайһы бер ҡыҙҙар, хистәре ташып, илаулаштырып та ала. Һәммәбеҙҙең үҙебеҙгә күрә ҙур-ҙур хыялдарыбыҙ бар. Берәүҙәр юғары уҡыу йортона, икенселәр ниндәйҙер бер училищеға барып, үҙен артабан уҡыуын дауам итергә көйләгән. Өсөнсөләр туранан-тура берәй халыҡ хужалығы тармағына эшсе булып урынлашыуҙы хуп күрә... Ғөмүмән, бер кем дә бушты бушҡа ауҙарып ғүмер итергә уйламай. Ҡайһы бер синыфташым минән: "Ҡайҙа уҡырға бараһың?" - тип һораша. "Нефть институтына" - тием ышанысլы итеп, шунда уҡырға инеремә лә шикләнмәйем. "Һин отличник булғас, кәнишне, институтҡа ынтылаһың инде..."

Мәктәптә мин, ысынлап та, яҡшы уҡыным, дәүләт имтихандарын да бишлегә бирҙем. Өфөгә килеп, әлеге нефть институтына имтихан да тапшырҙым. Әммә конкурс ярайһы ғына юғары булыу сәбәпле, тейешенсә балл йыя алманым. Синыфыбыҙҙа иң алдынғы уҡыусылырҙың береһе булып һаналыуыма ла ҡарамаҫтан, институтҡа инеп булманы. Ныҡ ҡына ҡайғырғандыр, тип уйлаһағыҙ, дөрөҫөн генә әйтәм: бөтөнләй бошонманым. Хатта, киреһенсә, бер ай тирәһе баш ҡалала йөрөп, туғандарымды һағынып өлгөргәнгәмелер, шатланып өйгә ҡайтып индем. "Эш башлайым", тинем артабан ни менән шөғөлләнергә йыйыныуымды һорашҡан атайым менән әсәйемә...

**(Дауамы 9-сы биттә).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәйҙә мәктәптәрҙә флаг күтәреү стандарты раҫланды. Был хаҡта мәғариф министры Сергей Кравцов хәбәр итте. "Бөгөн мин мәктәптәрҙә илебеҙҙең дәүләт флагын күтәреү тантанаһы стандарттарына ҡул ҡуйҙым. Был стандарт Рәсәй Президенты ҡарамағындағы геральдик совет рәйесе менән килешелде. Унда илебеҙҙең флагын күтәреү тантанаһын уҙғарыу, флагын, гербын ҡуйыу тәртибе һүрәтләнә", - тип хәбәр итте министр. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, киләһе уҡыу йылының 1 сентябренән һәр мәктәптә аҙна башында дәүләт гимны башҡарыла һәм флаг күтәрелә. Был традиция үҫеп килгән йәш быуында илһөйәрлек һәм граждандыҡ тойғоһон тәрбиәләүгә ярҙам итергә тейеш.

✓Рәсәй граждандары торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү тураһында квитанцияларҙы дәүләт хеҙмәттәре порталында алырға мөмкин. Быны 2022 йылда ғәмәлгә ашыра башлау планлаштырыла, тип белдерҙе төҙөләш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры урынбаҫары Алексей Ересько. Хәҙерге ваҡытта күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү квитанцияларын ҡағыҙҙа ғына түгел, электрон форматта ла алырға мөмкин. Электрон квитанцияны дәүләт мәғлүмәт системаһында күрергә була.

✓2022 йылда Башҡортостан юлсылары "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проектына ярашлы 13 мәҙәни һәм тарихи объектҡа илткән 24 саҡрымлыҡ юлды, шулай уҡ халыҡты йәлеп иткән иҫтәлекле урындарҙағы юлдарҙың асфальт-бетон япмаһын яңыртасаҡ. Ремонтланасаҡ юлдар араһында Благовещен районындағы Благовещен - Павловка, Өфө районындағы "Йоматау" шифаханаһына, Ғафури районында Стәрлетамаҡ - Красноусол автомобиль юлдары ла бар.

✓Белоретта "Рәсәй 1" телеканалы заказы буйынса "Бәхет тау артында түгел" сериалы төшөрөлә. Фильмдың жанры - детектив, экшн, драма. Белорет районы башлығы Андрей Иванюта хәбәр итеүенсә, унда илдең билдәле актерҙары ҡатнаша. "Белореттар, һеҙ ҙә сериал төшөрөүҙә ярҙам күрһәтә алаһығыҙ! Күмәк сәхнәләрҙә ҡатнашыу өсөн 18-55 йәшлек актерҙар кәрәк. Ҡатнашҡан өсөн аҡса түләнә. Төрлө маркалы автомобилдәр ҙә талап ителә", - тип мөрәжәғәт итте район башлығы Андрей Иванюта яҡташтарына.

*ҠЫҪҠАСА*

# ҠЫТАЙҘА...

**Башҡортостан Хөкүмәте Ҡытайҙа Рәсәй Федерацияһы Сауҙа вәкиллеге ҡарамағындағы республика вәкиле офисын асырға ниәтләй.** Был хаҡта Башҡортостан Республикаһының Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Сергей Греков Ҡытай Халыҡ Республикаһының илдәге гәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Чжан Ханьхуэй менән осрашыуҙа һөйләне. "Башҡортостан менән Ҡытай хеҙмәттәшлеге бөгөн һис ҡасан булмағанса мөһим. 2021 йылда үҙ-ара тауар әйләнеше 985,7 миллион доллар тәшкил иткән, шуға ҡарамаҫтан, башҡа йүнәлештәрҙә лә үҫтерәбеҙ. Мәғариф өлкәһендәге хеҙмәттәшлекте сағыу миҫал тип атарға мөмкин, республикабыҙҙа Ҡытайҙан 150 студент уҡый". Хәҙерге донъяуи шарттарҙа республикаға күберәк ҡорамал һәм запас частар талап ителә, шуға яңы иҡтисади сылбырҙар булдырыу, инвестициялар йәлеп итеү һәм яңы партнерҙар эҙләү өсөн Башҡортостан хеҙмәткәрҙәрҙе Ҡытайға ебәрә, тип билдәләне Греков.

✓ **Ауыл хужалығында 30 йыл эш стажы булған, ауыл ерендә йәшәгән һәм эшләмәгән пенсионерҙарҙың, страховка пенсияһына өҫтәп, билдәләнгән 25 процент күләмендәге түләүгә алырға хоҡуғы бар.** Түләү тәғәйенләнгәндән һуң пенсионер ҡалаға йәки ҡала биләмәһе булып киткән ауылға күсһә лә, быйылғы йылдан алып пенсияға был өҫтәмә түләү һаҡлана. Билдәләнгән түләү күләмен тәғәйенләүгә хоҡуҡ биргән вазифалар һәм специальностар исемлегенә 500-ҙән ашыу һөнәр инә. Шул уҡ ваҡытта, Рәсәй Федерацияһы (РСФСР) биләмәһендә 1992 йылдың 1 ғинуарына тиклем колхоздарҙа, машина-трактор станцияларында, колхозара предприятиеларҙа, совхоздарҙа, крәҫтиән хужалыҡтарында, ауыл хужалығы артелдәрендә эшләгән йылдар, һөнәр атамаһының, специальностың һәм вазифаның ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, "ауыл" стажына индерелә.

✓ **Үҙмәшғүл, оло йәштәге кешене тәрбиәгә алып, пособие рәсмиләштереү мөмкинлегенә эйә.** Әммә был Пенсия фондына ирекле страховка иғәнәһе түләмәгән осраҡта ғына мөмкин. Пособиены нисек юлларға? Пенсия фонды сайтындағы шәхси кабинетығыҙға инегеҙ: pfr.gov.ru. Төп биттә хеҙмәттәр теҙмәһен күрерһегеҙ - һеҙгә "Социаль түләүҙәр" бүлеген табырға кәрәк. Исемлектәге ике пунктты һайлағыҙ: эшкә һәләтһеҙ гражданды тәрбиәләү буйынса компенсация тәғәйенләү һәм уның янында - тәрбиәгә алыуға ризалыҡ. Ике ғаризаны ла тултырығыҙ һәм ҡарарҙы көтөгөҙ. Түләү тәғәйенләнгәс, белдереү ҡағыҙы шәхси кабинетҡа киләсәк. Субсидия ай һайын 1200 һум тәшкил итә. Ул тәрбиәгә алыныусыға пенсияһы менән бергә киләсәк. Тағы кемдә тәрбиәгә алырға була? Үҙмәшғүл кеше инвалидты, шул иҫәптән инвалид баланы ҡарау буйынса компенсация алыу мөмкинлегенә эйә.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ФАЙҘАЛЫ КИЛЕШЕҮҘӘР



**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров үҙенең социаль селтәрҙәге сәхифәһендә XXV Санкт-Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумы майҙансығында тәүге осрашыуҙар хаҡында яҙып сыҡты.**

Ул "Автодор" дәүләт компанияһы идараһы рәйесе Вячеслав Петушенко менән республикабыҙҙа юлдар төҙөү буйынса мегапроекттарҙы тикшерҙе. Форумда донъя кимәлендәге Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең юғары уҡыу йорттары-ара студенттар кампусының проекты тәҡдим ителә. Тағы бер ҙур проектҡа - Һуғыш ветерандарының клиник госпитален төҙөү тураһында документҡа ҡул ҡуйыла. "Уны йыһазландырыу ҙа мөһим мәсьәлә булып тора, ошо йәһәттән яңы кимәлгә күтәрелергә теләйбеҙ. Беҙгә заманса госпиталь кәрәк. Ветерандарҙың, шул иҫәптән локаль конфликтта ҡатнашҡандарҙың һаулығы тураһында хәстәрлек күреү - төп бурысыбыҙ. Мәғариф өлкәһенә килгәндә, Өфөлә 360 урынлыҡ математика лицей-интернаты төҙөлөшө проекты өҫтөндә эшләйбеҙ. Туризмды үҫтереүгә инвестициялар тураһында, атап әйткәндә, "Туризм.РФ" корпорацияһы менән бер нисә килешеүгә ҡул ҡуйырға ниәтләйбеҙ. График тығыҙ, осрашыуҙар күп, атҡараһы бурыстар байтаҡ. Эшләйбеҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

Шулай уҡ был форумда Башҡортостан Хөкүмәте һәм Торлаҡ өлкәһендә үҫеш институты (ДОМ.РФ) хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөнө. Документҡа республика Башлығы Радий Хәбиров һәм ДОМ.РФ генераль директоры Виталий Мутко ҡул ҡуйҙы. Килешеү, ДОМ.РФ инфраструктура облигацияларын файҙаланып, республикала социаль һәм коммуналь объекттар төҙөүҙе күҙ уңында тота. Башҡортостан - Рәсәйҙең яңы финанс ҡоралы ғәмәлгә ашырылған туғыҙынсы төбәге. Облигациялар Өфөлә "Ағиҙел арьяғы" биҫтәһе, Һуғыш ветерандарының республика клиник госпитале биләмәһендә һыу менән тәьмин итеү һәм һыу бүлеү селтәрҙәрен, шулай уҡ 360 уҡыусыға иҫәпләнгән Республика математика лицей-интернатын төҙөү өсөн кәрәк. "Төбәктәрҙә заманса, сифатлы инфраструктураның булыуы - халыҡтың йәшәү сифатын арттырыу, Рәсәй субъекттарын үҫтереү өсөн төп шарттарҙың береһе. Облигациялар сығарыу аша льготалы финанслау механизмының төп һыҙаты - уның күп яҡлы булыуы. Башҡортостанда уның ярҙамында яңы торлаҡ төҙөлөшө өсөн коммуналь селтәрҙәр, мөһим медицина һәм белем биреү объекттары төҙөлә", - тине Виталий Мутко.

# АЙЫҒАЙЫҠ!



**Көйөргәҙе районы Яҡшембәт һәм Яҡут ауылдарында хәмер һатыу бөтөнләй тыйыла, тип хәбәр итте парламенттың матбуғат хеҙмәте. Июндә яҙғы сессияның йомғаҡлау ултырышында Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тейешле закон ҡабул итергә йыйына.**

- Закон проекттары парламентҡа республиканың Көйөргәҙе районы Советы тарафынан индерелде, - тип хәбәр итте Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Әммә тәүҙә "коро закон" тураһында ҡарар ауылдарҙа - граждандарҙың дөйөм йыйылышында күпселек тауыш менән ҡабул ителде. Хәмер һатыуҙы тыйыу уны ҡулланыуҙы кәметергә, шуның һөҙөмтәһендә үлем кимәлен кәметергә, ғүмер оҙайлығын арттырырға, демографик хәлде яҡшыртырға мөмкинлек бирер ине, тип иҫәпләй халыҡ.

- Граждандарҙың үҙ биләмәһендә алкоголь һатыуҙы тыйырға хоҡуғы бар. Әммә шул уҡ ваҡытта "коро закон"дың панацея һәм бөтә проблемаларҙы хәл итеү түгеллеген аңлау мөһим, - тип билдәләне Константин Толкачев. - Был сәләмәт йәшәү рәүешен формалаштырыу юлында бер аҙым ғына. Ошо эште бөтә республика күләмендә лә, муниципаль берәмек хакимиәттәре кимәлендә лә дауам итергә кәрәк.

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ МӘҒАРИФТЫ БУЛДЫРАЙЫҠ!




**Рәсәйҙең бөтөн белем биреү ойошмалары ла Болонья белем биреү системаһынан сығарылды. Был хаҡта Фән, юғары белем биреү һәм мәҙәниәт буйынса Федерация Советының киңәйтелгән ултырышында фән һәм юғары белем биреү министры урынбаҫары Дмитрий Афанасьев белдерҙе.**

Ул 11 апрелдә Болонья төркөмөнөң Рәсәй һәм Беларусь вәкиллектәрен Болонья процесының бөтөн төрҙәрендә лә ҡатнашыуын туҡтатыу хаҡында иғлан иткәйне. "Махсус операция менән бәйле, беҙҙең ректорҙар, мәғариф ойошмалары етәкселәренең Рәсәй ректорҙары берлеге мөрәжәғәтенә Президентты яҡлап ҡул ҡуйғаныбыҙ өсөн илдең бөтөн белем биреү ойошмалары ла Болонья процесынан сығарылды",- тип белдергәйне Афанасьев. Бынан алдараҡ РФ фән һәм юғары белем биреү министры Валерий Фальков белем биреүҙең Болонья системаһын "үткән этап" тип тә атаны һәм Рәсәйҙең үҙ мәғариф системаһы барлыҡҡа киләсәк, тип белдергәйне. Ниндәйҙер ҡырҡа үҙгәрештәр ҡаралмаһа ла, Болонья системаһынан милли белем биреү тәртибенә күсеү осоро буласаҡ, тине ул.

Башҡортостан вуздарының ректорҙары Рәсәйҙең Болонья белем биреү системаһынан сығыуы менән бәйле бер ниндәй ҙә борсоулы хәл күрмәүҙәре хаҡында белдерҙе. Өфө дәүләт авиация техник университеты етәксеһе Сергей Новиков, мәҫәлән, берҙәм стандарттарҙан баш тартыу абитуриенттар һәм студенттарҙың уҡыуына хилафлыҡ килтермәйәсәк, тигән фекерҙә. "Беренсенән, бөтөн ҡарарҙар һәм үҙгәрештәр әкренләп, уйланып хәл ителәсәк, киҫкен һәм ауырлыҡ килтереүсе саралар ҡулланмай. Икенсенән, беҙҙең авиация техник университетында инженер белеме биреү традицияларына нигеҙ күптән һалынған. Төп нигеҙҙе тәшкил иткән теоретик һәм ғәмәли системаларҙың ниндәйҙер бюрократик үҙгәрештәргә бәйлелеге юҡ",- тип аңлатма бирҙе ул. Сергей Новиков фекеренсә, милли белем биреүҙең әле һүҙ алып барылған системаһы һуңғы йылдарҙағы Европа тәжрибәһе менән совет заманының иң уңышлы өлгөләрен берләштереү мөмкинлеген ҡуҙғалай. БДУ-ның ректоры вазифаһын башҡарыусы Вадим Захаров фекеренсә, Болонья стандартын ҡыҫҡартыу Рәсәй белем биреү системаһын камиллаштырырға булышлыҡ итәсәк. Тик бының кире яғы - илдәр-ара белем биреү миграцияһының сикләнеү ихтималлығы бар. Шуның өсөн белем биреүҙең ике кимәлле системаһы ниндәйҙер кимәлдә һаҡланып ҡалырға тейештер, тине ул. Өфө дәүләт нефть техник университеты ректоры Олег Баулин Башҡортостан юлдаш телеканалының "Тураһын әйткәндә" тапшырыуында юғары белем биреү өлкәһендә күптән инде уңышлы файҙаланыусы үҙебеҙҙең тәжрибәләр барлығы хаҡында һөйләне. "Беҙҙең бөтә вуздарҙа ла альтернатив программалар бар. Мәҫәлән, студенттар бакалавриат менән геология, янғын һағы һәм башҡа специалитеттарҙы һайлай ала, шуға күрә борсолорға бер ниндәй сәбәп тә юҡ".

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓24-26 июндә Өфөлә күптән көтөлгән йыр-моң байрамы - "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале уҙғарыла. "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивален ойоштороусылар йәнә баш ҡала һәм республика халҡын, һәм ҡунаҡтарҙы форумды уҙғарыу күләме, башҡарыусыларҙың донъяуи кимәле, стилдәрҙең һәм йүнәлештәрҙең киңлеге менән ҡыуандырырға әҙер. Сара "Торатау" конгресс-холы амфитеатрында була.

✓Өфөлә ҡала йәмәғәт палатаһының яңы составы формалаштырыла башланы. Уға 30 кеше инәсәк. Кандидаттарҙы Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы, коммерцияға ҡарамаған ойошмалар, шулай уҡ БР Йәмәғәт палатаһы тәҡдим итә ала. Сити-менеджер һәм БР Йәмәғәт палатаһы күрһәткән кандидаттар тураһында мәғлүмәт ҡаланың рәсми сайтында урынлаштырыласаҡ. Коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙан ғаризалар ҡабул ителә башлауы тураһында өҫтәмә хәбәр ителәсәк.

✓Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Совет районы территорияһына ҡараған торлаҡ йорттар ихаталары буйлап йөрөп, шунда йәшәүселәр менән осрашты һәм уларҙың тәҡдим-теләктәрен тыңланы. Октябрь Проспекты 15/1 адресына яҡын урынлашҡан йорттарҙағы халыҡ оҙаҡ йылдар яңыртылмаған ҡыйыҡтарҙан һыу төшөүе, канализация системаһы иҫкереүе, машиналар ҡуйырға урын етешмәүе, эскәмйәләр булмауына зарланды. Мэр был мәсьәләләрҙе мотлаҡ хәл итеү өсөн тейешле идаралыҡ етәкселәренә шунда уҡ күрһәтмәләр бирҙе һәм былдай осрашыуҙарҙы даими үткәрәсәген белдерҙе.

✓Башҡорт дәүләт университеты ректоры вазифаһын башҡарыусы Вадим Захаров ӨДАТУ менән берләшеү буйынса кәрәкле процедураларҙың тамамланыуын белдергән. "Беҙ барыһының да - ғилми советтар ҡарарҙарын, коллективтар менән әңгәмәләр, йәмәғәтселек фекерен иҫәпкә алдыҡ. Был йыл самаһы дауам иткән оҙайлы процесс булды. Бөгөн барлыҡ процедуралар үткәрелгән, РФ Фән һәм юғары белем биреү министрлығының ҡарарын көтәбеҙ", - ти ул. Уның фекеренсә, берләшеү тормошҡа ашырылһа, был абитуриенттар һәм студенттар өсөн отошло буласаҡ.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ ***Коммуналь хеҙмәттәр юлдарҙың сифатын интерактив карта буйынса тикшерә. Эш һөҙөмтәһе иһә граждандарҙың әүҙемлегенә лә бәйле, сөнки етешһеҙлектәрҙе улар күрһәтеп, яҙып торорға тейеш.***



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ТАРИХИ ҮҘӘК ЯҢЫРАСАҠ



**Ниһайәт, бәхетлебеҙ ҡунағы бергә тигән кеүек, бер көнгә тура килгән өс байрам: башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевтың тыуған көнө, Рәсәй көнө, Баш ҡалабыҙ Өфө көнө бер юлы шаулап-гөрләп үтеп тә китте. Шуға ла ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәнең ошо сараларға йомғаҡ яһауҙан башланыуы ла осраҡлы түгел. Байрам байрам менән, әммә көн ҡаҙағына сығарылған мәсьәләләр ҙә иғтибарҙан ситтә ҡалманы.**

Мәғлүм булыуынса, күптән түгел барлыҡ киң мәғлүмәт саралары журналистарын матбуғат конференцияһына йыйғанда ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев көндәр аяҙайтыу менән юлдарға билдәләр һалыу башланыуы тураһында белдергәйне. Ул ғына ла түгел, быйыл башҡа йылдар күрһәткесен күпкә арттырырға маҡсат ҡуйыуын һәм билдә һалыу 1 июлгә тамамланасағын да хәбәр итеп өлгөргәйне. Һүҙ юҡ, был эшкә һауа торошо ла ныҡ йоғонто яһай, сөнки ямғыр ваҡытында билдә һалыу - аҡсаны елгә осороу, дөрөҫөрәге, һыуға ағыҙыуға тиң. Шуға күрә юл хеҙмәттәре әҙер генә тороп, көндәр аяҙайтыу менән эште йөнләндерер һымаҡ ине. Әммә күрһәткестәр бигүк ырамай - кәңәшмәлә был хаҡта ныҡлы әйтелде. "Мин бөгөн махсус рәүештә сығып, ҡайҙа эш барғанын ҡараным. Эш бер генә участкала башҡарыла. Әгәр шулай дауам итһәк, билдәләрҙе килһе йыл ғына эшләп бөтәсәкбеҙ. Мин, үҙ сиратымда, эштең бер өлөшөн ойоштороҙом, аҡса йәлеп иттем, муниципаль контракт төҙәлдә, - тип белдерҙе Ратмир Рәфил улы. - Ә һеҙ ваҡытты һуҙаһығыҙ. Бөгөн мәлдә файҙаланып ҡалыр өсөн кәм тигәндә 10 экипаж эшләргә тейеш ине. Эште көсәйтегеҙ, беҙ шуның өсөн аҡса түләйбеҙ. Билдә ваҡытында һалынырға һәм сифатлы башҡарылырға тейеш". Ратмир Мәүлиев шулай уҡ велосипед юлдарына һәм тротуарҙарға ла билдәләр эшләргә ҡушты. Баш ҡалала юлдарға пластик билдәләр эшләү өсөн 190 миллион һум аҡса бүленгән. Бөгөн 18 урамда 36 мең квадрат метрҙа билдә һалынған. Июль һуңында белем биреү учреждениелары эргәһендәге юлды аша сығыу урындарында юл билдәләрен яңыртыу күҙаллана.

Юлдар темаһына ҡағылғас, шуны ла билдәләп китергә кәрәк: баш ҡалала соҡорҙарҙы "ямау" тәүлек әйләнәһенә алып барыла. Йыл башынан алып 68 мең квадрат метр самаһы майҙанға 11 мең тонна асфальт һалынған. Коммуналь хеҙмәттәр юлдарҙың сифатын тикшереүҙе электрон рәүештә алып бара, йәғни интерактив карта буйынса тикшерә. Эш һөҙөмтәһе иһә граждандарҙың әүҙемлегенә лә бәйле, сөнки етешһеҙлектәрҙе улар күрһәтеп, яҙып торорға тейеш. Әле 907 мөрәжәғәт буйынса эш алып барыла, 1827 урында соҡорҙар "ямалған", 806 мөрәжәғәт идара итеү компанияларына йүнәлтелгән, 927 ғариза кире ҡағылған.

Зауыҡ темаһына килгәндә, яңы ғына Өфөлә ағастан һындар эшләү конкурсы үткәйне, әле "Стрит-Арт" фестивале ойошторолдо. Унда илдең 14 ҡалаһынан 20 рәссам ҡатнашты, араларында хатта халыҡ-ара проекттарҙа үҙен һынап ҡараған тәжрибәлеләре лә бар. Оҫталар баш ҡала биналарының стеналарында "Меморандум" һәм "Мурал-фест" йүнәлештәре буйынса һүрәттәр эшләне. Барлығы 27 арт-объект барлыҡҡа килде.

- Эштәрҙең күләме киң, әммә иң мөһиме - уларға һалынған идея, - ти хакимиәттең Йәштәр эштәре буйынса комитет рәйесе Роман Янгуров. - Халыҡ фестиваль һөҙөмтәһен ыңғай ҡабул итә, ойоштороусыларға яңы идеялар бирә һәм эштәрҙе ҡайҙа күрергә теләүҙәрен белдерә.

Һәм тағы: Өфө тарихи мөхитте тергеҙеү маҡсатында "Том Сойер Фест - Өфө" фестивален йәнә ойоштора. Тәү тапҡыр ул 2018-2019 йылдарҙа үткәйне. Сараның маҡсаты - тарихи үҙәктәге боронғо йорттарҙы тәртипкә килтереү. Әйткәндәй, 2018-2019 йылдарҙа ирекмәндәр Гоголь урамындағы ике йортто яңыртҡайны.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ҠЫҪҠАСА*

# ТАҒЫ БЕР КАРАП...

**Рәсәй Федераль именлек хеҙмәтенең яңы сик буйы патруль карабына "Өфө" исеме бирелде.** Башҡортостандың Дингеҙселәр йыйылышы рәйесе Юлай Моратов хәбәр итеүенсә, әлеге ваҡытта карап Санкт-Петербургта "Алмаз" суднолар төҙөү фирмаһы майҙансығында йыйыла. "Карапты 2023 йылда һыуға төшөрөү көтөлә. Беҙҙең йәмғәт ойошмаһының федераль кимәлдәге сираттағы уңышы был, ошо йәһәттән Башҡортостан Башлығы Радий Фәрит улы Хәбиров ҙур ярҙам күрһәтте, был баш ҡалабыҙҙың 450 йыллығына бүләк булыр. "Өфө" тигән тағы бер караптың Ватаныбыҙҙың сиктәрен яҡлауы һәм унда Башҡортостан егеттәренең дә хеҙмәт итеүе менән ғорурланырбыҙ", - тип билдәләне Юлай Моратов. 200 милле иҡтисади зонаны һаҡлау һәм яҡлау, шулай уҡ балыҡсылыҡ көсебен контролдә тотоу 22120 проекты карабының төп тәғәйенләнеше булып тора. Караптың оҙонлоғо - 71 метр, киңлеге - 10,4 метр. Үҙенең вертолет майҙансығы бар. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл 31 мартта Санкт-Петербургта "Өфө" һыу аҫты кәмәһен һыуға төшөрҙөләр.

✔ **Башҡортостан Республикаһы Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтендә Башҡортостанда йәшәүселәрҙе янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штрафтарҙың ун тапҡырға артыуы тураһында иҫкәрттеләр.** Рәсәйҙә 8 июндән урмандарҙа янғын хәүефһеҙлеге талаптарын боҙған өсөн административ яуаплылыҡ көсәйтелде: граждандарға штраф - уртаса ун тапҡырға, ә чиновниктарға, шәхси эшҡыуарҙарға һәм юридик берәмектәргә максималь яза ике тапҡырға артты. Ҡоро үлән, ҡоро-һары яндырған өсөн, шул иҫәптән ағастарҙан янғынға ҡаршы һыҙат менән бүленмәгән участкаларҙа штрафтар түбәндәгесә: граждандарға элекке өс-дүрт мең урынына 30-40 мең һум штраф янай; вазифалы кешеләргә - элекке 15-20 мең урынына 30-50 мең; юридик берәмектәргә - 150-250 мең һум урынына 300-500 мең. "Шул уҡ ваҡытта юридик берәмектәр өсөн максималь штраф - ике миллион һум, - тип хәбәр иттеләр дәүләт комитетынан. - Бөгөнгә республика биләмәһендәге урмандарҙа янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙоуҙың 96 осрағы асыҡланған. Бөтәһе 66 кеше административ яуаплылыҡҡа тарттырылған, 570 мең һумдан ашыу штраф һалынған".

✔ **Рәсәйҙә 1 июлдән торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә хаҡ уртаса 4 процентҡа арта, тип хәбәр итте ТАСС илдең төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры урынбаҫары Алексей Ересько ға һылтанма менән.** "Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә тарифтар йылына бер тапҡыр - 1 июлдән үҙгәрә. Коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү күләме билдәләнгән индекстарҙан артмаҫҡа тейеш. Быйыл илдә индекс уртаса 4 процентҡа үҙгәрә", - тине ул. Рәсәйҙең Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығында белдереүҙәренсә, 2022 йылда коммуналь хеҙмәттәргә ваҡытында түләмәгән өсөн пеня өҫтәү шарттары үҙгәрҙе. Ил хөкүмәте Үҙәк банктың штраф санкциялары күләмен иҫәпләү өсөн ҡулланылған ставканы 9,5 процент кимәлендә теркәне.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# УРМАНСЫЛАР ПАРКЫНДА



**Баш ҡаланың 450 йыллығына Өфөлә бик күп объекттар сафҡа индерелә, парктар һәм скверҙар, башҡа йәмәғәт урындары төҙөкләндерелә. Ошо сара уңайынан Башҡортостандың Урмансылар паркы ла халыҡ теләп һәм күпләп йөрөгән урынға әүерелергә тейеш. Әммә ул күптән инде капиталь үҙгәртеп ҡороуға мохтаж.**

Ғалим-биолог булараҡ, шуны әйтер инем, Урмансылар паркы ниндәйҙер кимәлдә Өфөнөң көнсығыш өлөшөндә тирә-яҡ мөхитте быҫратыуҙан һаҡлап тора һәм тотош мегаполистың атмосфераһы торошон яҡшыртыуға ҙур өлөш индерә.

Һуңғы йылдарҙа паркты төҙөкләндереү йәһәтенән билдәле эштәр башҡарылыуға ҡарамаҫтан, барлыҡ ағас-үҫентеләрҙе һәм парктың экосистемаһына зыян килтермәй һаҡлап ҡалып, был урынды ысынлап та заманса, сағыу итеп эшләү ихтыяжы тыуҙы. Ҡала һәм төбәк властары ла был мәсьәлә буйынса ҙур ҡыҙыҡһыныу белдерә, ул ғына ла түгел, уны үҫтереү буйынса аныҡ пландар тәҡдим итә. Быйыл унда төҙөкләндереү эштәре башланды ла инде һәм уның ҙур күләме килһе йылда тамамланасаҡ.

**Зиннур ШИҺАПОВ,**
**парктың амбассадоры, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәгененң Көньяҡ Урал ботаника баҡса-институты директоры, биология фәндәре докторы.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һуған

❖ Аяҡтарҙың төпкөл веналары тромбозын дауалауҙа һуған бик файҙалы. Бының өсөн 1 стакан һуған һутына 1 стакан бал ҡушырға, бүлмә температураһында 3 көн тоторға. Шунан 10 көнгә һыуытҡысҡа ҡуйырға. Шул рәүешле дауа әҙер була, уны артабан да һыуытҡыста һаҡларға мөмкин. Дауаны ашарҙан 30 минут алда көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабырға. Был рәүешле ике ай дауаланыу ҙа ыңғай һөҙөмтә күрһәтә, ә аяҡтар тулыһынса һауыҡҡандан һуң бер нисә йылға бер тапҡыр ҡабатлап торорға мөмкин.

### Ревматоидлы васкулит

❖ Был сирҙе бал ҡортонан сағылып дауаларға мөмкин. Бал ҡортон тәндең ҡайһы өлөшөнә булһа ла ҡуйырға, сағылғас, тағы ла 10-20 секунд алмай түҙеп торорға ла, уны ебәреп, ҡаяуын алып ташларға. Дауаланыуҙы бер бал ҡорто менән башларға кәрәк һәм әйлап ҡына 12-гә еткерергә лә, бергә тиклем әҙәйтә барларға. Бал ҡортона аллегия булған кешеләргә был ысул менән дауаланғанда бик һаҡ булырға һәм хәленә ҡарап 2 көнгә бер тапҡыр 1 бал ҡортонан ғына сағылырға, артабан көнөнә 6 бал ҡортона тиклем ҡулланырға була.

### Ҡалҡан биҙе

❖ Ҡалҡан биҙендәге "төйөрсәләр"ҙе бәүел боҫламаһы менән дауалайҙар. Уны көн һайын эшләргә һәм 2-3 сәғәт тоторға. Бер аҙна дауаланғандан һуң бәүелгә бер нисә тамсы йод ҡушырға ла мөмкин. Иң мөһиме, боҫлама өсөн ҡулланған сепрәк кизе-мамыҡтан һәм мотлаҡ ҡыҙыл төҫтә булырға тейеш. Уны дауаланған осорҙа йыумаҫҡа кәрәк. Был ысулға күңеле менән ышанған кеше 3-4 айҙа ҡалҡан биҙендәге төйөрҙәрҙән арыныр, тиелгән.

### Баш ауырығанда

❖ Баш ауырығанда (мигрень) ашағандан 2-3 сәғәт үткәс, 2 грамм ромашка сәскәһе онтағын көнөнә 3 тапҡыр ашарға.

❖ 1-2 балғалаҡ шифалы ромашка сәскәһен 1 стакан ҡайнар һыуҙа сәй кеүек бешереп, ярты сәғәт тоторға. Көнөнә 3-4 тапҡыр эсе көйөнсә 1/3 стакан эсергә.

❖ 2 ҡалаҡ шифалы ромашка сәскәһен 1 стакан араҡыға һалып, 2 аҙна төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 30-ар тамсы эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Тәпәнде ҡабарынҡы ике яҡлы семәр менән биҙәгәндәр. Киң ерлек бер тигеҙ итеп соҡолған, ҡабарынҡы биҙәк айырыуса күләмле килеп сыҡҡан. Айырымланып торған семәрҙәрҙең өҫтөн биҙәгәндә контурлы һәм уйымлы һырлау ҡулланылған. Һыҙаттар бер-береһе менән киҫешеп ҡайһы бер осраҡтарҙа айырым композициялар хасил иткән. Нәҡ Бөрйән оҫталарына ғына хас алым семәрҙәрҙе "арҡан"ға оҡшатҡан, "ишелмәле" иткән: ерлектән өҫкәрәк ҡалҡып торған ҡайма һыҙаты бер-береһенә яҡын һәм тигеҙ алыҫлыҡтағы ҡыя һырҙар менән ҡырҡып сығылған кеүек булған. Ҡапҡас уртаһындағы түңәрәк тә арҡан биҙәк менән уратылған, төп фигураларҙың ситтәре ҡаймаланған. Тәпәндең өҫкө һәм аҫҡы өлөшөндә был һыҙаттар ике ҡатлы итеп эшләнгән, уларҙың рәт араһы ҡыҫҡарған, ә "арҡан"-дың ишелеше бер-береһенә ҡаршы ителгән. Негатив (фондағы, уйымлы) һүрәт "шыршы"ны хәтерләткән.



*Бөрйән районы Кейекбай ауылынан ҡымыҙ тәпәне. РЭМ фонды һәм экспедиция материалдарынан. Рәссамы В.М. Шутова*

Тәпәндең өҫкө һәм аҫҡы өлөшөндәге биҙәк һыҙаты араһына орнаменттың төп фигуралары эшләнгән. Улар ҡапҡастағы семәрҙә лә ҡабатланғандар. Төп фигураларҙы һәм тояҡтары, тотҡаларындағы семәрҙәрҙе нисек итеп эшләү ауылдағы йолаларҙан, оҫтаның үҙенән торған.

Орнаменталь композициялар араһында башҡарылышы йәһәтенән иң ҡатмарлыһы тип, этнография хеҙмәттәрендә кәйелеп осҡан ҡоштарҙы һынландырған фигураны атарға мөмкин. Уның йәйелеп киткән ҡанаттары һырлы "арҡан" менән билдәләнгән. Контурҙар араһындағы бушлыҡ өсмөйөштәргә һәм "тештәр" менән бүлгеләнгән; урталағы ҙур өсмөйөштө ҡоштоң башы йәки суҡышы тип күҙалларға була. Ҡапҡаста был һүрәттәр үҙәк түңәрәк тирәләп урынлаштырылған. Көрәгәнең тышҡы яғында был һындар ике ҡатлы, киңерәк өлөшө менән бер-береһенә ҡушылғандар. Был үҙенсәлекле семәр һауытты аҫтан буйлап үткән ишмәле һыҙатҡа барып терәлә һәм уның өҫтөнән эшләнеп, тояҡтарына барып тоташа. Тәпәндең тотҡалары тапҡырына был семәрҙең аҫҡы өлөшө генә эшләнгән, әммә тотҡаһындағы бер нисә һыҙат менән генә өҫкө яғының да барлығы күрһәтелгән.



*Бөрйән районы Байназар ауылынан ҡымыҙ тәпәне. РЭМ фонды һәм экспедиция материалдарынан. Рәссамы В.М. Шутова*

Әлегә ҡоштар һынландырылған бындай унға яҡын боронғо тәпән табылған. Уларҙы улус үҙәгендә йәки уға яҡын төбәктә, Бөрйәндә һырлы тәпәндәр менән кәсеп иткән көнсығыштараҡ урынлашҡан ауылдарҙа эшләгәндәрҙер, тигән фараз бар. Юҡҡа ғына тап ошо әйберҙәр Урал арьяғының көньяҡ-көнсығышындағы төбәктәрҙә таралмаған, сөнки Урал буйындағы Күгәрсен районында бындай һауыттар эшләнмәгән. Беҙ бындай тәпәндәрҙе Бөрйән районының Байназар һәм Иҫке Собханғол, Баймаҡ районының Темәс һәм Күсей ауылдарында осраттыҡ.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ!

# ҠАШҠАҘАНДА БАЙРАМ,

## барсаһы ла хайран!

**(Башы 1-се биттә).**

Һупайлы биҫтәһе урынлашҡан территория Өфө (Ҡариҙел) йылғаһы буйындағы һаҙамыҡ ярымутрауға бер нисә метр ҡалынлығында түшәлгән ташлы-ҡомло ерҙән ғибәрәт. Һупайлыла йәшәй башлаған йылдың йәй айҙары етте. Көндәр эҫе тора. Бер заман көслө ел сыҡты. Күҙ асҡыһыҙ ҡом бураны 9 ҡатлы йорттарҙан да өҫкәрәк күтәрелде. Ә ямғырҙар күп яуғанда бар тирә-яҡ күләүектәр менән тула ине. Мин шул йылдың көҙөндә яңы ғына асылған 136-сы Башҡорт мәктәп-лицейына эшкә урынлаштым, көҙөн мәктәпкә резина итек кейеп йөрөргә тура килде.

Эй, ул ваҡыттар бары бер төш кеүек кенә булып ҡалды. Бөгөн ипподром янындағы бейеклектән Һупайлыға ҡараһаң, ул йәшеллеккә күмелгән бер ҡала булып күренә. Кемгә нисектер, бөгөн беҙгә бында йәшәүе бик тә оҡшай. Нисек шулай булмаһын: әлеге Ҡариҙелебеҙ буйындағы йәшел сауҡалыҡ буйлап дамба төҙөлдө, ул бала-сағаның йыл әйләнәһенә уйнап туймаҫлыҡ бер урыны хәҙер. Йәш егет-ҡыҙҙарҙың да, пенсия йәшендәгеләрҙең дә көн һайын атлап-йүгереп йөрөп, һаулығын нығыта торған бер матур ял итеү зонаһы ла ул.

Ә быйылғы Рәсәй һәм бер үк ваҡытта Өфө ҡалаһы көнө һупайлылар хәтерендә бер гүзәл байрам кеүек иҫтә ҡаласаҡ. Бында бер юлы ике тантана үтте. Октябрь районының 130-сы мәктәбе янында иҫең-хушың китерлек балалар паркы асылды. Иң элгәре күҙгә салынғаны - бында шул тикле таҙа, бөхтә ҡоролған, заманса синтетик келәмдәр түшәлгән ял һәм уйын майҙансыҡтары. Төш етер-етмәҫтән ҡарамаҡҡа бигүк ҙур булмаған майҙанда тамаша башланды: бала-сағаһы ла, йәше-ҡарты ла матур байрам сараһында ҡатнашырға йыйылды. Музыка яңғырай, балалар үҙ таланттарын халыҡҡа күрһәтә - кемдер йырлай, кемдер бейей, малайҙар майҙан тота, спорт көрәшендә бил бирмәҫкә тырыша. Спорт майҙансыҡтарының ниндәйе генә юҡ: хоккей ҡумтаһында кесе йәштәге малайҙар фолбол (туплы хоккей) уйынында еңеү яуларға ынтылһа, футбол һәм баскетбол ҡырҙарында ла сәмле алыш ҡыҙғандан-ҡыҙа бара. Паркта балалар өсөн төрлө уйын ҡоролмалары ла күп икән - кемдер бәрәмләп, кемдәрҙер күмәкләп бәүелсәктәргә ҡунаҡлаған, өҫтәл теннисы өҫтөнән пинг-понг тупсыҡтары осоп ҡына тора, ә балалар самокаттарында йөрөү ҡоролмаһының тимер таҫмаһы буйлап малайҙар һәм ҡыҙҙар рәхәтләнеп елдерә генә. Балалар өсөн төрлө конкурстар ойошторолған, бер кем дә бүләкһеҙ ҡалмай, һәр бала ҡәнәғәт ошо тамашанан.

Йәш кенә балалары менән байрамға килгән ике әсәгә һүҙ ҡуштым. Бына ниҙәр әйтте улар. Регина Баева: "Һупайлыла инде егерме йылдан артыҡ йәшәйем, бындағы 127-се мәктәпкә 1-се класҡа уҡырға килдем, хәҙер вуз тамамлап, үҙем дә әсәй булдым. Минең бала сағымда күберәк ҡәҙимгесә йүгереп йөрөп, тегеләй-былай уйнап үҫтек. Ә хәҙер иҫ китерлек, балаларға уйнар өсөн дә, төрлө спорт төрҙәре менән шөғөлләнеп, таҙа һәм ныҡ булып үҫер өсөн дә бөтә шарттар ҙа бар. Ошондай парктар булдырыу - ул беҙҙең балаларыбыҙҙың киләсәгенә инвестициялар һалыу, тип әйтһәк тә була". Шәрипова Регина: "Һупайлыла 2005 йылдан бирле йәшәйем. Шунан һуң бер аҙ СССР-ҙың 50 йыллығы урамында йәшәп алған инем, кире Һупайлыға ҡайттым. 130-сы мәктәп янындағы майҙан тиҫтә йылдар буйына бер файҙаһыҙ буш ятты. Бында хәҙер шундай үҙгәрештәр башланды, бер йыл дауамында шундай уйланылған һәм заманса ҡоролған балалар һәм үҫмерҙәр паркы хасил булды. Иң кескәй бала-сағанан оло йәштәгеләргә тиклем бында рәхәтләнеп ял итә ала хәҙер".

Төшкә табан Ҡашҡаҙан паркына йүнәлдем. Көн һалҡынса, болотло, бер ҙә генә лә байрамса түгел һымаҡ. Ғәжәпкә ҡаршы, өр-яңынан үҙгәртеп ҡоролған паркта кеше байтаҡ ҡына. Әйткәндәй, бынан утыҙ йылдар әүәлерәк бында бер ниндәй ҙә ағаслыҡ та, иплә торoп ял итерлек урын да, мәҙәни саралар уҙғарырлыҡ мөмкинлектәр ҙә юҡ ине. Яр буйына төшөп, оло ғына ике әбей менән гәпләшеп алдым. Алевтина Ермолаева бында 1988 йылдан бирле йәшәй. Уның әйтеүенсә, ул саҡта Ҡашҡаҙан күле бик ныҡ бысранып, унда һыу инеүе лә имәнес булған икән. Алевтинаның бергә эшләгән иптәштәре: "Һупайлынан фатир тәҡдим итһәләр, ризалаша күрмә, бысраҡҡа батырһың", - тип уны киҫәтеп тә ҡарағандар. "Хәҙер инде ҡыуанып бөтә алмайым. Ошо парк миңә бер мөғжизә һымаҡ тойола", - ти ул. Алевтинаның дуҫ әбейе Нина Кондрашова ла һүҙгә ҡушыла: "Миңә 82, Алевтинаға 84 йәш тулды инде. Ошо паркта йөрөгән мәлдә йәшәреп киткәндәй тояһың үҙеңде, тағы ла йәшәге килеп китә. Йәштәргә лә, беҙҙең кеүек оло быуын кешеләренә лә шундай матур ял паркын булдырған түрәләргә рәхмәт әйтәһе генә ҡала".

Эргәбеҙгә тағы ла бер оло апай килеп, үҙен Зәйнетдинова Фәйрүзә, тип таныштырҙы. Ғафури районының Бурлы ауылында тыуып үҫкән. "1977 йылдан Һупайлы ауылында шәхси йортта йәшәп алып киттек иптәшем менән. Хәҙерге күп ҡатлы йорттар торған урында ул саҡта бер ниндәй ҙә төҙөлөш булманы, һаҙамығыраҡ ер, яҙ көндәрендә һыу ята, ир-ат шунда балыҡ тотоп, кәмәләрҙә йөҙөп йөрөй торған ине. Фанера комбинатында эшләгән сағымда беҙгә бында ер участкалары бүлеп бирҙеләр, бәрәңге ултырта инек. Ошонда уҡ мал да көттөләр. Хәҙер Һупайлыбыҙ сәскә ата, тиһәм дә артыҡ булмаҫ, шатланып йәшәйбеҙ. Фатирыбыҙ дамба буйында, таң менән беҙҙе ҡоштар һайрап уята, Аллаһыбыҙға шөкөр", - тип шатлығы менән уртаҡлашты ул.

Муллаянова Рима Һупайлыла 2014 йылдан бирле йәшәй. "Шундуҡ оҡшаттым Өфө ҡалаһының ошо микрорайонын, - ти ул. - Ҡашҡаҙан паркы ла үтә матурайҙы, күпме ағас ултыртылған, яҙ көндәрендә алмағастар ап-аҡ сәскәгә күмелә, шыршы-ҡарағайҙары ла ошо урынға еректе. Ә күлде таҙартыуға, паркты заманса итеп ҡороуға, һупайлылар өсөн ошондай күркәм ял зонаһын булдырыуға күпме көс һалынған - иҫ китерлек. Рәхмәт инде ҙур итеп район, ҡала һәм республика етәкселәренә".

Өфө ҡалаһының Октябрь районы хакимиәте башлығы Сергей Плотников әйтеүенсә, Ҡашҡаҙан күлен таҙартҡан саҡта унан 40 мең машина ләм, батҡаҡ, төрлө сүп-сар сығарылған, күл төбөнә таҙа балсыҡ түшәлгән. Уның һыуы хәҙер шундай таҙа, һыу инеүселәргә бер ниндәй ҙә хәүеф янамаясаҡ.

Тегеләй-былай үтеп йөрөгән кешеләр араһынан бик тә ихлас һөйләшеп килгән 4 ҡатын-ҡыҙға иғтибар итеп, гәзитебеҙ өсөн интервью биреүҙәрен үтендем. Улар тәүге минутта бер аҙ аптырабыраҡ ҡалды, шунан миңә исем-шәрифем менән өндәшмәһендәрме: "Вәлиәхмәт Миңлеәхмәт улы, был һеҙме?" - тиҙәр. Үҙем дә аптырай төштөм. "Һеҙ мине ҡайҙан беләһегеҙ?" - тим. "Беҙ һеҙҙең элекке студенттарығыҙ, Башҡорт дәүләт пединститутының педагогика һәм башланғыс кластарҙа уҡытыу методикаһы факультетының тәүге сығарылышынанбыҙ. Психология фәнен һеҙҙән өйрәндек, нисек итеп үҙебеҙҙең ятраҡан уҡытыусыбыҙҙы онотайыҡ инде", - тинеләр. Ғәлиева Нуриҙә, Хәйруллина Зәлифә, Вәлиәхмәтова Розалия, Магизова Фаилә - уларҙың береһе Өфөлә, икенсеһе Ҡаҙанда, өсөнсөһө Шишмәлә, дүртенсеһе Чесноковкала йәшәй икән бөгөн. Улар бер тауыштан Ҡашҡаҙан паркының заманса ҡоролоуы, бында йәшәгән кешеләргә бик тә уңайлы ял урыны булыуы хаҡында һоҡланып һөйләнеләр. Ҡаҙандан килгәне: "Был үҙе бер бәләкәй Дубай бит", - тип маҡтап ебәрҙе хатта. Өфө ҡунағының ошо фекерен нисек хупламайһың инде!

Ошо байрам көнөндә Ҡашҡаҙан паркын ҡарарға килеүселәр ағымы иртәнән кискә тиклем туҡтаманы. Ҡараңғы төшкәндә бында, нәфисерәк итеп әйткәндә, алма төшөрлөк тә урын ҡалмаған ине. Тирә-яҡ йыр, музыка тауыштарына күмелде, йәштәрҙең дә, ололарҙың да йөҙҙәрендә ҡәнәғәтлек тойғоһо сағыла. Күл ярҙары иллюминация уттарынан балҡып тора. Күп тә үтмәне, күл өҫтөндә төҫлө нурҙар менән биҙәлгән музыкаль фонтан урғыла башланы. Төн уртаһы етеүгә, Ҡашҡаҙан күген мең биҙәкле утлы сәскәләр ҡаплап алды, салют ракеталары шартлауы, меңәрләгән кешеләрҙең "ура" тауыштарына ҡушылып, ҡабатланмаҫ шатлыҡ ауазы булып яңғыраны.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Көтөп алынған байрамыбыҙ үтеп тә китте. Байрамдар килә лә, үтә лә торор ул. Ә Ҡашҡаҙан паркы Һупайлы биҫтәһенең иң матур урыны булып ҡалыр. Һуңғы йылдарҙа беҙ власть органдарын тәнҡитләргә, барса етешһеҙлектәрҙең сәбәбен тик уларҙан эҙләргә күнегеп киттек шикелле. Яҡшы эштәре, халыҡҡа файҙалы ғәмәлдәре өсөн идара итеүселәргә рәхмәтле булыу бик тә зарур. Республика, ҡала һәм район етәкселәренең тырышлығы арҡаһында Ҡашҡаҙан паркы кеүек заманса объекттар күбәйә бара, улар киләсәктә тағы ла ишәйер, тигән ышаныс нығый бара халыҡта. Шулай була күрһен!**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*✓ Граждандар һуғышының емерткес тулҡындары Башҡортостан аша 6 тапҡыр уҙа. Бик күп ир-ат һәләк ителә, мал-тыуар талана, ауылдарҙың эшкәртеүсе көстәре бер-ике йыл дауамында юҡ ителә.*

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ОЛО БАШҠОРТОСТАНҒА - 100 ЙЫЛ

Граждандар һуғышы шарттарында ла Башҡортостан автономияһы етәкселәре республиканың иҡтисадын яйға һалырға ынтыла, ауыл хужалығын тергеҙеү пландарын алғы планға ҡуя. Тикшереүсе И.И. Ғәлиәхмәтов раҫлауынса, тап беҙҙең ерлектә яңы иҡтисади сәйәсәткә (НЭП-ҡа) нигеҙ һалына.

Әммә большевиктар власы бындай үҙаллылыҡты, заманса әйткәндә, Башҡортостандың, үтә сикләнгән булһа ла, суверенитетын һис өнәмәй. Етмәһә, күрше Өфө губернаһы етәкселәре лә, шовинистик рухлы партия эшмәкәрҙәре баштан уҡ автоном Башҡортостандың хас дошманына әүерелә. Башҡорт ғәскәре, төрлө фронттарға таратылып, бер туҡтауһыҙ барған алыштарҙа күп юғалтыуҙарға дусар ителә.

Граждандар һуғышынан сикһеҙ зыян кисергән Волга - Урал халҡында большевиктар сәйәсәте ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра, бөлгөнлөккә төшкән ауыл кешеләре баш күтәрә, Совет власы ҡуйған етәкселәрҙе ҡыуып ебәрә, ҡаршылыҡ күрһәткәндәрен язалай. Тарихи Башҡортостан ерлегендә лә фетнә артынан фетнә ҡуба: Бөрйән-Түңгәүерҙәге, Борайҙағы күтәрелештәр, "Һәнәк һуғышы" ошоға дәлил. Әлеге "Һәнәк һуғышы"ның төп сәбәбе - Совет хөкүмәтенең крәҫтиәндәргә ҡарата репрессив сәйәсәт алып барыуында. 1920 йылдың 10 февралендә Өфө губернаһының Минзәлә өйәҙендәге Яңы Елань ауылына халыҡтың бар булған ашлығын реквизициялау маҡсаты менән Өфөнән 35 кешенән торған ҡоралды продотряд килә. Әммә крәҫтиәндәр баш күтәрә, продотряд ҡыуып ебәрелә. Был артабан "Ҡара бөркөт" тигән исем менән тарихҡа ингән ихтилалдың башы ғына була. Ихтилалға Бәләбәй, Бөрө, Өфө өйәҙҙәре, сиктәш булған Ҡаҙан һәм Һамар губерналары крәҫтиәндәре лә ҡушыла. 10 мең самаһы баш күтәреүсе 1920 йылдың 1 мартында Бәләбәй ҡалаһын баҫып ала. Улар хатта Өфөгә һөжүм итергә ниәт ҡора. Совет хөкүмәтенең Хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссары, Реввоенсовет рәйесе Лев Троцкий ошо ваҡытта Екатеринбургта була, ул Төркөстан фронтының Реввоенсоветына асыулы телеграмма һуға: "Сдача Белебея почти невооруженным бандам представляет собой факт неслыханного позора. Предлагаю Реввоенсовету Туркфронта через безусловно компетентных следователей выяснить обстановку сдачи Белебея для привлечения виновников как изменников и предателей..."

Өфө губернаһының ревком рәйесе Б.М. Эльцин 1920 йылдың мартында ошо хаҡта бына ниндәй мәғлүмәт бирә: "...народ восстает массами, вооружается вилами, топорами, граблями и бьет коммунистов... Интереснее всего то, что восставшие - мусульманская часть населения [губернии]... Мусульманский мир начинает пробуждаться". Шул уҡ Борис Эльцин Өфө губернаһы коммунистарының ябыҡ партия конференцияһында урындағы власть органдары эшмәкәрлеген ҡаты тәнҡитләй: "...замечается полное разложение советской власти, как в самих советах, так и в войсках. Полный паралич власти. Здесь нет слоев, поддерживающих советскую власть. Мы представляем из себя каких-то бонапартиков, оторванных от масс. В Уфимской губернии мы получили полный политический провал...Нужно сделать так, чтобы население было кровно заинтересовано в поддержании Советской власти. Мы находимся на краю гибели. Если это восстание будет подавлено, то следующее более организованное наступление может свергнуть не только нас, но и вообще советскую власть..."

Бунт күтәргән халыҡты баҫтырыуға Төркөстан фронты ғәскәрҙәре йәлеп ителә. Крәҫтиән массаларының ошо ихтилалы ҡанға батырыла, уның етәкселәре язаға тарттырыла.

Бына ошондай трагик ваҡиғалар Өфө губернаһының яҙмышын хәл итә. Бындағы власть органдарының булдыҡһыҙлығы Үҙәк власть




әһелдәренең зитына тейә, был губернаны бөтөрөүгә этәргес аҙым була. 1920 йылдың 27 майында Татар АССР-ы хасил була, Өфө губернаһының Минзәлә өйәҙе лә уның составына индерелә.

Шул уҡ ваҡытта Башҡорт республикаһының реаль хоҡуҡтары юҡҡа сығарыла: Бөтөн Рәсәй үҙәк башҡарма комитеты (ВЦИК) һәс РСФСР-ҙың Халыҡ Комиссарҙары Советының 1920 йылдың 19 майындағы "Автономиялы Совет Башҡорт республикаһының дәүләт ҡоролошо тураһында" тип аталған декреты элекке Килешеүҙә ҡаралған хоҡуҡи принциптарҙы инҡар итеп, республиканың үҙаллылығын үтә ныҡ сикләй. Ул саҡта Башҡортостанда үҙәк власть органы булған Башревком протест йөҙөнән 1920 йылдың 16 июнендә тулы составында отставкаға китә.

Граждандар һуғышының емерткес тулҡындары Башҡортостан аша 6 тапҡыр уҙа. Бик күп ир-ат һәләк ителә, мал-тыуар талана, ауылдарҙың эшкәртеүсе көстәре бер-ике йыл дауамында юҡ ителә. Большевиктарҙың хәрби коммунизм сәйәсәте крәҫтиәндәр хужалығының тамам бөлгөнлөккә төшөүенә килтерә. Башҡортостан республикаһының үҙәк власть органдарына башҡорт халҡын һис бер өнәмәгән, башлыса үҙ карьераһын ғына ҡайғыртҡан сит-ят кадрҙар күпләп килә. Улар ауылдарға ҡоралды продразверстка отрядтарын ебәреп, халыҡтың барса игенен, хатта орлоҡҡа ҡалдырылғанын да талап ала. Бындай сәйәсәт Башҡорт республикаһында ла, Өфө губернаһында ла берҙәй үткәрелә. 1921 йылдың февраленә Кесе Башҡортостан территорияһынан 2,2 млн бот ашлыҡ, 6,2 мең бот аҡ май, 39 мең баш эре һәм 82 мең баш ваҡ мөгөҙлө мал, 2,2 мең бот бал конфискацияланһа, Өфө губернаһынан да 13 млн. бот ашлыҡ һәм фураж, 12 мең бот аҡ май, 12 млн дана йомортҡа йыйып алына.

Башҡорт республикаһында тәү мәлдәрҙә халыҡты йәберләүгә артыҡ юл ҡуйылмай, шуға күрә Өфө губернаһына ҡараған ауылдар, тотош олоҫтар автономиялы республика составына инеү теләген белдерә. Хатта ки тотошлайы менән рус ауылдарынан торған олоҫтар ҙа Башҡорт республикаһы составына ҡушылыу хаҡында белдерә башлай. Мәскәү властары Башревкомды, Әхмәтзәки Вәлидовты Өфө губернаһында контрреволюцион пропаганда алып барыуҙа ғәйепләй.

Волга - Урал төбәгендә иҡтисади ситуация көндән-көн хөртәйә бара. 1920 йылда ашлыҡ уңмай, етмәһә, 1921 йылда ла бығаса булмаған ҡоролоҡ башлана. Шуға ҡарамаҫтан, Башҡорт АССР-ынан һәм Өфө губернаһынан продразверстка планы буйынса 13 миллион бот иген, миллион бот ит һәм май, меңәр бот төрлө аҙыҡ-түлек һәм башҡа сеймал ситкә алып кителә. Волга - Урал төбәгендә быға тиклем һис бер күрелмәгән аслыҡ башлана.

В.И. Лениндың төбәктәге хәлдәрҙе тикшерергә ебәргән уполномоченныйы Т. Сидельников ошо аяныслы хәлдәр хаҡында бына ниҙәр яҙа: "...Пока в "столицах" идет эта война, там, в глубине лесов, народ башкирский вымирает тихо, безропотно, геройски от тифа, голода и безработицы. Думаю, что минимум 25-30 % башкир за эту зиму отправилось на тот свет. Какой-то тихий ужас охватывает тебя, когда видишь эту немую трагедию".

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 23-сө һанда).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Батырҙарға ла ял кәрәк

60-сы гв. полкының 76-миллиметрлы батареяһы командиры, гв. өлкән лейтенанты Сафа Мөтиғуллин Ватан һуғышында 1941 йылдың 22 июненән бирле күп алыштарҙа ҡатнаша. Тыумышы менән Шаран районының Ерекле ауылынан. 1942 йылда, 112-се Башҡорт дивизияһы Брянск фронтында оборона тотҡанда, огневой взвод командиры вазифаһында мәргәнлеге менән билдәле була, Сталинград янындағы алыштарҙа, Донбастағы рейд ваҡытында ла үҙен оҫта артиллерист, булдыҡлы командир итеп таныта. Дивизия составында һуғыштың аҙағына тиклем хеҙмәт итә, 1943 - 1945 йылдарҙа 60-сы гв. атлы полкының артиллерия начальнигы булып, бик күп орден һәм миҙалдарға лайыҡ була. 1943 йылдың июлендә уның урынына 76-миллиметрлы батарея командиры итеп гв. өлкән лейтенанты Иосиф Чайковский тәғәйенләнә (милләте буйынса йәһүди). Һуғыш аҙағында батырҙарса һәләк була, 1945 йылдың майында уға үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Батареяның огневой взводтары командирҙары: лейтенант А. И. Иванов, лейтенант Айзик Лурий, кесе лейтенант Иван Дзюба. 1943 йылдың майында тыумышы менән Кисловодск ҡалаһынан булған кесе лейтенант Иван Двадненко 45 миллиметрлы пушкалар расчеттары командиры вазифаһын үтәй башлай (1944 йылдың февралендә гв. өлкән лейтенанты И. К. Двадненкоға шулай уҡ Советтар Союзы Геройы исеме бирелә).

Дивизиябыҙҙың 62-се гв. полкы командиры итеп майор Мисак Маркарян (милләте буйынса әрмән) ҡуйыла. Уның урынбаҫарҙары: капитан Холмогоров Николай, политбүлек буйынса - гв. майоры Шакир Закиров (1942 йылдың авгусынан 1943 йылдың апреленә тиклем), унан һуң - гв. майоры Сабир Ҡаҙиров, ә 1944 йылдың мартынан - гв. майоры Глотов Арсений. Полк штабы начальнигы - капитан Александр Красиков.

Ошо полктың эскадрон командирҙары: өлкән лейтенанттар Николай Кузменко, Нармурат Нурматов (үзбәк), унан аҙаҡ Степан Зубков, Дәүләтшин Лотфулла, унан һуң Платонов Георгий (ул Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була, әлеге ваҡытта Саратов өлкәһенең Хвалынск ҡалаһында йәшәй).

16-сы гв. дивизияһына строевой часть буйынса командир урынбаҫары вазифаһына М.В. Фрунзе исемендәге Хәрби академия тамамлаған кадровый офицер, гв. подполковнигы Әғзәм Фаварисов тәғәйенләнә. Ул Стәрлетамаҡ ҡалаһында тыуып үҫкән. Ул үҙен Украина һәм Белоруссия территорияһында барған һуғыштарҙа көслө рухлы командир, яҡшы ойоштороусы, дивизия командирының ышаныслы ярҙамсыһы итеп таныта. 1944 йылдың июль айында гв. полковнигы Ә.Ә. Фаварисов кавалерия кадрҙары идаралығы ҡарары менән башҡа хәрби соединениеға күсерелә.

16-сы гв. атлы дивизияһы командиры, гв. генерал-майоры Г.А. Белов дивизия артиллерияһы командующийы, гв. полковнигы Вәлиев Мөнир Миңдеяр улының хәрби эшмәкәрлегенә юғары баһа бирә. Был офицер Удмурт АССР-ның Сарапул ҡалаһында тыуған. М.М. Вәлиев ошо үтә яуаплы вазифаһын һуғыштың һуңғы көнөнә тиклем башҡара. Фронтта 1941 йылдың сентябренән бирле яуҙарҙа ҡатнаша. 1942 йылдың июлендә 112-се Башҡорт атлы дивизияһы командованиеһы составына индерелә. Дивизия ҡатнашҡан иң ҡатмарлы хәрби операцияларҙың уңышлы һөҙөмтәләрендә ошо талантлы командир етәкләгән артиллеристарҙың өлөшөн баһалап бөткөһөҙ. М.М. Вәлиев тә бик күп юғары дәүләт наградаларына лайыҡ була: 1943 йылдың ғинуарында Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, Дебальцево рейдында дивизия артиллерияһы менән идара итеп, дошмандың хәрби техникаһын һәм тере көстәрен күпләп юҡ иткәне өсөн 1943 йылдың март һәм апрель айҙарында Александр Невский һәм I дәрәжәләге Ватан һуғышы ордендары, шул уҡ йылдың 4 октябрендә Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

Комдив Г.А. Белов үҙенең һуғыш хәтирәләре китабында элекке башҡорт дивизияһының, өр-яңынан комплектлау тамамланғас, интернациональ составлы часҡа әүерелеүе хаҡында яҙа. Дивизия составына Советтар Союзының 32 милләт вәкилдәре ҡушыла. Әммә ошо яңыртылған хәрби часта уны тәүләп булдырған башҡорт халҡының милли рухы барыбер юғалмай: башҡорт яугирҙарының хәрби даны исемен үҙгәрткән дивизияла үҙ дауамын таба.

1943 йылдың октябрендә, комкор М.Ф. Малеевты Совет Армияһының кавалерия командующийы үҙ ҡарамағына саҡыртып алғас, 7-се гв. атлы корпусы командиры вазифаһына гвардия генерал-лейтенанты Михаил Петрович Константинов тәғәйенләнә, ул һуғыш бөткәнсе ошо корпус менән командалыҡ итә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Ауыл ерендә йәшәгәндәр генә түгел, ә ҡала малайҙары ла сыбыртҡы, арҡан ишә, дуға бөгә, ат егә белһә, насармы ни? Тормошта бит төрлө хәлдәр була. Ҙурайғас, был үҫмерҙең ауылда донъя көтөргә теләүе лә бар.*

# ЙӘШТӘРҘЕ, БАЛАЛАРҘЫ...

## маҡсаттарын дөрөҫ билдәләргә өйрәтергә!

**Һуңғы ваҡытта киң мәғлүмәт сараларында, шулай уҡ социаль селтәрҙәрҙә ир-егеттәр тәрбиәһе, йәш быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләүгә ҡағылышлы сығыштар, комментарийҙар, фекерҙәр йыш осрай. Был бик ваҡытлылыр ҙа, сөнки бынан утыҙ йыл элек башланған үҙгәртеп ҡороуҙар һәм иҡтисади реформалар ваҡытында, шулай уҡ яңы технологиялар үҫешкән осорҙа ниндәйҙер кимәлдә артҡы планға күскән был тема бөгөн айырыуса актуаль. Беренсе Башҡорт ир-егеттәре форумы делегаттары - Мәләүез ҡалаһының - Ветерандар, райондың "Ир-егеттәр ҡоро" йәмәғәт ойошмалары рәйесе Фәнис БИКТАШЕВ һәм райондың "Батальон" ветерандар йәмғиәте рәйесе Йәмил ӘЛМӨХӘМӘТОВ менән әңгәмәлә башҡорт йәштәрендә ватансылыҡ тойғоһо тәрбиәләүгә ҡағылышлы һорауҙарға яуап эҙләнек.**

**▶ Икегеҙ ҙә Мәләүез районының "Ир-егеттәр ҡоро" ағзаһы булғас, һөйләшеүҙе, иң беренсе, ошо яңы барлыҡҡа килгән йәмәғәт ойошмаһы эшмәкәрлегенән башлайыҡ әле. Мәғлүм булыуынса, башҡорт йәмәғәтселеге республикала "Ир-егеттәр", "Аҡһаҡалдар" ҡорҙарын ойоштороу хаҡында күптән һүҙ йөрөтә ине. Ниһайәт, ул бынан бер йыл элек тормошҡа ашырыла башланы. Быға һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?**

**Фәнис Бикташев:** Башҡортостанда "Ир-егеттәр ҡоро" бик ваҡытлы барлыҡҡа килде, тип уйлайым. Байтаҡ йылдар "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының эшен күҙәтеп барҙым. Улар ошо ун йыл эсендә байтаҡ эш башҡарҙылар. Улар менән кәңәшләшкәндән һуң ғына эш башлар булғандар. Йола тотҡан - хур булмаҫ, тиғән әйтем бар башҡортта. Аҡһаҡалдар мәктәбен тергеҙеү, ир-егеттәр ҡорон булдырыу ҙа атай-олатайҙарыбыҙҙың йолаһын тотоу тип ҡабул итәм һәм хуплайым.

**▶ Яңы барлыҡҡа килгән ойошма эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәре нимәнән ғибәрәт?**

**Фәнис Бикташев:** Республиканың төрлө район-ҡалаларынан алдынғы ҡарашлы ир-егеттәр, йәмәғәт активистары, эшҡыуарҙар, сәйәсмәндәр ҡатнашҡан Беренсе Башҡорт ир-егеттәре форумы былтыр тап ошо ойошманың үҫеш йүнәлештәрен билдәләүҙе маҡсат итеп ҡуйғайны: ир-егеттәрҙе берләштереү, атайҙарҙың, ирҙәрҙең абруйын, бәҫен күтәреү, көслө заттарға ғына хас кәсептәрҙе тергеҙеү һәм йәш быуын араһында илһөйәрлек тәрбиәһе биреүгә йүнәлтелгән эш алып барыу.

Үрҙә әйтеп китеүемсә, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы эш башлағас, ҡатын-ҡыҙҙар ғына башҡара торған бик күп эштәр тергеҙелде. Төрлө кимәлдә оҫталыҡ дәрестәре үткәреп, милли биҙәүестәр эшләргә өйрәнделәр. Шулай уҡ республикала, шул иҫәптән һәр ауылда тиерлек ҡул эштәре оҫталары түңәрәктәр ойоштороп ебәрҙе. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ сигергә, тегергә, ҡорама ҡорарға, балаҫ һуғырға өйрәнде.

Был йәһәттән ир-егеттәр, малайҙар һәм үҫмерҙәр һәр ваҡыт ситтә ҡала килде. Әлбиттә, уларҙың да шөғөлдәре етерлек. Күптәре спорт секцияларына йөрөй, ярыштарҙа ҡатнаша, уңыштар яулай, район-ҡаланың еңеүҙәр исемлеген тулыландыра. Әммә ир-егеттәргә генә хас эштәрҙе лә белергә тейештәр бит. Борондан килгән кәсептәрҙе лә тергеҙгәндә яҡшы буласаҡ икәне бәхәсһеҙ. Ауыл ерендә йәшәгәндәр генә түгел, ә ҡала малайҙары ла сыбыртҡы, арҡан ишә, дуға бөгә, ат егә белһә, насармы ни? Тормошта бит төрлө хәлдәр була. Ҙурайғас, был үҫмерҙең ауылда донъя көтөргә теләүе лә бар.

Йылға буйында йәшәгәс, элек беҙҙең ауылда бөтә ирҙәр ҙә тиерлек мурҙа үрә торғайны. Ат тотҡас, тәгәрмәс һуҡтылар, септә үрҙеләр. Һандыҡ, сәңгелдәк, көйәнтә, сана, арба - барыһын да үҙҙәре эшләне. Ә бөгөнгө заман ир-егеттәренең барыһы ла ошо шөғөлдәрҙе башҡара аламы?

Быны мин үҙем Мәләүез ҡалаһының Торлаҡ ремонтлау-эксплуатациялау участкаһында слесарь-сантехник булып эшләйем. Саҡырыуҙарҙан, заявкаларҙан сығып, күп ир-егеттәрҙең өйөндә кранын да ремонтлай алмағанын төҫмөрләйем. Әлбиттә, эште һөнәрмәндәр эшләргә тейеш, әммә һәр ир-аттың ябай ғына йорт мәшәҡәттәрен белеүе кәрәк, минеңсә.

**▶ Йәш быуында илһөйәрлек тәрбиәләүҙә ир-егеттәрҙең роле ниндәй? Ғөмүмән, бөгөнгө йәштәрҙең һеҙгә нимәһе оҡшай һәм оҡшамай?**

**Йәмил Әлмөхәмәтов:** Балаларҙа, үҫмерҙәрҙә, йәштәрҙә илһөйәрлек тәрбиәләү - "Ир-егеттәр ҡоро"ноң төп бурыстарының береһе. Был тәңгәлдә көслө заттарҙың, бигерәк тә армияла хеҙмәт итеп, Ватан алдындағы мөҡәддәс бурысын үтәп ҡайтҡандарҙың роле баһалап бөткөһөҙ. Тыуған илгә мөхәббәт хисе кеше өсөн иң изге, ҡәҙерле тойғо. Тыуған илгә мөхәббәт хисе кеше өсөн иң изге, ҡәҙерле төшөнсә икәнен аңлатыу, йәш быуында патриотик, юғары рухи-әхлаҡи сифаттар, батырҙар өлгөһөндә уларҙы ысын граждандар итеп тәрбиәләү - беҙҙең төп маҡсатыбыҙ.

Береһенә лә сер түгел, бөгөн малайҙарға ир-егет тәрбиәһе етмәй. Уның сәбәптәре, әлбиттә, төрлө. Ғаиләһен етеш тормошта йәшәтәм тип, айҙар, йылдар буйы ситтә эшләгән атайҙарын балалар күрмәй ҙә бит. Икенсенән, айырылышыуҙар күп. Ғаилә тарҡалған осраҡта, ғәҙәттә, бала әсәһе менән ҡала, һөҙөмтәлә улар атай тәрбиәһе алмай. Мәктәптә лә уҡытыусыларҙың барыһы ла тиерлек ҡатын-ҡыҙ затынан. Үҫмерҙәрҙе ирҙәрсә тәрбиәләй торған берҙән-бер башланғыс - хәрби әҙерлек дәресе лә юҡ бит хәҙер. Быны шуны яңынан тергеҙһендәр ине ул. Тағы ла ҡыҙыҡлы түңәрәктәр, секциялар күберәк булһа ине. Улар, әлбиттә, аҙ түгел, әммә түләүле өҫтәмә белем биреү ойошмаларына йөрөргә һәр кемдең мөмкинлеге юҡ. Һөҙөмтәлә уларҙың күбеһе компьютерға текәлеп ултыра, тиҫтерҙәре менән аралашыуға ҡарағанда, виртуаль дуҫтарға өҫтөнлөк бирә. Йыш ҡына шуның арҡаһында үҙҙәре лә һиҙмәҫтән төрлө йоғонтоға биреләләр, йә үҙҙәре енәйәт ҡорбаны була, йә үҙҙәре енәйәтселек юлына баҫа. Ана шул гаджеттарҙан айырырға ине бөгөнгө йәштәрҙе.

**Фәнис Бикташев:** "Әсәйгә ҡарап тун бескән, атайға ҡарап уҡ юнған" тигән бик аҡыллы әйтем бар халҡыбыҙҙа. Был аҡыллы кинәйә юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән бит инде. Ҡыҙҙарҙы - әсә, улдарҙы атай тәрбиәләргә тейеш.

Йәмәғәт ойошмаһы эше менән дә, атай, олатай булараҡ та мәктәптә үткән ата-әсәләр йыйылыштарында булырға тура килә. Элек-электән шуға иғтибар итәм: бындай сараларҙың бөтәһенә лә әсәйҙәр генә йөрөй. Бында мин, әлбиттә, атайҙарҙы балаларының тормошона битаарҙы, тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Башҡорт халҡының йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, милли кейем һәм биҙәүестәрен тергеҙҙе. Тап уларҙың эшмәкәрлеге менән табындарыбыҙға онотолоп барған милли аш-һыуҙарыбыҙ ҡайтарылды, милли йолалар яңынан сафҡа баҫты. Төрлө йәштәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың, хатта ир-егеттәрҙең стилләштерелгән милли кейемдәр кейеп, биҙәүестәр тағып, урамда, төрлө рәсми сараларҙа йөрөүендә лә ағинәйҙәрҙең роле баһалап бөткөһөҙ. Уларға "Афарин!" тиергә генә ҡала.

Ир-егеттәр араһында ла ошондай эш алып барылыҡ, көслө заттарға ғына хас кәсептәрҙе тергеҙерлек ойошма булырға тейешлеге һәр ваҡыт көнүҙәк булды. Рәсми иғлан ителмәһә лә, республика райондарында үҫмерҙәрҙе, йәш егеттәрҙе тәрбиәләү менән шөғөлләнгән ойошмалар бар ине инде. Ниһайәт, бер йыл элек ир-егеттең абруйын күтәреү, йәмәғәт эштәренә әүҙем йәлеп итеү, ғаилә именлеген һаҡлау маҡсатында Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров етәкселегендә республикала "Ир-егеттәр ҡоро" ойошторолдо. Был ойошманың эш һөҙөмтәһе киләсәктә, һис шикһеҙ, ҙур буласаҡ, тип ышаныс менән әйтә алам.

**Йәмил Әлмөхәмәтов:** Ир-егеттәр ҡоро булдырылыуы бик яҡшы, әлбиттә. Уның эш башлауын бөтә башҡорт йәмәғәтселеге ыңғай ҡаршы алғандыр, тип уйлайым. Беҙҙең халыҡ боронборондан аҡыллы ир-егет һүҙенә таянған. Һәр изге башланғыстың башында кешелек сифаттары менән айырылған, абруйлы, ғәҙел аҡһаҡалдар торған.



раф булыуында тәнҡитләргә йыйынмайым. Был тәңгәлдә күберәк ҡатын-ҡыҙҙар, бәлки, үҙҙәре ғәйеплеләр. Бөгөнгө заманда тормош дилбегәһе ҡатын-ҡыҙҙар ҡулында булыуын береһе лә инҡар итмәйҙер. Тулыһынса булмаһа ла, күп ғаиләләрҙә ҡатыны бөтәһе өсөн дә, балалары ғына түгел, хатта ире өсөн дә үҙе ҡарар ҡабул итә. Йыш ҡына ауылдарҙа үткән йыйылыштарҙа, граждандар сходында булырға тура килә, унда ла гел ҡатын-ҡыҙҙар ғына йөрөй. Ир-егеткә генә хас мәсьәләләрҙе лә улар хәл итә. Ошо күренеш менән күңел бик килешеп бөтмәй.

Ә йәш быуынға ҡарата минең ҡараш бик яҡшы. Мин уларҙы ҡамыр йә балсыҡ менән сағыштырыр инем. Нисек әүәләйбеҙ, шундай һын хасил була. Илһөйәр, телһөйәр, эшһөйәр булып үҫһен өсөн үҙебеҙ өлгө күрһәтергә тейешбеҙ. Балаларыбыҙ үҙ иленең, үҙ халҡының патриоты булһын өсөн башҡортса белеү генә аҙ әле. Миненсә, үҙен Ватанының, милләтенең улы итеп тойған егет үҙ телендә сыҡҡан гәзит-журналдарға яҙылырға, концерттарға, спектаклдәргә йөрөргә тейеш. Бөгөн үҙебеҙҙе халыҡ булараҡ һаҡлап ҡалыу өсөн ҡулдан килгәнде, мөмкин булғандың барыһын да эшләү мотлаҡ.

**▸ Элегерәк уҡыусылар менән Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары йыш осраша ине. Хәҙер локаль бәрелештәрҙә ҡатнашҡандар был эште дауам итәме?**

**Йәмил Әлмөхәмәтов:** Эйе, осрашыуҙар үткәреп торабыҙ. Был - беҙҙең, йәғни йәмәғәт ойошмаһының иң төп бурыстарыбыҙҙың береһе. Беҙ, ике ветерандар ойошмаһы, йыл һайын ауыл мәктәптәрендә осрашыуҙар үткәрәбеҙ. Һәр ауылда шул тораҡ пункттың хеҙмәт иткән ир-егеттәрен саҡырып, үҙҙәре тураһында һөйләтәбеҙ. Бындай саралар балаларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Улар Төньяҡ Кавказдағы локаль бәрелештәр, Афған һуғышы тураһында кинонан ҡарап ҡына түгел, ә утты-һыуҙы кискән ҡаһарман яҡташтары ауыҙынан ишетеп белә. Мәләүез ерендә һәр ғаиләлә Бөйөк Ватан һуғышында Тыуған илен һаҡлаған, тыныс ваҡытта ҡоралһы бәрелештәрҙә ҡатнашҡан, Ватан һағында хеҙмәт иткән ир-егеттәр бар. Ветерандар ҙа бындай осрашыуҙарға теләп йөрөй, туштәрендәге наградаларын, миҙалдарын күрһәтер өсөн түгел, ә йәш быуынға еткерер һүҙе күп булғаны өсөн! Утлы йылдар тураһында хәтирәләргә бирелеүе енел булмаһа ла, малайҙарҙы һәм үҫмерҙәрҙе тәрбиәләү өсөн әсе хәҡиҡәт тә кәрәк...

**Фәнис Бикташев:** Ни өсөн күберәк ауыл мәктәптәренә сығабыҙмы? Сөнки ҡала мәктәптәрендә ҡаһарманлыҡ дәрестәре, хәрби ветерандар менән осрашыуҙар даими бара, ә ауылдарҙа быға тиклем ундай әүҙемлек юғыраҡ ине. Һуңғы йылдарҙа был эш яйға һалынды һәм, әйтергә кәрәк, беҙҙе көтөп алалар.

Бөгөнгө йәштәр, балалар бөтә нәмәгә битараф, тигән ҡараш йөрөй. Мин уларҙы халҡыбыҙҙың үткәненә, үҙҙәренең киләсәгенә ғәмһеҙ тип әйтә алмаҫ инем. Уҡыусыларҙың да һәр кеменең олатайҙары, атайҙары тураһында йөрәктәрен тулатыр, күңелдәрен тултырыр иҫтәлектәре бар. Ҡайһы саҡта беҙ, өлкәндәр, яуап бирә алмаҫлыҡ һорауҙар ҙа бирәп ҡуялар.

Беҙ уларға үҙебеҙҙең хәрби хеҙмәт юлынан тыш, күберәк башҡорт халҡының данлы тарихы тураһында һөйләргә, аңларға тырышабыҙ. Улар атай-олатайҙарының аҡтыҡ ҡанын түгеп, һаҡлап ҡалған ерҙән күкрәк киреп йөрөргә генә түгел, ә уны яҡларға ла тейешлеген күңелдәренә тейешбеҙ.

**▸ Республиканың төрлө төбәктәрендә башҡорт егеттәренә хас ярыштар ойошторола. Мәҫәлән, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында "Ете егет" проекты, "Мәргән уҡсы" ярышы, ат сабыштары һәм башҡалар. Уларҙа Мәләүез егеттәре күренмәй. "Ир-егеттәр ҡоро" тулы ҡеүәтенә эшләп китһә, яҡташтарыбыҙ ҙа уларҙа ҡатнаша башлармы?**

**Фәнис Бикташев:** Эйе, башҡорттарға ғына хас булған ярыштарҙы ҡарап, уҡып барабыҙ, күреп ҡыуанабыҙ. Нишләп ҡатнашмаһын, ҡатнашырҙар! Бөгөнгө көндә Мәләүез ҡалаһында "Яугир" ойошмаһы йәйәнән уҡ атыу, пневматик пистолеттан атыу түңәрәктәре алып бара. Киләсәктә Мәләүез уҡсыларын да башҡорт егеттәре өсөн генә ойошторолған төрлө кимәлдәге ярыштарҙа күреребеҙгә иманым камил. Талантлы һәм һәләтле йәштәребеҙ бик күп, шөкөр. Уларҙы ваҡытында асырға, маҡсатты дөрөҫ билдәләргә өйрәтергә, данлы тарихыбыҙ аша милли рух тәрбиәләргә - бына нимә талап ителә беҙҙән.

**Йәмил Әлмөхәмәтов:** Эйе, һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙға хас ярыштар, конкурстар, бәйгеләр үткәрелә. Был бик ҡыуаныслы. Башҡорт йәштәрендә милли рух тәрбиәләү йәһәтенән был саралар бик отошло тип уйлайым. Рухлы, сәмле, һәләтле егеттәребеҙ күп беҙҙең. Йәш быуында илһөйәрлек тәрбиәләүҙә ғаилә һәм белем биреү учреждениеларынан тыш, милли спорт төрҙәренең дә роле, һис шикһеҙ, баһалап бөткөһөҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

***Әңгәмәне Фәнис Бикташевтың: "Тағы шуға иғтибарҙы йүнәлткем килә: телевидениенан күргәнегеҙ барҙыр, халыҡ-ара кимәлдәге сараларҙы, спорт ярыштарын асҡан ваҡытта командалар йәки тотош делегация үҙ иленең гимнына ҡушылып йырлап тора. Ә беҙҙә дәүләт символының һүҙҙәрен яттан белгән кеше бармы? Илһөйәрлекте бына шунан башларға ине! Үҙебеҙгә лә ятлап алырға һәм йәш быуындан да шуны талап итергә..." - тигән һүҙҙәре менән тамамлағы килә. Был һүҙҙәргә аңлатма кәрәкмәйҙер. Әйҙәгеҙ, мәктәптәрҙә, төрлө йәмәғәт ойошмаларында Башҡортостан гимнын ятлап йырлауҙы традициябыҙға индерәйек, тип кенә мөрәжәғәт итке килә. Ә башҡалар был турала ни уйлай?***

**Лена АБДРАХМАНОВА әңгәмәләште.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# НИНДӘЙ ҺӨНӘР ҺАЙЛАРҒА?

## Баш ҡатыра бөгөн ошо һорау



**(Башы 3-сө биттә).**

Хәҙер нисектер, белмәйем, әммә беҙҙең дәүерҙә балаларҙың аңына: "Уҡыған - уҙыр, уҡымаған - туҙыр" тигән мәҡәлде һеңдерергә тырыштылар. "Уҡымаһаң, ана, Фәләнкеше һымаҡ, көтөүсе булып, бысраҡҡа батып, мал һарайы таҙартып йөрөрһөң..." тип ҡурҡыталар ине. Совхозда трактор курсында уҡый һалып, артабан шул һөнәр буйынса эшләй башлауыма ла ҡарамаҫтан, юғары уҡыу йортона инеү теләге ташлап китмәне, шулай ҙа. Үҙ алдыма химия, физикаларҙы ҡабатлап, ҡыш буйы әҙерләндем һәм киләһе йәйгә мединститутҡа инеп тә киттем... Аллаға шөкөр, яҡшы итеп уҡып бөтөрөп, юғары белем хаҡында диплом да ҡулыма алдым, төп һөнәрем буйынса эшләй ҙә башланым. Башта бер аҙ ҡырғараҡ китеп йөшәргә тура килде. Синыфташтарымдың артабанғы тормошо менән ҡыҙыҡһынам, үҙем сит тарафтарҙа йөрөгәнгәмелер, уларҙы нығыҡ ҡына һағынып бер булам. Һабаҡташтарымдың һәр ҡайһыһы үҙ урынын табыуы хаҡында унан-бынан ишетеләйем, һәр береһе өсөн ҡыуанам. Оҙаҡламай барыбыҙ ҙа үҙаллы ғаилә ҡороп, бала-сағалы ла була башланыҡ...

**Йәшәгән һайын шуға инана бараһың: ғәйәт ҡатмарлы икән был тормош. Бөтөнләйгә беҙ теләгәнсә бармай. Бынамын тигән, типһә тимер өҙәрҙәй егеттәребеҙҙең береһе, унан икенсеһе, артабан өсөнсөһө һәм башҡаларының был донъяны бер-бер артлы ташлап китеүен ишетеп, ныҡ ҡайғыра инем. Ниндәйҙер сирҙән үлгән бер-икәүһен генә һанамағанда, күпселеге йәшел йылан менән дуҫлашыу арҡаһында һәләк булды. Хатта ҡыҙҙарыбыҙ араһында ла бындай ҡайғылы осраҡтар бар. Ҡыҙғаныс, әммә бөгөнгө көндә егеттәребеҙҙең яртыһынан ашыуы арабыҙҙа юҡ. Балаларының үҫкәнен дә күрә алмай, ейән-ейәнсәрҙәрен һөйөү бәхетенә ирешмәгән көйө, йәшләй генә яҡты донъя менән хушлашты улар.**

Шуны ла әйтер инем: артабанғы тормош, донъя бәхете лә юғары белемдән генә тормай икән шул. Тормош һынауҙарын тота алмай, ҡанаттары нығынып өлгөрмәгән көйө донъя арбаһынан төшөп ҡалған ир-егеттәребеҙ араһында хатта институт тамамлап, яҡшы вазифаларҙа өлгәшкәндәре лә бар ине...

Әхирәм эсемлек менән булышмаған синыфташтарым, Аллаға шөкөр, барыһы ла тиерлек иҫән-һауҙар. Һәр береһен барлап ҡарайым. Уҡыу кимәле ниндәй генә булыуға ҡарамаҫтан, һәммәһе лә бынамын тигән йорт һалып, бала-сағалар үҫтереп, уҡытып, хәләл ефеттәре менән һин дә мин гөрләтеп донъя көтә. Балаларының балдай татлыларын - ейән-ейәнсәрҙәрен һөйөп, бәхетле ҡартлыҡ үткәрә, күптәре ауыл ерендә төпләнеп, уны таштарға ла уйламай. "Нығына таянған" тиҙәр беҙҙең яҡта шундайҙар хаҡында. Трактор, бесән сапҡысы, тырмаҡтысы, йөк машиналары ла (енел машина хаҡында хатта әйтеп тораһы ла юҡ), ҙур итеп яһалған гараждарында һәр төрлө столяр станоктары, иретеп йәбештерә торған аппараттары ла бар. Иркен ихатаһында ыҡсым итеп төҙәлөш материалдары, беҙҙә әйтмешләй, "ағас-таш" өйөлгән. Ниндәй генә ҡоролоҡ йылы булыуына ҡарамаҫтан, ялан кәртәләрендә тезелешеп ултырған бесән һәм һалам эскерттәре уларҙың хәлле йәшәүен әллә ҡайҙан күрһәтеп тора. Тиҫтәләгән йылҡы, эре һәм ваҡ мал үрсетеп, урта байҙар рәтендә көн күргән бындай балалыҡ дуҫтарым, таныштарым күп кенә. Өйҙәренә инһәң - түрбаш тирәһен йәмләп, алсаҡ йөҙлө хужабикәһе (дуҫыңдың хәләл ефете) ниҙер бешеренеп йөрөгәнен күрәһең... Күҙ һайын шундай яҡшы кешеләрҙең береһенән һуғымға һимеҙ тана (йә тай) һатып алып тотонам. Тормошона зарланмай, һәр кемеһе үҙ урынын тапҡан бындай эшсән кешеләр менән һөйләшеп ултырыуы ла үҙе бер бәхет. Ҡасандыр йәш саҡта шаян, вайымһыҙ һымаҡ күренгән был кешеләрҙең бөгөнгө көндә ифрат та аҡыллы фекер йөрөтөүсе, хатта һинә һәр төрлө файҙалы кәңәштәр биреүсе булып киткәнен күреп һөйөнәһең. Бөгөнгө күҙлектән сығып: "Һарай тулы мал аҫрап, эрзинкә итек кейеп, хәләл кәсем менән тапҡан хайуандарымдың батҡағына бата-бата йөрөргә лә ҡуш ҡуллап риза булыр инем!" - тип һис икеләнмәйенсә генә әйтә алам.

Йәштәребеҙгә: "Юғары белем алыу, әлбиттә, бик яҡшы, быға тырышлыҡ һалыу ҙа кәрәк, әммә институтҡа инмәгәнгә һис кенә лә ҡайғырмағыҙ", - тиер инем. Тик Аллаһ Тәғәлә тарафынан бирелгән аҡылығыҙҙы ғына юймағыҙ. Ҡасандыр әллә күпме мәртәбә ынтылып та, институтҡа инә алмаған бер апайҙы беләм. Баш ҡалаға барып ҡайтҡан һайын "бәхетем юҡ" тип илай торғайны ул. Артабан тормошҡа сығып, ауылда оҙаҡ йылдар ябай эштә эшләп, бөгөнгө көндә хаҡлы ялда булған был гүзәл зат үҙен сикһеҙ бәхетле тоя. Эшһөйәр хәләл ефете менән иңгә-иң терәшеп, етеш донъя көтә улар. Үҙе юғары белемгә эйә була алмаһа ла, балаларын уҡытҡан. Улары ҙур урында эшләй.

Тормош башында һәр йәш кешенең буласаҡ һөнәре хаҡында уйланыуы - тәбиғи. "Ниндәй һөнәр иң яҡшыһы?" тигән һорау биргән хәлдә, моғайын, күптәр "уҡытыусы" тип яуап бирер ине. Шул уҡ ваҡытта икенселәрҙең "табип" тип әйтеүҙәрендә лә шигем юҡ. Өсөнсөләр - "игенсе", дүртенселәр -"төҙөүсе", бишенселәр - "инженер", алтынсылар "ил һаҡсылары" тиер. Быларҙың барыһы ла хаҡлы булыр! Ысынлап та, бер кем дә "быныһы - яҡшы, ә теgeнеһе - насар" тип әйтмәйәсәк. Кемдер балалар уҡытһа, икенсеһе дауалаһа, өсөнсөһө уларҙы ашата, кейендерә, ҡай берәүҙәр торлаҡ, машиналар төҙөй, бәғзеләр уларҙың имenлеген һаҡлай... Хатта ябай ер ҡаҙыусы йә урам һепереүсе, сантехник йә иҙән йыуыусы булһынмы - барыһы ла берҙәй ихтирамға лайыҡ, тип һанайым.

Бәлки, кемдәргәлер сәйер һымаҡ та тойолор, әммә әле килтергән исемлеккә инмәгән тағы ике категория кешеләре хаҡында айырып әйтергә ниәтем. Беренсеһе - мәктәптән һуң артабан бер ҡайҙа ла уҡыуын дауам итмәгән, халыҡ хужалығында ла эшләмәгән, әммә ғаилә ҡороп, күп бала табып, фәҡәт ғәзиздәрен тәрбиәләү менән генә мәшғүл булған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ. Бындай гүзәлдәребеҙҙе - ғәзиз әсәләребеҙҙе хатта "күтәреп кенә" алып йөрөргә тейешбеҙ. Икенселәре халҡыбыҙҙа борон-борондан хөрмәтле һаналған кәрәкле кешеләр - махсус дин белемле имам-хәҙрәттәребеҙ. Бар йыһанды яратҡан Аллаһ Тәғәлә, Бәйғәмбәребеҙ хаҡында ябай халыҡҡа ғилем өйрәтеүсе, иман, әхирәт төшөнсәләрен аңлатыусы бындай кешеләрҙе боронғо ҡартатайҙарыбыҙ ғалимдар ("ғалим" ғәр. - белгес) тип тә атап йөрөткән бит...

Тормоштағы бихисап һөнәрҙең ниндәйенә генә эйә булыуына ҡарамаҫтан, һәр саҡ кешеләргә үҙеңдең кәрәклелегеңде тойоу - оло бәхет ул, тип кенә әйтмәксе инем был яҙмаларымда.

**Ҡыуандыҡ ТӨХВӘТУЛЛИН.**

✓ **Айбулат йылдан-йыл нығына барған уй-хыялын бер тынала һөйләп аңлатырға тырышты. Республикала Бөрө ҡалаһынан башҡа ян спорты менән бер ҡайҙа ла шөғөлләнмәүҙәрен аңлатты.**






* * *

Айбулат машинаһын хакимиәт алдында ҡалдырып, өс ҡатлы йортҡа табан йүнәлде. Спорт комитеты начальнигын күреп, ниәте һыуынмаҫ элек уйындағын тиҙерәк һөйләп бушаныу ине. Ашығып, йүгерә-атлай өсөнсө ҡатҡа күтәрелде. Тик уны бикле кабинет ҡаршы алды. Айбулатҡа хыялдары селпәрәмә килеп ватылғандай тойолдо. "Ашҡынма. Ашығыу - шайтандан", ти торғайны олатаһы. Эстән генә үҙен әрләп, тышҡа сыҡты. Бәлки, тәүҙә спорт мәктәбе директорын күреп һөйләшергәлер, тигән ҡарарға килде. Уйынан кире ҡайтты: ҡолағас, юғарынан ҡоларға кәрәк.

Асфальтҡа сыҡҡансы ярты көн урман юлынан килеп, баштан-аяҡ бысранған машинаһы янына килде. Тимер аты арыған, йонсоған төҫтә күренде. Ул да ашҡынды бит - Айбулат ашыҡтырҙы уны. Машинаһын ҡабыҙҙы. Төҙөк двигатель көсәнеүһеҙ-ниһеҙ тигеҙ тауыш менән эшләй башланы. Айбулат та уйҙарын ситкә һирпеп, көсөргәнеүенән арынырға тырышты. Ана бит, машинаһының төҫө ҡасҡан, ә эшләүе көйлө, әйтерһең дә, йөҙәр саҡрым ара үтмәгән. Тигеҙ ритмда эшләгән машина тауышын тыңлап, Айбулат та тынысланғандай булды, уйҙары ипкә килде, эсендә бүреләр олой башлағанын һиҙҙе. Иң тәүҙә тамаҡ туйҙырырға кәрәк, аҙаҡ машинаһын йыуҙырыр. Ас кеше асыулы була - туҡ тамағы менән таҙа машинаһында барыр хыялын тормошҡа ашырыу кәрәк башта. Бөҙрәханаға инеп, сәсен алдыртыр, төҫ-башын да яңыртырға кәрәк. Ситтән ҡарауға әрпеш күренгән "Нива" еңел ҡуҙғалып, ашханаға табан юлланды.

* * *

Төш ваҡыты, ашхана алдына бихисап машина йыйылған. "Нива"һын ҡуйырға урын таба алмағас, юл ҡағиҙәһен боҙоп, ситтәрәк торған бер машина артына ҡыҫтап булһа ла теркәне. Артҡа бирмәйенсә, алға сығып китергә урын бар, тип уйланы. Эргәһенә батҡаҡҡа батҡан машина терәлгәс, ялтлап торған ҡыҙыл төҫтәге иномарка уфтанып ҡуйғандай тойолдо Айбулатҡа.

Элек был ашхана урынында ҡарағас, бүрәнәләрҙән һалынған билмәнхана була торғайны. Эй тәмле була торғайны билмәндәре! Ни сәбәптәндер, ут ҡабып, бина янып юҡҡа сыҡты. Тиҫтә йыллап кесерткән баҫып буш торған урында яңы ашхана - өс ҡатлыһы ҡалҡып сыҡты, асарбактар төйәк иткән харабалар урыны яңырып, матур төҫ алды. Элекке райпо ҡарамағындағы туҡланыу урынын заманса эшләнгән шәхси ашхана баҫып алды. Тупһанан - түргә, тигәндәй, тау битендә урынлашҡан йортҡа бейек күтәрмә эшләнгән, яйлап баҫҡыс һанап күтәрелгәнсе, аппетитың асылыр, тигәндәрҙер. Беренсе ҡаттағы ҙур зал, төптән йыуан, урынынан ҡымшанмаҫ ҙур өҫтәлдәр, ауыр ултырғыстар ашханаға ныҡлыҡ өҫтәгәндәй тойола. Икенсе ҡатҡа күтәрелгән баҫҡысҡа "Банкет залы" тигән яҙыу беркетелгән. Өсөнсө ҡат, күрәһең, байыраҡтар өсөн тәғәйенләнгән, бер төркөм үҙ ҡәҙерҙәрен белгән ҡиәфәттә, беренсе ҡатта туҡталып тормай, баҫҡыстан юғары менеп китте. Айбулат яңы ашхананы ҡоронан йөҙөүсе "Титаник"ка оҡшатты - йорт баҙында күмер саңынан ҡарайып тиргә батҡан кочегарҙары ла бар һымаҡ тойолдо. Океанда, ярай, аңлашыла, байый ла, урта хәллеһе лә бер карапта, кесә ҡалынлығына ҡарап һыйышып йәшәргә мәжбүр. Ә бында? Тупһанан төшкәс, һәр кем үҙ юлынан китә. Кухняла ашнаҡсыларҙың нимә менән шөғөлләнеүе күренеп тора - йәшерен-батырыны юҡ, бер ҡаҙандан тәғәмләнәбеҙ, йәнәһе. Ҡыҙыҡ, өсөнсө ҡаттағыларға ла ошонда бешерәләрме икән? Шеф-поварҙары ир кешеләр, күрәһең. Башына табиптарҙыҡы кеүек саф аҡ башлыҡ кейгән дорфа ҡиәфәттәге ир аш бешереүҙе шым ғына күҙәтеп тора. Бөтөн урында таҙалыҡ, тәртип һиҙелә. Ашнаҡсыларҙың аҡ халаттарына ҡарап, "Ашамлыҡ дарыу булһын, дарыу ашамлыҡ булмаһын", тигән, ҡайҙалыр уҡыған фекер иҫенә төштө. Менюлары бик бай икән, Айбулат хаҡтарға иғтибар итмәйенсә, йәне һөйгәнде һайлап алды. Ашаған саҡта залдағыларҙы күҙ унынан үткәрҙе, ҡыҙыл иномарканың хужабикәһен (һис шикһеҙ - хужабикә!) танырға тырышты. Өсөнсө ҡатта туҡланалыр ундай машина эйәһе, тип, ризыҡтың тәмен тойоп, яйлап ашай башланы: ашамлыҡ дарыу булһын...

* * *

Ашханан сыҡҡас та Айбулат "Бизон"ының көр тауышын ишетте. Машинаһын шулай атай ул. Шәғәле Шаҡмандың яны ла бизон мөгөҙөнән эшләнгән, тиҙәр бит. Бик тә ихтимал. Тик америка индеецтары башлап уҡ-һаҙаҡ ҡулландымы икән, әллә башҡортмо? "Нива"ға ҡушылып, теге ҡыҙыл иномарка нәҙек, нескә тауышы менән сыпылдай. "Ну, ҡомған, тәки артҡа биргән!" - Айбулат эстән генә машина хужаһын тиргәне. Әгәр ҙә хужа ир кеше булһа, биллаһи, яғаһынан бөрөп һелкетәсәк! Булмаған асыуын көсләп йөҙөнә сығарып, машинаһы эргәһенә килде. Уның "үгеҙ"енә ни булһын, мин ғәйепле түгел, үҙе килеп бәрелде, тигәндәй, шым ғына үҙ урынында ултыра. Машинаһының сигнализацияһын һүндереп, Айбулат иномарканың водителе ултырған ишеккә килде - хәҙер һөйрәп сығарасаҡ булдыҡһыҙ "чайник"ты. Тотҡаға йәбешеп тә өлгөрмәне, тәҙрәләре эстән күренмәҫлек итеп ҡарайтылған машинанан кинәт өҫтөнә оҙон итәкле аҡ тун кейгән йәш ҡыҙ килеп сыҡты. Айбулатҡа бәрелеп, башындағы бүрке төшөп китте, оҙон сәстәре таралды. Ҡыҙ ярһыу менән Айбулатҡа ниҙер ҡысҡырмаҡсы булғайны, осло дағалы итектәре тайып китеп, сыйылдап ебәрҙе. Айбулат ҡыҙҙы биленән тотоп ҡалды. Бер нисә секунд бер-береһенә ҡарап, тындары менән өтөп, шым ҡалдылар. Айбулат өсөн күҙ асып йомған ара мәңгелеккә тиңләнгәндәй тойолдо.

- Пардон! - тигән булды шым булмаҫ өсөн. - Был машина һинеке...то есть һеҙҙекеме?

Һорамаһа ла билдәле бит инде, һай, иҫәр! Уйламаҫтан килеп тыуған хәлдән ҡыҙ ҙа ҡаушаны шикелле.

- Ебәр, нимә айыу һымаҡ йәбештең? - тине ҡыҙ күкрәк төбөнән сыңлап сыҡҡан тауышы менән.

- Башта үҙең ебәр, - тине Айбулат. Ҡыҙ, ысынлап та, уға сытырман йәбешкәйне.

- Ебәрә алмайым... Һеҙҙе ебәрһәм, хәҙер ҡолайым да баһа! - Урамды ҡыҙҙың сәйер ярһып көләүе яңғыратты. Байтал кешнәнеме ни!.. Үтеп барыусылар көпә-көндөҙ ҡосаҡлашып, хахылдашып тороусы был икәүгә әйләнеп ҡарай башланы. Айбулат та бер аҙға шаңҡып ҡалды. Ҡыҙ ҙа иҫенә килде, ишек тотҡаһына йәбешеп, егетте ебәрҙе.

- Әйҙә, ҡарайыҡ, кемебеҙ ғәйепле? Машинаңды алғараҡ ал әле, - тип бойорҙо егет. Ҡыҙҙың бүркен күтәреп, башына кейҙерҙе.

- Үҙең артҡа бир, - ҡыҙ бойороҡҡа иғтибар итмәй, үҙ дәғүәһен белдерҙе. - Минең ҡотом осто, - тип ғәйепле тауыш менән өҫтәп ҡуйҙы.

Айбулат "Нива"һын артҡа биреп, иномарканың бамперын һаҡлыҡ менән һыйпап ҡараны. Онталған, сыйылған урыны күренмәй. "Ҡыҙыл болан" (Айтуған иномаркаға үҙенсә исем биреп өлгөргәйне) хужабикәһе кеүек ҡото осоп, шымып ҡалғанға оҡшай. Шымыуын шымған, һаҡһыҙ ҡыланһаң, нескә тауышы менән тағы сипылдай башлар һымаҡ. Айбулат кеҫәһенән аҡса сығарып, ҡыҙға һондо.

- Ошо етәме? Әхләҡи зыянды ҡапларға...Ҡотоңдо осорған өсөн.

Ҡыҙ егет усындағы биш меңлеккә текәлде.

- Етмәһә, иҫәбеңде әйт, номерыңа күсерәм, - Айбулат кеҫәһенән телефонын сығарҙы.

Өҫ-башы төпкөл ауыл кешеһенекенә оҡшаған, һаҡал-мыйыҡ баҫҡан бысраҡ машина хужаһының был ҡылығына ҡыҙ аптыраны, буғай. Айбулаттың усындағы аҡсаны иплән кенә алып, кеҫәһенә һалды.

- Ошо ла етә, - тине ул һыр бирмәй генә.

- Юлды бушат, мин ашығам, - тине Айбулат. Әйтеүен әйтте, ә үҙе был сәйер ҡыҙ менән һис тә айырылғыһы килмәгәнен тойҙо. - Ҡабат минең юлда йөрөмә, тапап та китермен, - тигән булды ярым шаярыу, ярым ҡурҡытыу менән.

- Мин барыбер һине артҡа сиктерҙем, - тине ҡыҙ. Күҙҙәрендә шундай аңлашылмаҫ осҡондар сәсрәне - Айбулат аңламаны: уйлап әйттеме ҡыҙ, уйнап әйттеме?

* * *

Спорт комитеты начальнигы төштән һуң эшенә сәғәте-минуты менән ваҡытында килде.

- Һеҙ миңәме? - тип һораны ул Айбулатҡа һынсыл ҡараш ташлап.

- Эйе.

- Бәй, Айбулат ағай түгелме? - начальник шундай ихлас йылмайҙы, Айбулат уңайһыҙланып китте хатта.

Ҡушҡуллап күрештеләр. Йәш егеттең йылмайыуы шундуҡ юҡҡа сыҡты.

- Көтөп торорғоҙ, минең мөһим шылтыратыу бар, - начальниктың һуңғы һүҙҙәре үҙе менән бергә кабинетҡа инеп китте. Ярты сәғәттәй көткәндер Айбулат, саҡырыу юҡ. Ихтыярын туплап, тағы көттө. Ней, ултырыр урын юҡ коридорҙа. Ярһыуы көслө булһа ла үҙен тынысландырырға тырышты. Һөйләрен тағы уйында барланы: дәлилләп, ышандырырлыҡ итеп әйтергә кәрәк. Сәғәттәй ваҡыт үткәс, начальник ипләп кенә һағайып асты кабинет ишеген. Һеҙ һаман да бындамы ни, тигән һымаҡ: "Үтегеҙ", - тине.

Айбулат йылдан-йыл нығына барған уй-хыялын бер тынала һөйләп аңлатырға тырышты. Республикала Бөрө ҡалаһынан башҡа ян спорты менән бер ҡайҙа ла шөғөлләнмәүҙәрен, уҡты мәргән сойорготоу башҡорттоң ҡанында булыуын, үҙенең дә мәргән уҡсы булыуын аңлатты. Районда ян спорты буйынса спортсылар тәрбиәләргә кәрәклеге тураһында һөйләне. Олатаһының уны нисек өйрәтеүе тураһында ла әйтергә онотманы. Яңыраҡ күргән төшө тураһында һөйләргә уйлап ауыҙын асты ла начальниктың битараф ҡарашын тойоп, туҡтап ҡалды.

- Мин һеҙҙе бик иғтибар менән тыңланым, - йәш егет һәр һүҙен үлсәп, һәр һүҙенә сөй ҡаҡҡандай баҫым яһап һөйләй башланы. - Идеяғыҙ шәп тип әйтә алмайым. Бер башҡорт ҡына уҡтан мәргән ата тиеүегеҙ төптә хата, башҡа халыҡтарҙа ла ул шөғөл борондан булған.

- Ә шулай ҙа "Төньяҡ амурҙары", тип, нәҡ башҡорттарға әйткәндәр, - Айбулат начальниктың тын алышын тойоп, үҙ фекерен нығытырға тырышты.

- Мин һеҙҙе бүлмәнем, хәҙер мине тыңлап бөтөгөҙ. "Төньяҡ амурҙары" - ул әҙәби фараз ғына. Фэйк! Был, беренсенән. Икенсенән, һеҙҙең идеяғыҙ - ул боронғолоҡ шөғөлө. Өсөнсөнән, был иң мөһиме, ян спорты - дорогое удовольствие! Теләгән хәлдә лә уның өсөн аҡса бүленмәйәсәк.

- Мин бушлай эшләргә лә риза, - Айбулат һуңғы һаламға йәбеште.

- Но это совсем не серьезно, Айбулат ағай. Инвентарь ҡиммәт, тимәксемен. Бала-саға һымаҡ, уҡ атыу уйындары үткәрәләр бит, шул да еткән.

- Һин, ҡустым, мине аңламаның! Мин профессиональ спорт тураһында һөйләйем, - Айбулат ҡыҙа башлауын тойҙо.

- Ағай, давай на чистоту. Һин дә бит ҡасандыр ошо урында ултырғанһың. Ниңә шул ваҡытта ҡайғыртманың? - йәш егет тә ныҡыш. Сибек кенә күренһә лә каратэ буйынса ҡара билбауға эйә тигәндәре дөрөҫтөр, күрәһең.

- Ул осорҙа ысынлап та аҡса ла, мөмкинлек тә юҡ ине, ҡустым, - Айбулат урынынан торҙо.

- Бөгөн дә шул уҡ хәл, Айбулат ағай, мөмкинлектәр күп, аҡса юҡ. Бына ошо анонсты уҡып сығығыҙ әле, - начальник иғландар баҫылған гәзит һуҙҙы. - Бәлки һеҙгә бәхет йылмайыр, призовой фондтары бик еллә күренә.

**(Дауамы. Башы 23-сө һанда).**

ЖУРНАЛИСҠА ӨС ҺОРАУ

**Туған телгә һәм туған мәҙәниәткә нигеҙләнгән тәрбиәнең матур өлгөһөн үҙендә сағылдырған "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телестудияһы быйыл үҙенең 30 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Студияла үҙ һөнәр нескәлеген яҡшы белгән һәм яратып башҡарған журналистар эшләй. Шуларҙың береһе - Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, "Тамыр" телеканалының өлкән мөхәррире Зөлфиә Даянова 1996 йылдан алып үҙенең яҙмышын "Тамыр" менән айырылғыһыҙ итеп бәйләне. Бөгөнгө көндә уңған журналист радионан "Иләү", "Аҡ елкән", "Көнбағыш", "Йырлы кәрәҙ", телевидениенан "Сәңгелдәк", "Әкиәт китабы", "Бейе", "Сулпылар" тапшырыуҙарын әҙерләп алып бара. "Тапшырыуҙарым үҙемдең балам кеүек ҡәҙерле," - тип әйтеүе лә юҡҡа түгел. Беҙ Зөлфиә ДАЯНОВАға өс һорау менән мөрәжәғәт иттек.**



# БЕҘ КИЛӘСӘКТЕ ТӘРБИӘЛӘЙБЕҘ

➔ **Бөгөн балалар ниндәй, киләсәгебеҙ шундай буласаҡ, тиҙәр. Ниндәй ул балалар донъяһы, һәм һеҙгә ниндәй көтөлмәгәнлектәр менән осрашырға тура килә?**

- Мин "Тамыр"ға эшкә килгәндә ул үҙе лә "бала" ғына ине. Бише лә тулмағайны. Ҡасандыр үҙҙәре "Иләү", "Сәңгелдәк" тапшырыуҙарында алып барыусы булып эшләгән балалар хәҙер инде үҙ балаларын беҙҙең тапшырыуҙарға алып килә. Туған телендә матур итеп аралашҡан йәштәрҙән "Беҙ бит "Тамыр"ҙы ҡарап үҫтек", тигәнде йыш ишетергә тура килә. Ысынлап та, "Тамыр" ата-әсәләргә балаларын рухлы, телһөйәр итеп тәрбиәләргә ярҙам итә.

Балалар бөгөн ниндәй, киләсәгебеҙ шундай буласаҡ, тиҙәр, һәм ул киләсәкте беҙ бөгөн үҙебеҙ тәрбиәләйбеҙ. Күп кенә халыҡтарҙа баланды тәрбиәләмә, үҙенде тәрбиәлә, сөнки балаң һиңә оҡшаясаҡ, тигән мәҡәл бар. Шуға күрә, әгәр ҙә балаң һәр тарафтан да яҡшы булһын тиһәң, тәү сиратта үҙеңә өлгө күрһәтергә кәрәк, тип уйлайым мин.

Балаларға бөтә нәмә ҡыҙыҡ. Улар үҙҙәрен уратып алған донъяны тиҙерәк асырға ынтыла (был сифат бөтә йән эйәләренә лә хас инде.) Шуға һорауҙары ла бик күп: ә ниңә, ә ниңә? Беҙҙең бурыс аҡыллы яуаптар, дөрөҫ йүнәлеш биреү, донъяны танып-белергә ярҙам итеү. Әлбиттә, һәр заман балаларға йөгөнтө яһай. Мәҫәлән, хәҙерге заман технологияларын оҫта ҡулланған балалар менән бала саҡтағы үҙебеҙҙе сағыштырып булмай. Улар өсөн ҡәҙимге һаналған күп нәмәләр бөтөнләй юҡ, уйлап табылмаған ине. Шулай ҙа һәр заман балалары өсөн ихласлыҡ, күпте белергә ынтылыу, яҡшылыҡҡа ышаныу уртаҡ булып тора, миңенсә.

**Баланың уйында нимә, телендә лә шул. Уйламаған, көтмәгән урында балаң һине уңайһыҙ хәлдә ҡалдырмаһын, тиһәң, бала алдында ауыҙыңды үлсәп асырға кәрәк: ғәйбәт һөйләмәҫкә, кеше яманламаҫҡа һ.б. Улар уйын йә булмаһа башҡа нәмә менән мәшғүл булһа ла, һәр ваҡыт һине тыңлап, ишетеп йөрөй.**

Ә эшкә килгәндә, көтөлмәгән хәлдәр, әлбиттә, була. Өйҙә тәтелдәп торған бала камера, микрофон алдында бер һүҙ әйтергә теләмәүе, илап ебәреүе мөмкин. Ҡайһы ваҡыт бала һин сценарийҙа яҙған һүҙҙе әйтә алмай. Был осраҡта ошо һүҙҙең синонимын эҙләйһең, ҡайһы берҙә тотош һөйләмдәрҙе үҙгәртергә тура килә. Һәм, киреһенсә, ҡайһы бер балалар һин яҙғанды бик матур итеп үҙе аңлағанса ябай һәм ыҡсым ғына итеп әйтеп ебәрергә мөмкин. Бәләкәй балалар менән эшләгәндә һин бер ҡасан да мөхәррир генә булып ултыра алмайһың: иң тәүге сиратта һин - тәрбиәсе. Бөтә яҡлап та.

➔ **2024 йылда Өфөлә I Бөтә донъя балалар фольклориадаһы үтәсәк. Һин унда нимәгә иғтибар бирелеүен теләр инең?**

- Фольклориаданың төп маҡсаттары булып үҫеп килгән быуында донъя тарихына, мәҙәниәтенә, ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу, патриотик тәрбиә биреү, милли йолаларҙы тергеҙеү тора. Күтәрелгән бөтә һорауҙар ҙа актуаль, кәрәкле. Сөнки улар бөтәһе лә милләттең рухын күтәрәсәк, алға ҡарап ышаныслы йәшәргә ярҙам итәсәк.

➔ **Әсәйең билдәле яҙыусы, Тәскирә апай шулай уҡ балалар өсөн бик матур әҫәрҙәр ижад итә. Яҙыусы ҡыҙы булыуың торошонда нисек сағылыш ала?**

- Инәйемдең тәүге әкиәте, яңылышмаһам, мин мәктәпте тамамлай торған йылда "Аманат" журналында баҫылды. Быға тиклем ул яҙышмай ине. Мин университетта уҡыуҙы тамамлауға, Тәскирә Даянова балалар яҙыусыһы булараҡ билдәле ине инде. Инәйем ижад иткән әкиәттәр милли рух менән һуғарылған, тәрбиәүи йәһәттән ҙур әһәмиәткә эйә. Ә унең үҫмерҙәр тураһында яҙған повестарында замандың ҡырҡыу проблемалары, әхлаҡ темаһы күтәрелә; үҫмер күңеленең ниндәй ҡаршылыҡтар менән көрәшеүе тасуирлана. Уның был әҫәрҙәре үҫмер балалары булған ата-әсәләр өсөн әсбап, өҫтәл китабы булып тора алыр ине, тип әйтә алам. Инәйемдең бөтә әҫәрҙәрен дә мин баҫам: тәүге уҡыусыһы ла, мөхәррире лә мин.

Әлбиттә, һөнәрем буйынса мин күләмле әҫәрҙәр ижад итмәйем, ә диалогтарға ҡоролған сценарийҙар яҙам. Был үҙе ҙур оҫталыҡ талап иткән эш, сөнки тамашасыға бөтә идеяны, мәғлүмәтте ошо ҡыҫҡа һөйләмдәр аша еткерергә кәрәк.

Тәүҙәрәк, эш башлағанда, яҙырға тема тапмай китһәм, инәйемдән ярҙам һорай торғайным. Ҡайһы берәүҙәр сценарийҙарымды инәһе яҙып бирә, тип уйлай ине.

Инде күп йылдар сценарийҙар яҙам, тәжрибә лә ҙур ғына. Уратып-суратып яҙырға яратмайым, балалар ундайҙы аңламаҫ та ине. Тапшырыуҙарым кескәйҙәр өсөн булһа ла, йыш ҡына өлкәндәрҙән: "Тапшырыуҙарығыҙ ҡыҙыҡлы, мәғлүмәткә шул тиклем бай. Үҙем өсөн әллә күпме нәмә белеп ҡалдым", - тигәндәрен ишетергә тура килә. Был һалынған хеҙмәткә етди баһа тип уйлайым.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмәләште.**

ПАРСАЛАР

## Ул беҙгә кәрәкме?

Бөгөн урамыбыҙға автолавка килде. Йыйылып киткән ҡатын-ҡыҙҙарҙың өгөтләүенә бирелеп, мин етмеш литрлыҡ бак һатып алдым. Он һаҡлау өсөн уңайлы, тинеләр. Ондо быға тиклем келәттәге ларға бушата инек. Лар тигән нәмә элек тирмәнгә барып, дүрт-биш тоҡ он алып ҡайтҡанда уңайлы булһа ла, хәҙер берәр тоҡлап алып йөрөгәс, унда бушатыуы бик маҡсатҡа ярашлы ла түгел.

Шул лар булғанға микән, әллә был бактан алда пластмасса бак һатып алғанға микән (унының ярылды), ирем һуҡранды:

- Ә ул беҙгә кәрәкме һуң?

- Кәрәк. Он бушатырға, - тинем дә, үҙем уйланып ҡуйҙым.

Аҡсаға бәйле эштәрҙе һәр ваҡыт мөмкин тиклем килешеп эшләргә кәрәк. Сөнки ғаилә - ул үҙенең халҡы, территорияһы, сәйәсәте генә түгел, ә иҡтисады ла булған бәләкәй генә бер дәүләт бит.

## Ҡан хәтере

Яҡшы танышым, сит телдәр уҡытыусыһы Рәмилә студент ваҡытында үҙе менән булған хәлде һөйләне. Ул урыҫ мәктәбен тамамлаған, башҡортса бик фекерләй белмәй. Студент ваҡытында төркөмдәрендә лә бүтән башҡорт ҡыҙҙары булмаған. "Бер көн төркөмөбөҙ менән ниндәйҙер бер концертҡа барҙыҡ, хәҙер хәтерләмәйем инде. Бына сәхнәгә бер егет сыҡты һәм ҡурай уйнай башланы.Ҡурай моңон ишетеү менән миңә нимәлер булды: ҡапыл күңелем тулды һәм, үҙем дә аңламайым, мин туҡтай алмай иларға тотондом. Нимә булды икән миңә?"

Мин ҡапыл ғына нимә тип яуап бирергә лә белмәнем. "Моғайын, быға тиклем йоҡлап ятҡан ҡан хәтере уянғандыр",- тигән булдым. Бүтәндәр Рәмиләгә нимә тип яуап бирерҙәр ине икән?

## Кейәү килде - хан килде!

Бер мәл ҡунаҡта бер ирҙең үҙенең бер туған апайы менән һөйләшкәнен ишетеп ҡалдым. "Мин ҡәйнәмде әсәйҙән дә нығыраҡ яратам",- тине ул. Мин эстән генә ризаһыҙлыҡ белдереп ҡуйҙым: яратһа ла, хөрмәт итһә лә, апайына әйтмәҫкә кәрәк ине, уның быны дөрөҫ ҡабул итмәүе лә бар бит.

Һуңынан оҙаҡ ҡына уйланып йөрөнөм. Урыҫ көләмәстәрендә, мәҫәлән, ҡәйнә менән кейәү образдарына шул тиклем күп урын бирелә. Бахыр ҡәйнәне ни генә ҡыландырмай "аҡыллы" ла, "тапҡыр" ҙа булған урыҫ кейәүҙәре! Ә бына башҡорт халҡында, дөйөм алғанда, ҡәйнәгә мөнәсәбәт бөтөнләй икенсе. Халыҡ ижадына күҙ һалһаҡ та, "Кейәү һыйы - хан һыйы", "Кейәү килде- хан килде", "Кейәүгә ултырһа ла ҡамау, торһа ла ҡамау" тигән мәҡәлдәребеҙ быға асыҡ миҫал.

Бына яңыраҡ аҙналыҡ "Йәшлек" гәзите ир-егеттәргә "Ҡәйнәгеҙҙе хөрмәт итәһегеҙме?" тигән һорау менән мөрәжәғәт итте. Яуап биргән күпселек ирҙәр ҡәйнәләрен хөрмәт итеүҙәрен, уны әсәй кеүек яҡын күреүҙәрен, ятыуҙарын белдерҙе. Әсәйемдең дә: "Өләсәң атаңды хөрмәт итте. "Кейәү ҙә улың шикелле яҡын була ул", ти торғайны", - тип һөйләгәне хәтеремдә.

Һәр бер ҡағиҙәнең иҫкәрмәһе була, тигәндәй, бында ла юҡ юҡ та төрлө мәлдәр, төрлө хәлдәр килеп тыуалыр ул? Тормош бит...

## Һандыҡ

Бына әсәйем стена буйында ултырған һандыҡтың өҫтөнән ҡаралдыһын алып, һандыҡты асып, нимәлер эҙләй башланы. Мин, бәләкәй ҡыҙ, йөгөнләп ултырып, уны күҙәтәм. Әсәйем һандыҡты аса башлаһа, һәр ваҡыт шулай итәм. Яратам һандыҡ ҡутарғандарын ҡарарға! Бер шулай Көрәк өләсәйемдәрҙә уның һандығын рәтләгәнен күҙәтеп ултыра торғас, өләсәйем бер матур биҙәкле материалын миңә тотторҙо. Һуңынан, күп йылдар үткәс, мин кейәүгә сыҡҡас, әсәйем миңә шул тауарҙан шаршау тегеп бирҙе.

Бала саҡта һәр өйҙә тиерлек түрҙә ялтыр ҡалай менән ҡупшылап көпләнгән һандыҡ ултырыр ине. Һандыҡ ауыл өйөнөң күрке лә, ҡото ла, етеш йәшәүен белдереп торған бер билдә лә ине. Ә һандыҡ эсендә нимәләр генә юҡ! Унда ҡатын-ҡыҙҙың бар байлығы, күңеленә яҡын иҫтәлекле әйберҙәре урын ала. Ҡыҙлы кешеләрҙең ҡыҙҙарына әҙерләгән бирнәһе лә шул һандыҡта ята. Еткән ҡыҙлы кешеләр яңыртып һандыҡ эшләтеп, һандыҡ өҫтөнә йыйыр өсөн ҡаралдыһын да, йәғни балаҫ, кейеҙ , юрғандарын әҙерләй башлар ине. Һуңыраҡ һандыҡ аяғы тигән әйбер барлыҡҡа килде. Кешеләр оҫталарҙан һандыҡты ыңғай иҙәнгә түгел, ә һандыҡ аяғына ултыртыу өсөн ағастан матур ҡулайламалар эшләтеп алдылар.

Йылдар үтә, тормош үҙгәрә килә иң алда урындыҡтар юҡҡа сыға, шунан һандыҡтар түрҙән ишек төбөнә, һуңынан соланға, келәткә күсә башланы. Юрған, кейеҙ, яҫтыҡтарын хужабикәләр шифоньер баштарына мендерҙе, койка-карауаттарына йәйеп һалып, өҫтөнә матур япмалар ябып, бейек итеп яҫтыҡтарын өйөп ҡуя башланылар.

Бына һуңғы йылдарҙа һандыҡҡа тағы ла иғтибар артты. Һандыҡтарҙы заманса матур итеп эшләгән оҫталар барлыҡҡа килде. Мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында "Өләсәйем һандығы" тигән асыҡ дәрестәр, иртәлектәр үткәрелә башланы. Хатта бер йылы район кимәлендә һандыҡҡа арналған шоу үткәрҙеләр!

Алыҫта ҡалған биш-алты йәшлек саҡтарыма һағынып ҡайтып урайым һәм хәҙерге ҡыҙҙар тураһында уйланам: һандыҡтарын асҡан өләсәләре янына улар ҙа йүгереп килеп ултыралар микән?

## Матур мәл

Беҙҙең ғаилә дуҫтарыбыҙ Зөләйха менән Сафуан туғандарының туйында булғандар. Был ваҡиға - улар һөйләгәндән.

- Бына кейәү менән кәләште тәүге ғаилә байрамдары менән ҡотлай, бүләктәр бирә башланылар. Шунда кейәү бала яғынан бер ҡоҙа һүҙ алды. Ул ҡотлау телмәрен элекке бер ваҡиғаға бәйләп һөйләп алып китте. "Мин кәләш алғас, еҙнәнән бүләк алырға килгән малайҙарға бәке тараттым. Шунда бер бәләкәй генә малайҙың илай-илай тау яғына йүгергәнен күрҙем. Уға бәке етмәгән булған икән! Әлбиттә, мин уны ҡыуып етеп, еҙнә аҡсаһы бирҙем. Бөгөн мин шул хатамды төҙәтергә булдым, - тип был ҡоҙа кейәү балаҡайға бәке бүләк итте.

Был күренеш туйҙың иҫтә ҡалырлыҡ иң матур мәле булғандыр! Ике йәш йөрәктең туйҙарының бөтә мәлдәре лә иҫтә ҡалырлыҡ булһын ине!

**Мәрйәм СӘЛМӘНОВА.**
**Әбйәлил районы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ХӘРӘКӘТ ЮҠЛЫҠҠА...

## цивилизация "ғәйепле"

■ Лондондағы Империя колледж хеҙмәткәрҙәре үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, шоколадта йүткереүҙе баҫыу һәләтенә эйә булған матдә - теобромин барлығы асыҡланған. Шуға ла һыуыҡ тейгәндә шоколад ашау файҙалы. Был татлы аҙыҡтың ыңғай яғы ошо ғына түгел. Шоколад тирене ҡояш нурҙарынан һаҡлай һәм йөрәк-ҡан тамырҙары торошон яҡшырта.

■ Америка ғалимдары белдереүенсә, даими рәүештә ҡыҙыл сөгөлдөр йәки сөгөлдөр һуты ҡулланыу мейе эшмәкәрлеген, шулай уҡ ҡан әйләнешен һәм ҡан тамырҙары торошон яҡшырта. Составында һаулыҡ өсөн файҙалы матдәләре булған был йәшелсәне диетологтар ҙа юғары баһалай. Ул аш һеңдереүгә ыңғай йоғонто яһай, организмды витаминдар менән байыта. Сөгөлдөрҙән тыш, сельдерей, кәбеҫтә, йәшел салат та ҡан әйләнешенә файҙалы.

■ Көләү кәйефте күтәреп кенә ҡалмай, сәләмәтлеккә лә яҡшырта, тип белдерә Һиндостандың Indraprastha Apollo дауаханаһы белгестәре. Тикшереү барышында асыҡланыуынса, көләү йөрәк һәм үпкәләр өсөн яҡшы күнекмә булып тора, был ваҡытта йөрәк тибеше йышая, мейе ял итә. Ғалимдар әйтеүенсә, көләү стрестан һаҡлауҙы яҡшы сара ла. Тик быны өсөн ауыҙҙы асып, рәхәтләнеп көләргә кәрәк. Ғалимдар иҫәпләүенсә, хәҙерге заман кешеһе көнөнә дөйөм алғанда 6 минут тирәһе көлә.

■ Белгестәр әйтеүенсә, тап цивилизация ҡаҙаныштары кешегә ҙур зыян килтерә. Бөгөнгө кешенең тормошонда гигиена ла, комфорт та бар, әммә сәләмәт булыу өсөн иң кәрәклеһе - хәрәкәт юҡ. Хатта балалар ҙа хәрәкәтле уйындарға ҡарағанда компьютер уйындарын хуп күрә. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) үткәргән тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, Евросоюз илдәрендәге бөтә үлемдәрҙең 10 проценты - аҙ хәрәкәтләнеүҙән. Бындай хәл бөгөн күп илдәрҙә күҙәтелә. Кеше көндәлек тормошонда ни тиклем заманса ҡоралдарҙы күберәк һәм йышыраҡ ҡуллана, шул тиклем аҙыраҡ хәрәкәт итә. Бындай шарттарҙа әгәр ҙә кеше үҙенә-үҙе ярҙам итмәһә, фән дә, медицина ла ярҙам итмәйәсәк, ти белгестәр.

■ Төрлө тәжрибәләр үткәреп ҡарағандан һуң, уң ҡулы менән генә түгел, һул ҡулы менән дә яҙа белгән кешеләргә тәьҫир итеүе еңелерәк, тип белдерә психологтар. Нью-Джерсиҙа урынлашҡан Монклер дәүләт университеты ғалимы Рут Проппер шундай тикшеренеү үткәргән. Беренсе төркөмгә ике ҡулы менән дә, икенсеһенә уң ҡул менән генә яҙа алыусылар йыйылған. Һынауҙар барышында уларҙың барыһы ла йә күңелле, йә ҡыҙғаныс, йә хәүефле берәй ваҡиға тураһында уйлаған. Был ваҡытта лабораторияла классик музыка уйнатҡандар. Кем ике ҡулы менән яҙа белә, шулар ғалимдар ҡушҡан тойғоларға тиҙерәк бирелгән. Белгестәр аңлатыуынса, бындай кешеләрҙең уң һәм һул мейе ярымшарҙарын бәйләп тороусы нервы туҡымалары нығыраҡ үҫешә. Был уларҙың эмоциональ әүҙемлегенә һәм ситтәрҙең тәьҫиренә тиҙерәк бирелеүен аңлата.

БАҠСАСЫ ҠОЛАҒЫНА

# ТӘЖРИБӘМ БАР, УРТАҠЛАШАМ

**"Йәйҙең бер көнө йылды туйҙыра", тигәнде хәтерҙә тотоп, баҡса үҫтереүселәр, ҡош-ҡорт аҫраусылар йәмле миҙгелде файҙалы һәм отошло итеп үткәрергә тырыша. Ауыл ерендә халыҡ һәр саҡ баҡсасылыҡҡа ҙур иғтибар биреп, емертеп эшләп, мул уңыш йыйырға өйрәнгән. Быйыл иһә, тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, ҡала янындағы баҡсалар ҙа бермә-бер йәнләнгән икән. Кемдер үҙенең күптән юл төшмәгән баҡсаһы барлығын иҫләп, уны сүп-сарҙан таҙартып, бер метр ерен дә әрәм итмәйенсә, түтәлдәр эшләп, емеш-еләк сәсә. Кемдең баҡсаһы юҡ, интернет киңлектәрендә йә һатып алырға йәки ҡуртымға ер биләмәһе эҙләй. Нисек кенә булмаһын, быға тиклем ер эштәренән алыҫ торғандар ҙа баҡсасылыҡҡа әүҙем тотондо. Бөгөнгө яҙмабыҙ баҡсасыларға мул уңыш алырға ярҙам итер, тип ышанабыҙ.**



*Бәрәңге - икенсе икмәк, ти халыҡ. Ысынлап та, башҡаһын сәсмәһә сәсмәй, ләкин бәрәңгене һәр хужалыҡта ултырталар. Уның уңышы мул булһын өсөн Өфө районы, Зубово биҫтәһенән Зөбәржәт Исмәғилева кәңәштәре:* Картуфты ултыртыр алдынан уны зарарһыҙландырыу мотлаҡ. Иң ҡулай, еңел һәм осһоҙ ысул - 1 килограмм һарымһаҡты иҙеп, 10 литр һыуға һалырға ла картуф орлоҡтарына мул ғына итеп һиптерергә йәки 3 сәғәт тирәһе ошо ҡатнашмаға һалып алырға. Был ысул картуф ауырыуҙарынан һәм төрлө ҡоротҡостарҙан ярҙам итә. Ғөмүмән, һарымһаҡ иҙмәһенән эшләнгән ҡатнашма менән йәшелсәләрҙе эшкәртеү тик файҙаға ғына.

Картуф бураҙнаһын да белеп эшләргә кәрәк икән дәһә! Төньяҡтан көньяҡҡа ҡарай эшләнгән бураҙнала үҫкән бәрәңгегә ҡояш нурҙары мул төшә.

Сәскә атҡандан һуң 14-20 көн үткәс картуф һабағының бөтөнлөгөн боҙмай ғына 10-15 ерҙән 10-15 сантиметр тирәһе арауыҡта бер аҙ һындырып сығыу файҙалы матдәләрҙең һабаҡҡа түгел, ә бәрәңгегә китеүенә һәм уларҙың эре булып үҫеүенә булышлыҡ итә.

***Баҡсасыларға оҙаҡ йылдар дауамында тупланған тәжрибәләре миҫалында үҙ кәңәштәрен Мәләүез районынан Рәйлә Әсәҙуллина еткерә:*** Сөгөлдөр тәмле һәм һутлы булһын тиһәгеҙ, уға ике тапҡыр тоҙло һыу һибегеҙ. Беренсе тапҡыр сөгөлдөр йомролана башлағанда, ә икенсе тапҡыр ҡаҙып алырҙан 25 - 30 көн алда. Бер биҙрә һыуға бер аш ҡалағы тоҙ алырға кәрәк.

Помидор үҫентеләрен тышҡа сығарып ултыртмаҫ элек йод иретмәһе менән туҡландырғанда, помидор тиҙерәк үҫә, мул уңыш бирә һәм ныҡ була. Ҡатнашма әҙерләү өсөн аптеканан алынған йодтың 1 тамсыһын 3 литр һыуҙа иретергә кәрәк.

Баҡсала йәшелсә-емештәрҙе нисек ултыртыу ҙа уңышҡа тәьҫир итә. Мәҫәлән, сөгөлдөр янына бөтнөк, һарымһаҡ, петрушка ултыртыу файҙалы. Кишер һәм кәбеҫтә һуған, бөтнөк, йылан тамыры (шалфей) менән күрше үҫергә ярата. Баклажан менән борсаҡ "дуҫ".

Ҡурай елэгэн яратмаған кеше юҡтыр. Ләкин ул бөтә баҡсаны баҫып алырға ғына тора. Быға юл ҡуймаҫ өсөн мин ҡурай еләге өсөн билдәләнгән урынды уратып, ергә 50 сантиметр тирәһендә шифер ҡуйҙырып сыҡтым. Шулай уҡ тимер киҫәктәре лә баралыр, тип уйлайым. Йыл һайын ҡырҡып, таҙалап хәл бөтә ине, хәҙер нисә йыл үҙҙәренә генә тәғәйен урында үҫә ҡурай еләге. Әлбиттә, ҡыуаҡты һирәгәйтеп, ҡарт ботаҡтарын ҡырҡып ташлап торабыҙ.

Тағы ла был мәшәҡәттән ҡотолоу юлы - ҡурай еләге тирәләй һарымһаҡ ултыртып сығыу. Күршем иҫбатлауынса, ҡыуаҡтар был сиктән ситкә сыҡмай икән, ләкин үҙем тикшереп ҡараманым.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ҺУҒАН ҠАБЫҒЫ



**Һәр көн иртән һуған ҡабығы ҡушып сәй яһап эсергә кәрәк. Ике йыл дауамында ошо рәүешле дауаланыусылар һөҙөмтәлә аяҡты көҙән йыйырыуы, көндәлек баш ауыртыуы, аяҡ табаны һәм балтыр тирәһендәге тире аҫтына ҡан һауыуы тулыһынса бөтә, тип иҫбатлай.**

Ләкин бер аҙ ҡан баҫымы түбәнәйеүе күҙәтелә икән. Һуған ҡабығы ҡайнатмаһын эсә башлаһаң күҙҙең ҡыҙарыуы ла бөтә, күреү һәләте яҡшыра. Һуған ҡабығының файҙалы сифаттары тураһында мәғлүмәттәр күп. Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙарға ҡалын һәм оҙон сәстәр үҫтереү өсөн бер ус һуған ҡабығына бер стакан һыу ҡойоп, 5-10 минут ҡайнатып алырға һәм кәрәкле температураға тиклем һыуытырға.

Шулай уҡ, һурпа бешергәндә лә һуғанды ҡабығы менән һалырға мөмкин, ул ашҡа үҙенсәлекле төҫ тә бирә, файҙаһы ла ҙур. Мәҫәлән, бындай һурпала йөрәк эшен тонусҡа килтергән матдәләр бар, улар иммунитетты ла нығыта, ҡаҡырыҡ сығарырға, эс йомшартырға, бәүел ҡыуҙыртҡыс, үт һыуын сығарыусы, спазмалитик, антисептик, яман шешкә ҡаршы һәм башҡа үҙенсәлектәргә эйә. Гипертониктарға һаулыҡтарын нығытыу өсөн көн һайын һуған ҡабығынан сәй яһап эсергә була. Һуған ҡабығы ҡайнатылған һыу организмдан артыҡ натрий һәм хлор матдәләрен сығарырға ярҙам итә, был да йөрәк ауырыуҙары менән яфаланыусыларға кәрәкле.

Башлы һуғандың ҡабығы ярҙамында аяҡты көҙән йыйырыуҙан арынырға мөмкин. Бының өсөн бер стакан ҡайнар һыуға семтем һуған ҡабығын һалып, ун минут көтөп торорға. Шунан һуған ҡабығын һөҙөп алып, йоҡлар алдынан һыуын эсергә кәрәк. Аяҡтар һыҙлауы, көҙән йыйырыуҙан тулыһынса арындыра. Һуған ҡабығын сәйгә ҡушып яһап эсергә була.

Тикшеренеүҙәр барышында һуған ҡабығы составында дүрт процент антиоксидант, кверцетин биофлавоноиды барлығы асыҡланған. Был тәбиғи биологик актив матдә Р витаминдары төркөмөнә ҡарай. Кверцетин рутин молекулаһының углеводһыҙ өлөшө. Был матдә алма, һуған, һарымһаҡ, йәшел сәй составында бар. Кеше организмына кверцетин күп кәрәк, шуға мөмкин булһа ошо аҙыҡтарҙы көндәлек рационға индереү мөһим. Билдәле доктор Аткинс кверцетин матдәһен иң яҡшы антигистамин тип иҫәпләгән һәм аллергия менән яфаланыусыларға ҡабул итергә ҡушҡан. Әммә күп табиптар кверцетинды йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын иҫкәртеү сараһы булараҡ белә. Кверцетин матдәһе булған аҙыҡтарҙы күп ашаған кешеләрҙә инсульт, инфаркт йә ҡан тамырында төйөр барлыҡҡа килеү ҡурҡынысы һирәгерәк. Һарымһаҡ менән һуған ҡабыҡтарынан әҙерләнгән төнәтмәләрҙе оҙаҡ һаҡларға ярамай. 1996 йылда ғалимдар кверцетин матдәһе яман шеш ауырыуын дауаларға ярҙам итеүен асыҡлаған. Ғилми тикшеренеүҙәр һөҙөмтә-

*✓ Һеҙҙең эшһеҙ кешегә иғтибарығыҙ тыуырмы? Әрпеш кейемлегә? Балаһы тәрмәлә ултырған кешегә? Беҙ уларҙы уңышһыҙ кешеләр тип уйлайбыҙ. Һәм беҙ уларҙы урап үтәбеҙ.*



ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТ

**Үткән дәүерҙәрҙә иманлы, көслө рухлы кешеләр ғүмер иткән, ә бөгөнгөләр улар менән тиңләшә аламы? Һижрә буйынса өсөнсө быуатта йәшәгән Мәкки тигән кешенең ҡыҙы тураһында, ул тап шундай ине, тип яҙып ҡалдырғандар.**

# ШӨКӨР ИТЕҮ ШУЛАЙ БУЛА



Абдулла ибн Әхмәд ибн Бакр һөйләп ҡалдырған ваҡиға: "Әбүл Хәсән әл-Мәккиҙең Мәккәлә йәшәгән ҡыҙы үҙенең тотанаҡлығы, инсафлығы менән ныҡ айырылып торған, тиҙәр. Атаһы уға ай һайын утыҙ дирхәм ебәрер булған, ҡыҙ шул аҡсаға йәшәгән. Әбүл Хәсәндең Әбүл Хәмәнде ат-Тамар атлы күршеһе үҙе менән булған бер хәлде шулай тип хәтергә алыр булған. "Мин хаж ҡылырға ниәтләнем, шунан фатиха алыр өсөн күршемә индем. Ул миңә хәйерле юл теләне һәм: "Мәккәлә фәлән йортта минең ҡыҙым тора, ошо аҡсаны уға тапшыр, зинһар," - тип миңә аҡса бирҙе. Мин тәүҙә: "Ул баланы нисек таба алырмын икән?" - тип уйланым. Мәккәгә брып еткәс, шунынһы гәжәп итте, баҡтиһәң, Мәккәлә был ҡыҙҙы бөтәнеһе лә белә икән. Уның иманлы тормош алып барыуы, намаҙ-ғибәҙәттәрен ҡалдырмауы, күркәм холоҡло булыуы, дин буйынса өгөт-нәсихәт алып барыуы, ғөмүмән, ҡылған бар изге эштәре тураһында ла мәғлүм. Әбүл Хәсәндең ҡыҙы бер ҡасан да бер кемдән ярҙам һорағаны, бурысҡа аҡса алып торғаны юҡ икән. Мәккәнең иң бай кешеләре уға ярҙам итергә әҙерҙәр, әгәр ҙә риза булһа, ҡыҙ улар ярҙамында бик етеш тормош көтә алыр ине. Ләкин ул хәләл көсө менән генә йәшәүҙе хуп күрә. Шул саҡ минең башҡа бер уй килде, күршемдең балаһына аҡсалата ярҙам күрһәтһәм, Аллаһы Тәғәлә минән разый булыр бит! Бер кеше лә эшләй алмағанды мин атҡара алам. Эйе, булдыра алам, был минең ҡулдан килә.

Атаһы биреп ебәргән утыҙ дирхәмгә мин үҙемдән йәнә лә егермене өҫтәнем һәм ҡыҙына илле дирхәм итеп тапшырҙым. Ҡыҙ аҡсаны алғас: "Атайымдың хәле нисек, бөтәһе лә яҡшымы?" - тип һорашты. Мин "Яҡшы", - тинем. "Атайым байлыҡ йыям тип, ҡулын бысратманымы, шул рәүешле Аллаһы Тәғәлә менән мөнәсәбәтен боҙманымы?" - тип өҫтәп һораны. Мин бер аҙ юғалып ҡалдым, шулай ҙа: "Юҡ, бөтәһе лә элеккесә", - тип яуап бирҙем. Ҡыҙ башын аҫҡа эйҙе һәм минән: "Ул ебәргән аҡсаға һеҙ үҙегеҙҙән өҫтәмәнегеҙме?" - тип һораны. Мин ныҡ аптыраным: "Ҡайҙан белдегеҙ быны?" "Атайым миңә һәр саҡ утыҙ дирхәм ебәрә. Тағы ла өҫтәргә уның хәле юҡ. Үҙенең йәшәү рәүешен үҙгәртеп, байлыҡ йыйырға тотонһа, әлбиттә, килеме артасаҡ. Әгәр ҙә һеҙ, хәҙер ул байый башланы, тиһәгеҙ, мин был аҡсаны алмаған булыр инем. Ә һеҙгә аҡсаны тотошлайы менән кире бирәм", - тине. "Ҡыҙым, атайыңдың бит иманы ныҡ, шул көйөнсә, ни өсөн мин биргән аҡсаны алмайһың?" "Мин үҙем йәки атайым эшләп тапҡан хәләл аҡсаны ғына алам. Бүтән бирәүҙән дә алмайым. Ни өсөн үҙем белмәгән кешенең аҡсаһын ҡулыма алырға тейешмен? Мин бит уның ниндәй юл менән табылғанын, хәләлме ул, әллә түгелме икәнен белмәйем", - тине ҡыҙ бала. Бындай яуаптан тағы ла ныҕыраҡ аптырауға ҡалдым: "Улай булғас, миңә утыҙ дирхәмен алып ҡалмайһың?" Ә ул тынныс ҡына яуап бирҙе: "Дирхәмдең ҡайһыларын атайым биргәнен айырым асыҡ белә алһам, шуларын алған булыр инем. Ләкин ул биргәндәр хәҙер һеҙҙең дирхәмдәр менән бергә буталған. Шуға бер дирхәмде лә ала алмайым".

Ни хәл итәһең, хаж ҡылғандан һуң, үҙемде әрләй-әрләй ҡайтып китергә тура килде. Ҡайтып етеү менән аҡсаны Әбүл Хәсәнгә кире алып барҙым, булған хәлде һөйләп бирҙем. Ә ул: "Минең аҡсаларым хәҙер һинекеләр менән ҡуша буталған, шуға күрә бындағы дирхәмде кире ала алмайым", - тип баш тартты. Бер яҡтан, шаҡ ҡаттым, икенсе яҡтан, ояллым, шулай ҙа һорарға батырсылыҡ иттем: "Нимә эшләтәйем һуң хәҙер был аҡсаларҙы?" Әбүл Хәсән әл-Мәкки бер аҙ уйланып торҙо ла: "Фәҡирҙәргә хәйер итеп таратыу хәйерле булыр", - тине. Бер яҡтан, ауыр хәлдән сығыу яйы табылыуына ҡыуандым, икенсе яҡтан, изгелек эшләйем тип, кешеләргә ихтыярһыҙҙан зыян ҡылыуым өсөн үкендем. Илле дирхәмде хәйерселәргә тараттым..."

Тәҡүәле кешеләр биргән иманы өсөн Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итәләр һәм кемдер бүләк иткән алтын һарайҙарға ҡарағанда, үҙҙәренең йыйнаҡ донъяларын иң ҙур байлыҡ, тип һанайҙар. Күпме быуаттар үтһә лә изге ғәмәлдәре менән онотолмаған кешеләр була.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА әҙерләне.**

һендә ул лейкемия ауырыуы, һөт биҙҙәре шеше үҫешен туктатыуы асыҡланған. Нәҡ 1996 йылда Д.Р. Ферриның кверцетин тураһында иҫ киткес мәҡәләһе баҫыла. Кверцетин матдәһе яман шеш менән зарарлы күҙәнәктәрҙә р53 гены эшен яйға һала. Сөнки тап ошо р53 гены дөрөҫ эшләгән саҡта яман шеш ауырыуына дусар булған күҙәнәктәрҙә "үҙ-үҙен юҡ итергә" көйләй. Бына шулай, кверцетин ярҙамында һөт биҙҙәре, ирҙәрҙең енес биҙе, йыуан эсәк, үпкә, мейеләге яман шеште, лимфа саркомаһы, лимфогранулематоз ауырыуҙарын дауаларға ярҙам итә. Шулай уҡ, был матдә вирустарға ҡаршы ла бик яҡшы дауа, шешеү процестарын иҫкәртә. Кверцетин капиллярҙарҙың үткәреүсәнлек үҙенсәлеген кәметә һәм ҡан тамырҙары көбөнөң тәрлә тышҡы йоғонтоларға бирешмәүсәнлеген күтәрә. Ҡан тамырҙарын киңәйтә, шыма мускулдарҙың тонусын төшөрә, спазмалитик үҙенсәлектәргә эйә. Кверцетин гипертония ауырыуы, атеросклероз, ревматизм, ҡан һәм инфекцион ауырыуҙар менән яфаланыусының капиллярҙары бик нык нескә һәм үткәреүсән булғанда ҡулланыла. Кверцетин матдәһе ауырыуҙы дауаларға ғына түгел, уны барлыҡҡа килтереүсе сәбәптәрҙән дә арынырға ярҙам итә. Шулай уҡ, ул иммунитетты нығыта, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары барлыҡҡа килеүен иҫкәртә, йөрәк ауырыуына бәйле ҡан баҫымын нормаға килтерә. Кверцетин матдәһе яныуҙан һуң барлыҡҡа килгән ауырыуҙар, өшөтөүҙән, ҡара ҡылау, һырҙарҙы кәметеү буйынса косметик процедуралар, ҡартайыу процессын яйлатыу өсөн ҡулланылған дарыуҙарҙа ҡулланыла. Тимәк, һуған ҡабығы ла ошо файҙалы үҙенсәлектәргә эйә һәм уны ташлап ҡуйғансы, һаулыҡты нығытыу маҡсатында ҡулланығыҙ.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ДОҒА КӨСӨ



Өс бала тимер юл буйлап барғанда ажғырып килгән ике поезд уртаһында ҡала. Ситтән ҡарап тороусылар: "Былар өсөһө лә үлгәндер инде", - тип хафаланып уйлаған. Әммә ул балаларҙың өсәүһе лә иҫән була.

Балалар янында йөрөгән шайтандар үҙ-ара бәхәсләшә башлай:

- Һин ниңә беренсеһен поезд аҫтына ырғытманың?

- Ул бит иртән намаҙ уҡып, доға ҡыла, уға бер нисек тә зыян эшләп булмай!

- Ә ниңә икенсеһен ырғытманың улайһа?

- Ул бит юлға сығыр алдынан "Аятел Көрси"ҙе өс тапҡыр уҡый. Тейеп булмай уға!

- Ә өсөнсөһөн? Ул бит Аллаға ышанмай!

- Шулайһын шулай ҙа... Тик өйҙән сығып киткәндә уны әсәһе: "Иҫән - һау йөрөп ҡайт, балам, Аллаһы Тәғәлә ташламаһын, һаҡлап йөрөтһөн үҙенде!"- тип, доға уҡып оҙатып ҡала. Бар, тейеп ҡара һин уға! - тигән.

Был фәһемле риүәйәт христиан халҡында ла бар. "Сила Креста" тип атала ул. Тик унда өс бала урынына ҡыҙҙар фажиғә алдында тора. Был хикмәтле хикәйәт ниндәй халыҡтыҡы булыуға ҡарамаҫтан, фәһем алырлыҡ, шулай бит? Беҙ ҙә балаларыбыҙҙы юлға сыҡҡанда һәр ваҡыт матур теләктәр теләп, доғалар уҡып оҙатып ҡалайыҡ, дуҫтар. Уларҙың барыһына ла өйҙәренә имен-аман әйләнеп ҡайтырға яҙһын!

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Үҙ-үҙеңә ышаныс һәм уның һөйөү тартып килтереүе

Ғәҙәттә, кешеләр тирә-яҡтағыларҙан илһам сығанағы эҙләй. Яҙыусыларға икенсе яҙыусылар тураһында белеүе ҡыҙыҡлы, рәссамдарҙы икенсе рәссамдарҙың ҡайҙан илһам алыуы ҡыҙыҡһындыра. Эшлекле кеше икенсе эшҡыуарҙарҙың серенә һәм алымына төшөнгөһө килә. Ғөмүмән, кешегә башҡаларҙың нимә менән нисек йәшәүе ҡыҙыҡ. Ул алған мәғлүмәт уға ла башҡалар өлгәшкән уңышҡа барырға ярҙам итер, тип хыяллана. Шуға ла иң ылыҡтырғыс үҙенсәлек булып уңыш тора.

Һеҙҙең эшһеҙ кешегә иғтибарығыҙ тыуырмы? Әрпеш кейемлегә? Балаһы төрмәлә ултырған кешегә? Беҙ уларҙы уңышһыҙ кешеләр тип уйлайбыҙ. Улар менән аралашыу беҙгә ниндәй файҙа килтерергә мөмкин? Һәм беҙ уларҙы урап үтәбеҙ. Үҙ-үҙенә ышанған кешегә, киреһенсә, иғтибар йүнәлтәбеҙ.

Үҙегеҙҙе икенсе кеше урынына ҡуйып ҡарағыҙ. Уның иғтибарын йәлеп итер өсөн һеҙ үҙ-үҙегеҙгә ышанырға тейешһегеҙ. Әммә, әгәр һеҙҙең етешһеҙлектәрегеҙ күп һәм ҡаҙаныштарығыҙ аҙ икән, нисек ышаныс сағылдырырға? Яуап бер: үҙ-үҙеңде ҡайтанан программалаштырырға.

Һеҙгә ышаныс тойорға нимә ҡамасаулай? Моғайын, һеҙ үҙегеҙҙе буй етмәҫлек идеал менән сағыштыраһығыҙҙыр? Башҡа кеше менән яҡынайыу һеҙҙә ҡурҡыу тойғоһо тыуҙырамы? Бәлки, ҡасандыр һеҙ көслө яратыу кисереп, ауыҙығыҙ бешкәндер? Һәр саҡ үҙ-үҙегеҙҙе тәнҡитләйһегеҙ? Бәлки, ата-әсәләр менән мөнәсәбәтегеҙ һеҙҙе мөхәббәткә лайыҡ түгел тигән һығымтаға килтергәндер?

Бындай кисерештәрҙең сәбәбен яратылырға лайыҡ түгелмен тигән уй менән сағыштырырға ярамай. Беҙ һеҙгә элеккеләрен юйып, быҡаса булмаған тойғоларға килтереүсе, ышаныс тыуҙырыусы яңы программа тәҡдим итәбеҙ. Әгәр кире тойғоларығыҙҙың сәбәбен асыҡлаһағыҙ, уларҙы түбәндәге күнекмәнең икенсе пунктына урынлаштырығыҙ. Күрһәтмәне бер нисә тапҡыр яҡшы итеп уҡығыҙ. Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

**Үҙеңдә ышаныс тәрбиәләү өсөн:**

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, тәрән итеп тын алығыҙ һәм ятаҡан тыныс картинаны күҙаллағыҙ.
- Әгәр үҙ-үҙегеҙгә ышанысығыҙҙы аныҡ кешеләр йәки ваҡиғалар боҙа икән, уларҙы ентекле итеп күҙ алдына баҫтырығыҙ. Барыһы ла хәҙер бара икән тип уйлағыҙ. Һуңынан ошо күренеште ҡыҙыл хәрефтәр менән яҙылған "Юҡ" тигән һүҙ менән ҡаплағыҙ.
- Үҙегеҙҙе һеҙҙең менән һоҡланған, һеҙҙең иғтибарығыҙға лайыҡ булырға тырышҡан табыныусылар араһында икән тип күҙ алдына килтерегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына өс тапҡыр: "Мин үҙемде яратам. Мине тирә-яҡтағы барыһы ла ярата. Мин үткәндәрҙәге барлыҡ күңелһеҙ хәтирәләрҙән арындым. Көндәлек тормошта минең эргәмдә мине яратҡан кешеләр генә. Шулай булһын", - тип ҡабатлағыҙ.

Яҙылғандарҙы ситкә алып ҡуйып, күнекмәне ҡабатлағыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



**20 ИЮНЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Д/ф "Их звали травники". [16+]
1.10 Х/ф "На пороге любви". [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе… [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Бабье лето". [16+]**
**17.30, 20.45, 4.30 История одного села. [12+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00, 4.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Х/ф "Идеальная жена". [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Отчаянная". [12+]**
**4.45 Честно говоря. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

**21 ИЮНЯ**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Д/ф "Война за память". [12+]
1.45 Х/ф "Сорокапятка". [12+]
3.23 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабье лето". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Хазина. [0+]**
**15.00, 18.15, 20.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30 "КультУра". [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Дела и люди. [12+]**
**20.30 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 Ныҡ бул. [6+]**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Рысь". [16+]**
**3.00 Спектакль "Заблудшая". [12+]**

**22 ИЮНЯ**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

4.00, 0.00 "22 июня, ровно в четыре утра... Реквием Роберта Рождественского".
4.10, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.10 Х/ф "Три дня лейтенанта Кравцова". [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабье лето". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30, 4.45 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Один шанс из тысячи". [12+]**
**2.45 Спектакль "Необычная история в обычной деревне". [12+]**
**5.15 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**23 ИЮНЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Д/ф "Альфред Розенберг. Несостоявшийся колонизатор Востока". [16+]
0.55 Х/ф "Мы из будущего". [16+]
3.10 Х/ф "Мы из будущего-2". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабье лето". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Это моя профессия". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Ап-асыҡ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Полеты во сне и наяву". [6+]**
**2.45 Спектакль "Близнецы". [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**24 ИЮНЯ**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 2.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.30 Х/ф "Тарас Бульба". [16+]
0.00 Х/ф "Одиночка". [12+]
2.40 "Алые паруса-2022". Прямая трансляция из Санкт-Петербурга.
3.05 Х/ф "Плохая соседка". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Д/с "Заповедники России". [12+]**
**10.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Парад медиков.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 "Это моя профессия". [12+]**
**14.00 БашГост. [6+]**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.00, 23.00 Автограф. [12+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 БашГост. [12+]**
**23.30 Х/ф "Зверобой". [0+]**
**2.30 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**4.30 Башҡорттар. [6+]**
**5.00 Тормош. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**25 ИЮНЯ**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.25 "Доктор Мясников". [12+]
12.30 Т/с "Идеальная жертва". [16+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Чужая семья". [12+]
0.55 Х/ф "Запах лаванды". [12+]
4.25 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 "Орнамент". [6+]**
**9.00 "Это моя профессия". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Ныҡ бул. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30, 5.15 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт Рустема Шагбалова. [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Сабантуй-2022. Баймакский район. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Никогда не забуду тебя". [12+]**
**2.30 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]**
**4.30 Әлләсе… [12+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**26 ИЮНЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

5.30, 3.20 Х/ф "Любовь для бедных". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.25 "Доктор Мясников". [12+]
12.30 Т/с "Идеальная жертва". [16+]
18.00 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Адмирал Колчак. Жизнь и смерть за Россию". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Орнамент". [6+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45, 2.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 Х/ф "Чак-чак". [12+]**
**16.30 "Дорога к храму". [0+]**
**17.00, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**18.00 "Высокий полет победителей". Гала-концерт фестиваля "АРТ-искусство". [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе… [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.00, 22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00, 3.00 Х/ф "Лера". [16+]**
**0.30 Спектакль "Скупой". [12+]**
**4.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## *СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 июнь "Серле көршәк"** (З. Биишева, Д. Кәримова инсц.), хикәйәт. 10.30 6+
**21 июнь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 10.30 6+
**23 июнь Премьера! "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш). 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**24 июнь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 11.00 0+
**27 июнь "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев), әкиәт 11.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**26 июнь Премьера! "Два кота"** (О. Штырляева). 12.00, 14.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков) спектакле менән Күгәрсен районы
**20 июнь** - Мәксүт,
**21 июнь** - Ялсы,
**22 июнь** - Исем,
**23 июнь** - Новохвалынский,
**24 июнь** - Тәүәкән,
**25 июнь** - Күгәрсен,
**26 июнь** - Ейәнсура районының Күгәрсен ауылында гастролдәр. 20.00 12+

## *ИҒЛАН*

**2022 йылдың 25 июнендә** Ишембай районының Маҡар мәктәбе **150 йыллыҡ юбилейын** билдәләй. Оло байрам айҡанлы бөтә уҡыусыларыбыҙҙы, уҡытыусыларыбыҙҙы, ветеран-педагогтарыбыҙҙы, техник хеҙмәткәрҙәребеҙҙе ҡотлайбыҙ.

Маҡар мәктәбендә төрлө йылдарҙа эшләгән, уҡығандарҙы иртәнге сәғәт 10-ға юбилей сараһына саҡырабыҙ. Байрамдың тантаналы өлөшө 11.00 сәғәттә башлана һәм түбәндәге адрес буйынса үткәрелә: **Ишембай районы, Маҡар ауылы,Үҙәк урам, 58-се йорт.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1443 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (21) дүшәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 19:03 | 21:54 | 23:24 |
| 21 (22) шишәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 19:04 | 21:54 | 23:24 |
| 22 (23) шаршамбы | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 19:04 | 21:55 | 23:25 |
| 23 (24) кесе йома | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 19:04 | 21:55 | 23:25 |
| 24 (25) йома | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 19:04 | 21:55 | 23:25 |
| 25 (26) шәмбе | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 19:04 | 21:55 | 23:25 |
| 26 (27) йәкшәмбе | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 19:04 | 21:55 | 23:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Һарандар үҙ байлығы өсөн шул тиклем ҡалтыранып тора, әйтерһең дә ул уныҡы, әммә ул шул байлығы менән бик аҙ файҙалана, әйтерһең дә ул уныҡы түгел. (Бион Борисфенит).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 19 ИЮНЬ - ХАЛЫҠ-АРА АТАЙ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**23-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ихата. Зөләйха. Тирмәмдә. Ҡыштау. Һабаҡ. Нәби. Ысыҡ. Сәнс. Доғалыҡ. Ирем. Лифт. Ғына. Егеткә. Ағуна. Батыр. Сыба. Әрйә. Артек. Ыҙан. Гете.

**Вертикаль буйынса:** Һандуғас. Тубылғы. Ҡарлуғас. Заём. Ыласын. Әшнә. Халҡым. Абаға. Сал. Ринг. Әминә. Торт. Архив. Егет. Ҡылыс. Терһәк. Илемә. Тояҡ. Уралым. Әсә.

*ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА*

# ЕТЕН ОРЛОҒО



**Етенде (лен) сәсеп үҫтерәләр, ул бер йыллыҡ үлән. Дауаланғанда орлоғо ҡулланыла, уны махсус магазиндарҙан да һатып алырға мөмкин. Составында гликозидтар, ферменттар, микроэлементтар, А витамины, май һәм башҡа биологик актив матдәләр бар.**

Халыҡ дауаһында етен орлоғон ҡайнаталар һәм төнәтмәһен эсәләр, ә бешерелгән орлоҡтарын ашҡаҙан сейле яраһы, гастрит, ашҡаҙандың дауамлы катараль шешеүе, ҡурылдай (ҡаҡырыҡты сығарыу өсөн), йүтәл, тын алыуы ауырлашҡанда, бөйөр ауырыуҙары булғанда ашайҙар. Һөҙөп алынған төнәтмәгә һөт ҡушып, үпкә туберкулезынан эсергә, орлоҡтарын аҡ ҡанлылыҡ (лейкоз), эс китеү осрағында ашарға була. Орлоҡ төнәтмәһе менән ауыҙ эсе боҙолғанда сайҡатырға кәрәк.

Үрҙә һанап кителгән ауырыуҙарҙан дауаланыу ысулдары ла бихисап. Шулар араһында етен орлоғон ғына түгел, майын да дауа итеп ҡулланырға кәңәш иткәндәре бар. Етен майында холестерин бик аҙ, ә туйындырылмаған майҙар кислоталары күп. Шуға уны ризыҡҡа ҡушып ҡулланыу ҡандағы фосфолипидтар тупланышын арттыра. Етен орлоғо төнәтмәһен яман шеш ауырыуынан дауаланғандан һуң эсеү файҙалы.

**Нефрит.** 1 балғалаҡ орлоҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, тағы ла 2-3 минут ҡайнатып алырға һәм 1 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне ике көн дауамында һәр 2 сәғәт һайын 1-2 стакан эсергә. Бөйөрҙәрҙе яҡшы таҙарта.

**Бәүел ташы ауырыуы.** 1 балғалаҡ орлоҡҡа 1 стакан һыу ҡойорға, бер нисә минут ҡайнатырға һәм һыуытырға ҡуйырға. Ике көн дауамында һәр 2 сәғәт һайын яртышар стакан эсергә. Төнәтмәгә ҡайнатылған һыу ҡушып эсергә ярай.

**Эс ҡатыу.** 2 балғалаҡ орлоҡҡа 1 стакан һыу ҡойорға һәм талғын утта 10 минут ҡайнатырға. Шешәгә ҡойоп алырға һәм 5 минут болғатырға, һөҙөргә. Ярты стакан эсергә.

Йәки 2 балғалаҡ орлоҡҡа 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойоп 3 сәғәт тоторға. Лайлаһын йоҡлар алдынан эсергә.

**Аяҡтар шешенһә (отек).** 4 ҡалаҡ орлоҡҡа 1 литр һыу ҡойорға, 10-15 минут ҡайнатырға. Шунан 1 сәғәт йылыла төнәтергә. Һөҙмәҫкә лә мөмкин. Тәмлерәк булһын өсөн лимон йәки емеш һуты өҫтәргә мөмкин. Көн дауамында 2 сәғәт һайын яртышар стакан эсергә, көнөнә 6-8 тапҡыр килеп сыға. Эҫе көйөнсә эсеү һөҙөмтәлерәк. Шифаһы 2-3 аҙнанан уҡ беленә.

**Иҫкәрмә:** етендең зыяны юҡ кеүек тойолһа ла, уны ла ҡулланырға ярамаған осраҡтар барлығын хәтерҙән сығармағыҙ. Етенде оҙайлы, бигерәк тә самаһын белмәй ҡулланып, ағыуланыуығыҙ ихтимал. Холециститҡа (үт ҡыуығының шешеүе) бәйле ауыртыныуҙар көсәйгән осорҙа етен менән дауаланырға ярамай. Шулай уҡ эсәк эшмәкәрлеге боҙолғанда (туҡтауһыҙ эс китеү булғанда), кератит (күҙҙең мөгөҙсә ҡатламының шешеүе) булғанда уны ҡулланыу тыйыла.

*ЯБАЙ ҒЫНА КӘҢӘШТӘР*

# ЯЛ ИТЕҮСЕ БАЛАЛАРҒА



**Балаларыбыҙ йәйҙе хәүеф-хәтәрһеҙ үткәрһен, тигән теләк бөгөн ата-әсәләрҙең, уҡытыусыларҙың уртаҡ хәстәренә әүерелә. Нимә ул хәүеф? Әйҙәгеҙ, барлап үтәйек уларҙы:**

**Беренсе хәүеф:** ҡояшта бешеү һәм эҫе ҡабыу.
**Икенсе хәүеф:** бөжәктәр тешләүе.
**Өсөнсө хәүеф:** юл һәм транспорт фажиғәләре.
**Дүртенсе хәүеф:** һыу ятҡылыҡтары ҡурҡынысы.
**Бишенсе хәүеф:** эсәк инфекциялары.

Беренсе хәүеф тураһында ентекләберәк. Әгәр бала ҡояшлы көндә йыш һәм оҙаҡ баш кейемһеҙ йөрөһә, был организмдың ныҡ йылыныуына һәм баланың башына эҫе ҡабыуына килтерә. Киләһе ябай ҡағиҙәләр был хәүефтән һаҡланыу саралары булып тора:

- Тышҡа сығыр алдынан баланың башына панама (кепка, бейсболка) кейҙерергә кәрәк.
- Баланың күренеп торған тән өлөштәренә һаҡлаусы крем һөртөгөҙ.
- Сәғәт 10-дан алып 15-кә тиклемге ваҡыт ҡояш нурҙарының иң ҡыҙыу мәле булып тора. Был ваҡытта ҡыҙыныу бик хәүефле һәм күләгәлә ял итеү отошлораҡ һанала.
- Бала ҡояш аҫтында 30 минуттан да артыҡ булмаҫҡа тейеш.
- Балаларҙың тәне ныҡ йылынырға тейеш түгел, уға күләгәлә уйнап торорға һәм тағы сығырға тәҡдим итегеҙ.
- Баланың кейеме асыҡ төҫтәрҙә һәм еңел, тәбиғи материалдарҙан булырға тейеш.
- Һыу эсеү режимын дөрөҫ ойоштороу мөһим.
- Баланы эҫе һуҡһа, уны еүеш таҫтамалға төрөргә һәм өйгә алып ҡайтырға, бешеүҙән һаҡлаусы аэрозоль ҡулланырға кәрәк.
- Йәй көндәрендә балалар утҡа, эҫе һыуға, һурпаға бешеүсән. Был хәүефте лә күҙҙән ысҡындырмағыҙ.
- Әгәр бала тәнендә 2.5 сантимерҙан да ҙурыраҡ янған урын күҙәтелһә, тиҙ арала травмпунктка мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Беҙҙең балалар баҡсаһында ошондайыраҡ хәүефле хәлдәрҙә һаҡланыу маҡсатында төрлө саралар үткәрелә. Кескәйҙәр менән фәһемле әңгәмәләр, уйындар, дәрестәр, осрашыуҙар, экскурсиялар һәм башҡа саралар ойошторабыҙ. Сөнки иҫкәртеүсе саралар бала ғүмерен һаҡлап ҡалырға ярҙам итәсәк.

**Рәхилә ӘХМӘТЙӘНОВА,**
**Баймаҡ районы Темәс балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе.**

*ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ*

# ФИЛАРМОНИЯ ГӨРЛӘЙ



**Йәй - республиканың сәнғәт коллективтары өсөн үткән ижад миҙгеленә йомғаҡ яһау һәм яңыһына әҙерлек осоро. Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы уны ниндәй йомғаҡтар һәм киләсәккә пландар менән ҡаршы ала? Ошо турала Реклама һәм йәмәғәтселек менән бәйләнеш бүлеге етәксеһе Ирина ЗАХАРОВА һөйләне.**

**Йыл йомғаҡтары һәм яҡын киләсәккә пландарығыҙ ниндәй?**

- Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы 83-сө ижад миҙгелен тамамлап, уға йомғаҡтар яһай. Йыл һайын беҙҙең ижади коллективтар үҙебеҙҙә 200-ҙән ашыу концерт, ә гастролдәрҙә меңдән ашыу сығыштар яһай. Былдай емешле эшкә, Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендәге филармониянларҙан айырмалы рәүештә, эстрада төркөмдәре һаҡланып ҡалыуы ла булышлыҡ итә. Улар Башҡортостан буйлап та, башҡорттар күпләп йәшәгән башҡа төбәктәргә лә концерттар менән бик теләп сыға. Үткән миҙгел бик күп ваҡиғаларға, матур концерт программаларына, яңы проекттарға бай булды. Шуларҙың береһе - 25 йыллығын билдәләгән "Розовая пантера" джаз фестивале. Уны быйыл Рәсәйҙә ошо музыкаль йүнәлеш барлыҡҡа килеүгә 100 йыл тулыуға арнап үткәрҙек һәм тамашасыларҙың күңеленә шул тиклем хуш килеүен тойҙоҡ. Башҡортостандың Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестрының "НОНИ менән классика" тигән бик моңло проектын да яратып ҡабул иттеләр. Уның сиктәрендә артистарыбыҙ ҡурай, думбыра, ҡумыҙ, ҡыл ҡумыҙ кеүек башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында Чайковский, Вивальди һәм башҡа донъяға билдәле композиторҙарҙың әҫәрҙәрен уйнап ишеттерҙе. Шулай уҡ был коллектив Новосибирск ҡалаһында үткән "Себер ҡылдары" Халыҡ музыка ҡоралдары оркестрҙарының халыҡ-ара фестивалендә Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Линар Дәүләтбаев етәкселегендә уңышлы ҡатнашып, рәхмәт хаттары менән бүләкләнеп ҡайтты.

Әйткәндәй, Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестры киләһе 84-се ижад миҙгелендә "Ҙур гастролдәр" федераль проекты сиктәрендә Рәсәйҙең бик күп ҡалаларында сығыш яһаясаҡ һәм был турне Санкт-Петербург менән Мәскәү ҡалаларындағы тамашалар менән тамамланасаҡ, тип көтөлә.

Филармониябыҙ коллективында халыҡ күңелен үҙенсәлекле моңо менән күптән арбаған йырсылар эшләй, уларға лайыҡлы алмаш булырҙай йәштәрҙе лә эшкә алып торабыҙ. Быйыл эстрадабыҙға яңы һулыш индереп Илдар Абдуллин, Алиса Жумағәлиева, Әлфиә Ниғмәтуллина килде. Улар баш ҡала тамашасыһына "Шаңдау" тигән тәүге шоу-программаһын тәҡдим иткәйне, әлеге көндә өлкән коллегалары менән бергә республикалағы район һабантуйҙарында, Пермь крайында, Һамар, Силәбе өлкәләрендә, Мәскәү ҡалаһында үткәрелгән һабантуй байрамдарында ҡатнашып йөрөй. Ижад миҙгеле тамамланды, тиһәк тә, беҙҙең эстрада коллективтары бына шулай милләттәштәребеҙ йәйге ялын йыр-моңға күмелеп үткәреүен хәстәрләп, эшләүен дауам итә. Мәҫәлән, **24-25 июндә** баш ҡалала уҙасаҡ "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивалендә филармония артистары бик әүҙем ҡатнашыуы көтөлә. Ә бына **25 июндә** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Диана Ишниязова етәкселегендәге ижади төркөмөбөҙ Екатеринбург ҡалаһында, "Далан" эстрада төркөмө Силәбелә милләттәштәребеҙҙе байрам сараларында тәбрикләйәсәк. Беҙ "Башҡортостан эстрадаһының романтиктары" тип йөрөткән һәм ижадтарын халыҡ бик яратып ҡабул иткән БР-ҙың халыҡ артистары Искәндәр Ғәзизов һәм Заһир Иҫәнсурин ингән төркөм **23 июндә** Ырымбур өлкәһенең Төйләгән район һабантуйында сығыш яһаясаҡ. Ғөмүмән, филармонияның бар ижади коллективтары ла 11 июлгә тиклем шулай эшләп, бер аҙ ял итеп алғас, август айында тағы ла Башҡортостан буйлап гастролдәргә сығып китмәксе. Ә инде Мәскәүҙә йәшәгән милләттәштәребеҙ Башҡортостандың Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестрын **18 августа** "Зарадье" паркында күрә ала. Баш ҡала тамашасыһын һәм ҡунаҡтарын филармонияның 84-се ижад миҙгелен асыу сараларында: **28 сентябрҙә** Ҙур залда "Музыка, рожденная ветром" тынлы музыка ҡоралдарының халыҡ-ара фестивале һәм **1 октябрҙә** Бәләкәй залда Олег Касимов етәкселегендәге Камерный оркестр "Бах" программаһы менән көтөп ҡала.

**Филармония кескәй тамашасыларын да матур программалары менән ҡыуандырып тороуын беләбеҙ...**

- Башҡорт дәүләт филармонияһына 83 йыл элек халыҡты классик музыка әҫәрҙәре нигеҙендә тәрбиәләү өсөн нигеҙ һалына. Ошо маҡсатыбыҙға бөгөнгәсә тоғро ҡалып киләбеҙ һәм тамашасыбыҙҙы әсә ҡарынында ятҡан саҡтан уҡ тәрбиәләй башлар өсөн "Музыканы бергә тыңлайбыҙ" проектын булдырғанбыҙ. Йөклө ҡатындар һәм 3 йәшкә тиклемге балаларға тәғәйенләнгән моңло тамаша һәр шәмбе һайын орган залында үткәрелә, ул киләһе миҙгелдә 10 йыллыҡ юбилейын билдәләйәсәк. Бынан тыш, бар ғаилә өсөн йәкшәмбе концерттары ҡуябыҙ. Ә филармонияның иң өлкән коллективтарының береһе булған Музыкаль-әҙәби лекторий 83-сө ижад миҙгелендә үҙенең 80 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Был лекторийҙа бер нисә бригада эшләй һәм улар балаларҙы бәләкәйҙән үк юғары профессиональ кимәлдәге музыка әҫәрҙәрендә тәрбиәләү эшен үҙ өҫтөнә алған. Шуға күрә төрлө йүнәлештәге концерт программалары менән Өфөнөң һәм республиканың башҡа ҡала-ауылдарындағы мәктәптәрҙә сығыш яһайҙар. Быйыл уларҙың "Герои, ставшие историей" тигән программаһы бик күп ыңғай баһалар алды, ул балаларға Салауат Юлаевтан алып бөгөнгө көнгә тиклем булған төрлө башҡорт батырҙары тураһында бәйән итте. Рәсәй Геройы Миңлеғәли Шайморатов та шулар иҫәбендә бар ине. Музыкаль-әҙәби лекторийҙың һәр тамашаһы ҡыҙыҡлы, фәһемле итеп төҙөлә һәм кескәйҙәргә башҡорт мәҙәниәте, ауыҙ-тел ижады, Башҡортостан тарихы, мәктәп программаһына ингән яҙыусы һәм шағирҙарҙың ижады һ.б. рухи ҡиммәттәребеҙ тураһында бәйән итә.

Миҙгел аҙағында балалар ижадына бәйле тағы бер шатлыҡлы хәбәребеҙ бар: "Салауат" балалар бейеү ансамблебеҙгә "Өлгөлө үҙешмәкәр коллектив" тигән маҡтаулы исем бирелде. Унда бик һәләтле балалар шөғөлләнә һәм тырышлыҡтары шулай юғары баһаланыуын күреп шатландыҡ.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АПТЫРАҒАН...

### атаһының ҡуйынын ҡутарған

Ике туған татыу булһа, илдәгеһен индерер, ике туған аҙар булһа, аралағын алдырыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һарандар үҙ байлығы өсөн шул тиклем ҡалтыранып тора, әйтерһең дә ул уныҡы, әммә ул шул байлығы менән бик аҙ файҙалана, әйтерһең дә ул уныҡы түгел.

**(Бион Борисфенит).**

Хәҡиҡәт тауышы шыма түгел, ә шыма телмәр хәҡиҡәт түгел.

**(Лао Цзы).**

Тормош менән закондар түгел, ә ҡанатлы һүҙҙәр, афоризмдар, әйтемдәр идара итһә, күпкә яҡшыраҡ булыр ине.

**(Билдәһеҙ кеше).**

Һәр кемдә тәбиғәт йә иген, йә сүп үләне рәүешендә урын ала; шуның өсөн тәүгеһенә ваҡытында һыу һибергә, икенсеһен ваҡытында утарға кәрәк.

**(Фрэнсис Бэкон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Хәсән тигән кеше үҙен аҡылға ултыртҡан шундай бер ваҡиға тураһында һөйләй: "Мин үҙемде бик изге кеше һәм башҡаларға мөнәсәбәтем дә яҡты һәм яҡшы тип инана инем. Бер ваҡиға ошо инаныуымды үҙгәртте. Бер саҡ йылға ярында баҫып торғанда минән алыҫ түгел бер ир менән ҡатын ултырғанын күреп ҡалдым. Алдарында шарап шешәһен дә шәйләгәс, "Был кешеләрҙе шарап эсеү, аҙғынлыҡ кеүек насар ғәҙәттән ҡалай итеп төҙәлдерергә булыр икән, был хаҡта уларға барып әйтһәм, улар мине тыңлармы?" тигән уй килде башыма. Шунан улар эргәһенә барып, уйлағанымды әйттем. Шул саҡ йылғала "Ҡотҡарығыҙ!" тигән тауыш яңғыраны. Күп кенә кеше ултырған кәмә бата башлаған икән. Әле генә мин тәрбиәләргә теләгән ир һыуға ташланды һәм йылғанан алты кешене һөйрәп сығарҙы. Үҙенең дә хәле бөтөп, ярға сығып йығылғас, ул миңә: "Хәсән, унда тағы бер кеше ҡалды, ҡотҡар уны..." - тип үтенде. Мин һыуҙан ҡурҡа инем, шуға ла ярҙа баҫҡан килеш ҡатып ҡалдым. Һыуҙағы кеше тыбырсынды-тыбырсынды ла батты. Ярҙағы теге ир ятҡан еренән башын ҡалҡытып былай тине: "Минең эргәмдәге һин боҙоҡ тип уйлаған ҡатын - ул минең әсәйем. Ә беҙҙең алдыбыҙҙа ултырған шарап шешәһендә - һыу. Башҡалар тураһында фекер төйнәр алдынан үҙ ҡылыҡтарыңа баһа бирергә кәрәк..." Мин ул ирҙең алдына теҙләндем һәм унан тәкәбберлегем өсөн ғәфү итеүен һораным. "Аллаһтан һине ғәфү итеүен һорармын", - тип кенә яуап бирҙе ир кеше..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22024

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
17 июнь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 745